ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

5-11 август (урағай)

2023

№30 (1072)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Иғтибар! ***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар булһа, әйтегеҙ: улар 15 августҡа тиклем яҙылып, сентябрҙән алдыра башлай ала - 4 айға яҙылыу хаҡы 532 һум 40 тин. Шулай уҡ ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың төүге яртыһына ваҡытынан алда 771 һум 12 тингә яҙылырға мөмкин. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

МӨХӘРРИРИӘТ.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

...булһаң,

"Киске Өфө"нө уҡыр инең

2

Ир ҡанаты...



6

Үҙенсә, үҙенсәлекле ижад итә

11

Исхаҡ Ғүмәровты...

Гитлер ояһын туҙырған тип беләбеҙ

11-12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ЗАМАН БАШҠОРТО

КЕМДӘР АТ ЯРАТА - улар минең яҡын кешеләрем...

"Һәр төбәктең һәм илдең үҙ визит карточкаһы - яҡшы сифатлы оригиналь продукцияһы була. Донбасс өсөн - ул ташкүмер, Үзбәкстандыҡы - мамыҡ, Төмәндеке - нефть. Башҡортостандың визит карточкаһы - нефть, башҡорт балы һәм, әлбиттә, ҡымыҙ. Ҡымыҙҙы башҡорт тоҡомло бейәләрҙең һөтөнән яһайҙар. Башҡорт атының яҙмышы иһә, башҡорт халҡының яҙмышынан айырылғыһыҙ..." - бар тормошон башҡорт атына бағышлаған күренекле ғалимә, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр Академияһы ағза-корреспонденты, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр Академияһының Малсылыҡ буйынса Ғилми советы рәйесе, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Ираида Әбүбәкер ҡыҙы ӘХӘТОВАның "Башҡорт аты һәм уны ҡулланыу технологияһы" тигән китабы ошо юлдар менән башлана. Уның менән әңгәмәбеҙ башҡорт аты тураһында барыр.

(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).

АФАРИН!

АУЫЛ ДАНЫ - ИЛ ДАНЫ

Йыл һайын Учалы районы Ҡотой ауылында "Олотау йыйыны" була. Быйыл был фестивалдә һигеҙ йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашҡан. Бишенсе йыл рәттән уҙғарылып килгән был йыйында мини-футбол буйынса ярыштар уҙғарыла, етеҙҙәр, хәрәкәт һөйөүселәр, енеү дәрте ташып торғандар бер-береһен уҙыуҙа көс һынаша. Уйындарҙың шарты үтә лә ябай: командалағы ярышсылар бер ауыл кешеләре булырға тейеш. Ябай шарт, әммә ошо ябайлыҡҡа тәрән мәғәнә һалынған - уйынсылар тыуған ауылының данын яҡларға тейеш. Бына ҡайҙа ул дәрт-дарман!

Тыуған ауыл данын яҡлау беҙгә бала саҡтан уҡ һалынған ҡот (код) бит ул! Егет саҡта күрше ауылдар менән әҙ яғалашманыҡ ауыл данын яҡлап. Был осраҡта әлеге шул сәмде футбол уйыны аша тормошҡа ашырып, еңеүсе титулын яҡларға була, саң борҡоһа борҡойҙор, ҡан ҡойошҡа барып етмәй, Аллаһ һаҡлаһын!

Туҡһандан ашыу ауылдашлы ҡотойҙарҙың маһирлығына һоҡланырға ҡала. Улар өсөн "Олотау йыйыны" ҙур ваҡиға, алдан әҙерләнеп ҡаршы ала улар ҡунаҡтарын. Шулай булмай һуң, башҡорттоң ҡунаҡсыллығын әле берәү ҙә инҡар итә алғаны юҡ. Еңеүсегә башҡорт тоҡомло ат бүләк итәләр, һай, йомарт та һуң учалылар! Уларҙың был башланғысы әле республикала ғына түгел, Рәсәй кимәлендә лә билдәлелек алды.

Быйыл беренсе урында әбйәлилдәр, дөрөҫөрәге, асҡарҙар яуланы **(һүрәттә)**. Был еңеүгә нисек өлгәшеүҙәре тураһында һорап, командаңың капитаны Зөлфәт Үтәғоловҡа мөрәжәғәт иттек.

- Бынан биш йыл элек башланған ярышта төүге тапҡыр 2021 йылда ҡатнаштыҡ. Бер ятаҡта йәшәгән, бергә футбол тубы типкән танышым, Ҡотой ауылы егете: "Ярышта ҡатнашырға теләгегеҙ юҡмы?"-тип һорап яҙҙы. Тиҙ арала алты кешенән торған команда йыйып, юлға сыҡтыҡ. Һөҙөмтә лә шул ҡабалан башланған ғәмәл кеүек булды - ун алты команда араһында дүртенсе урын алып ҡайттыҡ. Ярыштан бигерәк, ойоштороусыларҙың ихласлығы хайран итте. Шундай матур ҡаршы алдылар, ҡунаҡ иттеләр. Үҙенә күрә мини-һабантуйға тартым ине был сара. Ҡайтҡас, әлбиттә, егеттәргә һөйләнек, киләһе йылға яҡшы итеп әҙерләнеп барырға килештек. Икенсе йылына ун кеше барҙыҡ, финалға сығып, икенсе урын яуланыҡ. Быйыл командабыҙҙа ун өс кеше булды. 32 команда араһында беренсе урынға сыҡтыҡ...

Бына шулай ҡыҫҡа ғына хәрбиҙәрсә һөйләп бирҙе капитан еңеүҙәренең тарихын. Аңлашыла, был еңеү өсөн улар әҙ тир түкмәгәндер, өс тиҫтә команданы еңеү өсөн әллә күпме күнекмә үткәргәндәрҙер. Зөлфәт үҙе математика уҡытыусыһы, икенсе коллегаһы урыҫ теленән уҡыта. Якутияла! Ярыштарҙа отпускаға ҡайтҡан ваҡытында ҡатнаша. Бер нисә футболсы күрше Мәғнит ҡалаһының металлургия комбинатында эшләй, суд приставында, полицияла хеҙмәт иткәндәре лә бар - бала саҡтан бергә футбол уйнап үҫкән Аҫҡар малайҙары, күптән ир ҡорона ингән ир-уҙамандар - иң йәшенә 24 булһа, олоһона - 34. Ауыл данын яҡлай алғандар ил данын да яҡлай алыр. Был бәхәсһеҙ!

Радик ӨМӨТҠУЖИН.

12+

Ошо һүҙбәйләнештәге "... булһаң" тигәндең алдынан кешенең сифаттарынмы, ғәмәлдәренме белдергән бик күп һүҙҙәр ҡуйырға мөмкин: мәҫәлән, "Аҡлы булһаң", "Илһөйәр булһаң", "Телһөйәр булһаң", "Ғәмле булһаң" һәм башҡалар. Әйткәндәрем менән ысынлап та гәзит, журнал, китаптан айырылған милләттәштең сәмен уятмаҡсымын әле: эйе, аҡлы, илһөйәр, телһөйәр булһаң, һин "Киске Өфө"нө, шулай уҡ башҡорт телендә сыҡҡан башҡа баҫмаларҙы ла уҡыр инең. Хәйер, был ишара әлеге ваҡытта "Киске Өфө"нән айырылмаған уҡыусыларыбыҙға төбәлмәй, әйтелгәндәрҙе үҙ адресығыҙға ҡабул итеп ҡуймағыҙ берүк.

...БУЛҺАҢ,

"Киске Өфө"нө уҡыр инең

Әйе, башҡалар ҙа уҡымай тормайҙыр. Ләкин нимә уҡый бит! Башлыса халыҡ социаль селтәрҙәрҙәге сүпсар, юҡ-бар хәбәрҙәр менән тултыра мәғлүмәт тоҡсайын. Шундай еңел-елпе хәбәрҙәрҙе беҙ "һары матбуғат" тип атаған ниндәйҙер ҡағыҙ баҫмаларҙан да уҡырға мөмкиндәр. Ошо арала бер ҡатындың шулай тип һөйләгәне ҡолағыма салынып ҡалды. Эргәһендәге әхирәте менән әңгәмәләшә был.

- Беләһеңме, шул тиклем шәп бер гәзиткә юлыҡтым. Нисек уны быға саҡлы белмәгәнмендер...

- "Киске Өфө"нө әйтәһеңме? Эйе, мин дә уны Өфөләгеләр өсөн генә сыға икән тип, байтаҡ алдырмай йөрөнөм, - тигән ҡатындың һүҙен икенсеһе йөпләр тип ышанып, тын ҡалдым.

- Юҡ, был беҙҙең гәзит түгел. Татарстанда сыға. Донъяуи йөкмәткеле. Ғүмер буйы ир менән йәшәп, уны нисек әҙәмгә әйләндереү тураһында ла белмәгәнмен. Ир менән ҡатын мөнәсәбәттәре тураһында күп яҙалар... Кешеләрҙәге яман ғәҙәттәр тураһында фәһем алырлыҡ материалдар баҫтыралар. Ул төрлө кәңәш-төңәштәр тиһеңме...

- Һуң, ундай материалдар беҙҙең гәзиттәрҙә лә баҫыла инде...

- Юҡ, юҡ, былар бик матур итеп яҙа. Журналистары шунда уҡ эҙләнеүҙәр, тикшеренеүҙәр алып барып, мәҫәлән, ир менән ҡатындың ни өсөн айырылғанын, ниңә хыянат иткәненә тиклем асыҡлап, тикшереп, төбөнә тоҙ ҡуйып уҡ ҡуя...

- Бөтә донъя ғәйбәте шунда инде әтеү. Мин ундай гәзиттәрҙе уҡырға яратмайым...

Ярай әле әхирәттәрҙең береһе тәүгеһенән аңлыраҡ булып сыҡты. Ә бит бөгөн күптәр ошолай: уларҙы тормоштағы ғәйбәт-ғибрәт кенә ҡыҙыҡһындыра. Бик йәл...

...Әбеҙ бына егерме йыл инде милләтте тәрбиәләргә, уға дөрөҫ юл күрһәтергә, дөрөҫ ҡиммәттәр һеңдерергә тырышып ижад итәбеҙ "Киске Өфө"бөҙҙө. Үтә яуаплы бурыс атҡарабыҙ, тигән ышаныстабыҙ. Әммә... Беҙ һуңлағанбыҙмы, йәғни бындай гәзитте уҡыусылар үткән заманда тороп ҡалғанмы? Әллә "поездан алда йүгерәбеҙме", йәғни киләсәк кешеләренә төбәлгәнме беҙ яҙғандар? Бөгөн тиражыбыҙҙың кәмегәндән-кәмегәнен күреп, шулай тип ярһып уйланабыҙ. Бына әле быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу һөҙөмтәләрен ҡарап, ғәжәпкә ҡалып ултырыуыбыҙ. Хатта гәзитебеҙҙе иң күп алдырған Баймаҡ районында ла 200-ләп кенә уҡыусыбыҙ ҡалған...

...Шундай риүәйәт иҫкә төшә: "Бер кеше Аҡһаҡал эргәһенә килгән дә, шулай тигән: "Һеҙ бына гел аҡыллы һүҙҙәр һөйләйһегеҙ, өгөт-нәсихәт уҡыйһығыҙ, иманға саҡыраһығыҙ. Ләкин һеҙҙең арттан берәү ҙә эйәрмәй, һөйләгәндәрегеҙгә ҡолаҡ һалмай. Мин иһә кешеләргә төрлө ахмаҡлыҡтар, аҙғындар, эскеселәр тураһында һөйләйем, ниңәлер минең арттан эйәрәләр..." - тигән. "Эйе, мин үҙемдең вәғәздәрем менән кешеләрҙе бейек тауға менергә өндәйем бит, ләкин тауға үрмәләргә һәр кемдең хәленән килмәй. Һәр кем дә ысын Хәҡиҡәт юғарыла, тау башында икәнен белмәй, белер ине лә, тик беҙҙең аҡылды тыңламай", - тип яуап биргән Аҡһаҡал".

Был риүәйәттәге ишараны шәйләгәнһегеҙҙер, ул бөгөн туған телдә сыҡҡан баҫмаларҙы уҡымаған милләттәштәргә лә ҡағыла булыр...

...Әйткәндәй, ошо көндәрҙә вацаптағы чаттарҙа бер видеояҙма йөрөнө. "Японлар ни өсөн оҙаҡ йәшәй?" тигән һорау ҡуйылғайны унда. Япондарҙа бөгөн биш йөҙ меңләп йөҙ йәште үҙғандар йәшәүе, ун биш йылдан уларҙың һаны миллионға етәсәге тураһында хәбәр итте сығыш яһаусы. Бындай хәл башҡа бер илдә лә булмауын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. Артабан был хәлдең серен былай тип аңлатты: "Йөҙйәшәрлеккә уларҙың туҡланыуы, сей балыҡ, емеш-еләк ашауы сәбәпсе тип уйлаһағыҙ, яңылышаһығыҙ. Былай туҡланыусы илдәр бихисап, иллә-мәгәр уларҙа оҙаҡ йәшәүселәр барыбер күпкә кәмерәк. Был хәлдең сере - япон кешеһе үҙ уйҙарын, үҙ һүҙен контролдә тоторға өйрәнгән. Улар кем менән генә һөйләшкәндә лә уның кәйефен төшөрөрлөк һүҙ әйтеүҙән, юҡ тип әйтеүҙән тыйыла. Улар үҙҙәренең ләғәтенән негативты ла, юҡ тигәнде лә алып ташлаған. Улар насар уй, насар хәбәр, ғәйбәт-фәләндең кеше кәйефенә генә түгел, һаулығына ла насар йоғонто яһағанын белә. Бына шундай позитив көйләнештә булған өсөн дә улар иҡтисади яҡтан иң алға киткән илдә йәшәй. Ә бит Япония дөгө сәсерлек тә ер, ҡаҙылма байлыҡтар ҙа юҡ..."

Эйе, беҙ артыҡ ныҡ бирелдек Негатив ғәли йәнәптәре йоғонтоһона, беҙҙең бар бәләләргә, бар сир-ҡазаларға уйҙарыбыҙ сәбәпсе, тип саң ҡаға бөгөн Кешелектең йәшәйеше өсөн борсолған ғалимдар, зыялылар. Ошоно аңлап, яҡты уйҙар менән йәшәгәндәр, әлбиттә, Аллаһ хозурында, фатихаһында, һөйөүендә... Ә бына негативҡа, ҡурҡыуға, нәфрәткә, асыуға, үпкәләүҙәргә, ҡыҫҡаһы, кешенең нәфселе сәмен ҡуҙғытыуға юлыҡтыра торған мәғлүмәт сығанаҡтары уны Аллаһ хозурына ирештерә алырмы? Һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ...

...Әшулай ҙа беҙ гәзитебеҙ биттәрендә урын алған хәҡиҡәти һүҙҙең, зыялыларыбыҙ фекерҙәренең бар милләттәштәргә лә барып етмәүенә көйөнә-көйөнә, аҙ ғына тираждар менән булһа ла, баҫмабыҙҙы нәшерләүҙе дауам итәбеҙ әле. Нисек кенә булмаһын, аҡ ҡағыҙ биттәре аша кешеләргә өгөт-нәсихәт, донъяуи тәжрибә-һабаҡтар, изгелеккә, яҡшылыҡҡа ышаныу кеүек ҡиммәттәрҙе еткереүҙе туҡтатырға ярамай, тибеҙ. Әгәр ҙә беҙ булмышыбыҙҙан ситләшәбеҙ, аңыбыҙҙы, уйҙарыбыҙҙы үҙлегебеҙ ерлегендә ҡормайбыҙ икән, юҡҡа сығыуҙың сәбәбе ошо булырға ла мөмкин. Ошо хәҡиҡәтте аңларға ярҙам итеү бурысыбыҙ.

Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө" гәзитендәге аҫыл һүҙҙәрҙе уҡып, бергәләп уйланайыҡ, донъяуи һорауҙарға бергәләп яуап эҙләйек, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, аҡыл тирәйек, кәңәш-төңәш итәйек. Рухланайыҡ, тип әйтмәксе инем...

Гөлфиә ЯНБАЕВА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты 2025 йылда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләүгә әҙерләнеү һәм уны үткәреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Хөкүмәткә өс ай эсендә саралар планын әҙерләү бурысы йөкмәтелә, тиелә документ тексында. Шулай уҡ Министрҙар кабинеты сит ил лидерҙарының ҡатнашыуын күҙ уңында тоторға һәм ветерандарҙың социаль-иҡтисади хәлен яҡшыртыу буйынса саралар күрергә тейеш.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Рәсәй тимер юлдары" асыҡ акционерҙар йәмғиәте филиалы - Куйбышев тимер юлының төбәк структур бүлексәләре хеҙмәткәрҙәрен һөнәри байрамдары менән ҡотланы. Билдәләүенсә, быйыл республикала Өфө - Имеретинский курорты маршруты буйынса ике ҡатлы яңы поезд йөрөй башланы. Юғары тиҙлекле "Ҡарлуғас" һәм "Орлан" поездары Ырымбур һәм Силәбе өлкәләренә яңы маршруттар асты. Алда беҙҙе күләмле "Өфө тимер юлы ҡулсаһы" һәм Сибай - Подольск - Новорудное юлы проекттары көтә, тине Радий Хәбиров.

✓Россельхознадзор Әбйәлил районының Атауҙы ауылы умартасыһының шәхси хужалығында бал ҡорттарының күпләп һәләк булыу сәбәбен асыҡлай. Хәбәр итеүҙәренсә, күсмә тикшереү үткәрелгән һәм райондың ауыл хужалығы предприятиелары баҫыуҙарҙы ауыл хужалығы культуралары ҡоротҡостарына ҡаршы ағыулы химикаттар менән эшкәрткән икәне асыҡланған.

✓Башҡортостан биләмәһендәге барлыҡ урман янғындары һүндерелгән, тип белдерҙеләр республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетында. Белорет районы урманындағы һуңғы янғынды һүндереү өсөн 16 кеше һәм алты берәмек техника йәлеп ителгән. "Янғын йәһәтенән хәүефле осор башланғандан алып төбәктә 3400 гектарҙан ашыу майҙанда 135 тәбиғәт янғыны сыҡҡан", - тип белдерҙе ҡотҡарыусылар һәм янғын хәүефһеҙлеге талаптарын үтәүҙең мөһимлеген иҫкә төшөрҙө.

✓Башҡортостанда II "Иң яҡшы йорт. Иң яҡшы ихата" Бөтә Рәсәй конкурсы башланды. Уны ойоштороусылар - Рәсәй Федерацияһының Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы, "Территорияларҙы үҫтереү фонды компанияһы һәм "Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ Контроль" торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә милли йәмғәт контроле үҙәге" коммерцияға ҡарамаған партнерлыҡ.

✓ *Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы төбәктәрендә йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән эшҡыуарҙар етештергән шифалы эсемлектәр үҙәкләштерелгән бер төбәктә тупланып, баш ҡаланың сауҙа нөктәләренә еткерелһә ине.*

ӘЙТЕР һҮҘЕМ БАР!

Магазиндарҙа һирәк-һаяҡ осраған ҡымыҙ эсемлеген күрһәм йә уны ҡайҙалыр ауыҙ итергә тура килһә, байтаҡ йылдар элек булған бер ваҡиға йәнемде әрнетеп иҫкә төшә. Онотолмай ҙа, хәтерҙән дә сыҡмай, сөнки ул үткәндәр менән генә бәйле түгел, ә бөгөнгө тормошобоҙҙоң да сағылышы.

ӘЖӘЛГӘ ДАРЫУМЫ ҠЫМЫҘ?



Сыуашстандан килгәйне ул хәбәр. Евгения Ивановна исемле бер танышым үлем түшәгендә ятҡан Анатолий исемле ҡәйнешенең ҡымыҙ эсергә теләүе, ләкин үҙҙәрендә уны таба алмауҙары тураһында яҙғайны. Ғүмер буйына ҡымыҙ эшләү менән дан тотҡан Башҡортостанда ла уны табыуы еңел булманы ул саҡта. Ахыр сиктә, таныштар ярҙамында партияның Өлкә комитеты буфетына инеп, өс-дүрт шешә ҡымыҙ алып, аэропортҡа киттем. Мин барып еткәндә, Чебоксарға осоусылар, иғланды ишетеп, сиратҡа теҙелгәйне. Тәүге торған кешенән алып иң аҙаҡҡы пассажирға тиклем ҡымыҙҙы үҙҙәре менән алыуҙарын үтендем. Береһе лә риза түгел. Йә ситкә ҡарайҙар, йә "ала алмайым" тиҙәр. "Һуң, уның бер ҡыйынлығы ла юҡ та баһа. Һеҙҙе аэропортта уҡ ҡаршылаясаҡтар, әллә ҡайҙа илтеп йөрөргә түгел", - тип ҡарайым. Тик барыһы ла, әйтерһең, туң йөрәкләләр. "Үлем түшәгендә ятҡан кешенең һуңғы үтенесе бит, нисек шуны аңламайһығыҙ?" - тип илап ебәрҙем түҙмәй. Шунан һуң ғына бер пассажир ризалашты. Әлеге ваҡыттағы шикелле кеҫә телефоны юҡ. Самолет күпме сәғәт осалыр, тиҙ генә автобуска ултырып, ҡаршы алһындар, тип әйтер өсөн шылтыратырға Матбуғат йортона киттем...

Шунан бирле 25 йыллап ваҡыт үткән. Ә нимә үҙгәрҙе һуң? Магазин кәштәләрендә ҡымыҙ тулып ятамы? Ҡайҙа беҙҙең башҡорт аттары? Ҡышҡы тибендә йөрөгән өйөр-өйөр йылҡы көтөүҙәре? Йылҡысылыҡты үҫтереү буйынса Хөкүмәт тарафынан ҡарар ҙа ҡабул ителгәйне шикелле, яңылышмаһам. Һөҙөмтәһе генә юҡ, ҡыҙғанысҡа. Магазиндарҙа Бәләбәй менән Шарандан бер-ике эшҡыуарҙың етештергән ҡымыҙы күренеп ҡала ул, ләкин сифаты, составы буйынса Өфөләге 119-сы йылҡы заводыныҡына етмәй. Ҡайҙа Толстой, Туҡай, Чехов килеп дауаланып ятҡан данлыҡлы ҡымыҙыбыҙ? Башҡортостан брендына әйләнгән бал һымаҡ уҡ дауалау көсөнә эйә булған шифалы ҡымыҙҙы үҙебеҙҙә лә көндөҙ шәм яндырып эҙләһәң дә табырлыҡ түгел. Уның ҡарауы, һыраның ниндәй генә төрө юҡ. Йылҡысылыҡ йәки башҡа төр фермерлыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәргә мең кәртә ҡоролған. Ситтән килгән килмешәктәр яйлап та, майлап та тиҙ генә үҙ эшен асып ебәрә, ә урындағы халыҡҡа бындай бәхеткә өлгәшеү өсөн айҙар, йылдар буйы түрәләрҙең ишектәрен ҡағырға тура килә.

Республикабыҙҙа ҡымыҙ менән дауалау буйынса махсуслашҡан бер нисә шифаханала булыусыларҙан да ундағы эсемлектең сифаты хаҡында ҡәнәғәтһеҙлек белдергән фекерҙәрен ишетергә тура килде. Табиптар ҡымыҙ эсергә тәҡдим иткән осраҡта сирлеләр райондарҙа ҡымыҙсылыҡ менән шөғөлләнгән йәки үҙҙәре, туғандары өсөн генә яһаған оҫталарҙы эҙләй башлай. Өфөләге күп кенә зыялыларҙың, мәҫәлән, Шишмә районындағы Ҡара Яҡуп ауылындағы Зөһрә Усманова апайға барыуҙарын беләм. Ҡымыҙ эсәм тип Баймаҡ-ҡа, Әбйәлилгә, Учалы яҡтарына юлланыусылар ҙа бар. Ә ошо йүнәлештә эшләргә теләүсе кешеләргә, йылҡыларын ишәйтергә, малдарҙы тотоу, ҡымыҙҙы бешеү, махсус сауҙа нөктәләре булдырыу өсөн шарттар тыуҙырырға ярҙам итергә мөмкин түгелме ни? Республикабыҙға килеүсе ҡунаҡтар ысын ҡымыҙҙы ауыҙ итеп хушһыныр ине.

Ҡышҡыһын Көйөргәҙе районында үткәрелгән бер сарала ҡатнашырға тура килде. Ҡунаҡтарҙы икмәк, ҡымыҙ менән ҡаршы алдылар. "Был ваҡытта ҡайҙан таптығыҙ ул ҡымыҙҙы?" - тип һораным, аптырап. Эргәмдә торған район вәкиле: "Кипкән ҡоротто иҙеп, һыуға болғатып эшләнеләр", - тине. Халыҡ бер ваҡытта ла аптырап ҡалмаған. Яҡташтарымдың ҡороттан ҡымыҙ яһауына һоҡланырға ғына ҡала.

Бынан тиҫтә йыл элек яҡташым, танылған эшҡыуар Иршат Аҫылғужин тағы бер шифалы эсемлек - буҙа етештереү буйынса һәйбәт эш башлап ебәргәйне. Уны бик яратып эскәйне баш ҡала халҡы, файҙаһын белеп ҡалып, эҙләп йөрөй торғайнылар хатта. Ни сәбәптәндер, был эш тә туҡтатылды.

Борон беҙҙең халыҡ холестерины булмаған йылҡы итенән бына тигән һурпаны ҡоротлап эсеп ебәргән, ә уның алдынан ҡымыҙ менән хушһынған. Әле ҡороттан яһалған ҡымыҙ эҫәбеҙ. Әлбиттә, ҡорот та бик файҙалы. Ул ашты эшкәртеүгә, һеңдереүгә булышлыҡ итеүсе фесталды ла алмаштыра, тиҙәр. Ләкин ҡорот - ҡорот урынында, ҡымыҙ - ҡымыҙ урынында.

Шөкөр, ниһайәт, республикабыҙҙа йылҡысылыҡты үҫтереү буйынса дәүләт программаһы ҡабул ителде. Баймаҡта икенсе йыл рәттән "Башҡорт аты" фестивале үткәрелә. Ул халыҡ-ара кимәлгә күтәрелде. Башҡортостан Башлығы башланғысы менән йылҡысылыҡ, ҡымыҙ эшләү һәм халыҡ кәсептәре традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү, башҡорт тоҡомло аттарҙы арттырыу буйынса ҙур эштәр башҡарылыр тип өмөтләнәбеҙ. Тик Өфө халҡы Урал аръяғы райондарының ҡымыҙын ҡасан ауыҙ итер икән? Өфөләге 119-сы йылҡы заводы, Бәләбәй, Йәрмәкәй ҡымыҙҙары күренә ул. Ләкин кәрәк мәлендә етерлек кимәлдә табырмын тимә, етмәһә, улар ҙа бөтә магазиндарҙа һатылмай.

Баймаҡ, Әбйәлил, Учалы төбәктәрендә йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән эшҡыуарҙар етештергән шифалы эсемлектәр үҙәкләштерелгән бер төбәктә тупланып, баш ҡаланың сауҙа нөктәләренә еткерелһә ине. "Башҡорт аты" фестивале байрам сараһы булараҡ ҡына үтмәһен, ә эшлекле һөҙөмтәләре менән дә халыҡты ҡыуандырһын ине.

Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

СИФАТ БИЛДӘҺЕ... ҡасан ҡайтыр?

Ишеттегеҙме әле? 2024 йылда Рәсәй мәктәптәрендә уҡыусыларҙың дәрескә кейә торған кейеме (форма) ГОСТ талаптары менән етештерелә башлаясаҡ, имеш!

Ә бит был турала, берҙәм мәктәп кейемендә йөрөү хаҡында, бынан бер нисә йыл алдараҡ та һүҙ булып алғайны бит инде. Унда мәктәп кейеменең сифаты еңел, ләкин ныҡ һәм һауа үткәреүсән тауарҙан етештерелергә тейеш, тип әйтеп кителде. Ләкин, асыҡланыуынса, етештереүселәр мәктәп кейеме өсөн сифатлы тауар әрәм иткеләре килмәй икән, шуның өсөн киләһе йылдан "мәктәп формаһы" атамаһы (маркировка) менән сыҡҡан балалар кейеме мотлаҡ яңы ГОСТ талаптары буйынса тегелергә тейеш буласаҡ. Улар уңайлы, матур, аллергия тәьсире булмаған, балалар йәшәгән урындағы климатҡа ярашлы блузкалар, күкрәксә, пинжәк, йылы кофталар, күлдәк, салбар кеүек комплекттан торасаҡ. Өҫтәүенә, был кейемдәрҙе йыуғанда буяуы сыҡмаҫҡа һәм биш тапҡыр йыуғанда ла кейем ултырмаҫҡа тейеш, тип әйтелә яңы ГОСТ талаптарында.

Ярай, мәле килеп еткәс, күренер: яҡшы яҡҡа үҙгәрерме мәктәп кейеменең сифаты? Үкенескә, эш талап ҡуйыуҙан ғына тормай шул, уның үтәлешен тикшереп тороу өсөн элекке "халыҡ контроле" кеүегерәк талапсан орган да кәрәк. Юғиһә бит, етештереүселәр бөтөнләй бәйелдән аҙҙы: бөгөн беҙҙе ниндәй генә эт ашамаҫ "ризыҡ" менән һыйламайҙар. Иң изге ризығыбыҙ икмәкте ашауҙан да тыя бит хәҙер диетолог һәм нутрициологтар! Биллә̄һи, ауыҙҙары ла ҡыйшаймай, икмәкте "зарарлы" тип атайҙар. Бында табиптарҙың ғәйебе юҡ, әлбиттә, ә бына кем он сифатын боҙа, уға, теләһә ниндәй ҡушымталар, химия өҫтәй; икенсенән, икмәк бешереүселәр үҙ "күстәнәстәрен" дә мул ғына ҡушып бешерә - бына шунан боҙола ла инде файҙалы, изге ризығыбыҙ.

Хәйер, ниндәй төр аҙыҡ-түлектә алһаң да - шул уҡ зыян: һөт һәм унан етештерелгән ризыҡтарға аҡһым, химик матдәләр өҫтәүҙәре хаҡында яҙа мәғлүмәтле сығанаҡтар. Ит-колбаса ризыҡтары эргәһенә яҡын барыуы ла хәүефле. "Таҙа" ит күренгән ризыҡта ла антибиотик, үҫеш гормондары барын уҡып беләбеҙ. Ахыр сиктә, "Бәлки, йоморткаға таҙалыр?" тигән һорау биреп көлдөрҙөләр мине яңыраҡ. - Уның эсенә ниҙер ҡушып булмай бит, ул - бөтөн". Юҡ, хатта йоморткаларға ла ГОСТ тамғаһы һуғылмай, сөнки тауыҡтарҙы нимә менән һыйлауҙары шулай уҡ билдәле. Ул мәхлүктәр нимә ашай, йоморткаһы ла - шул. Етештереүселәр хәҙер бөтәһе лә үҙ мәйелдәренә ҡуйылған ТУ тамғаһы менән нимә теләй, шуны эшләп сығарып, кеҫә ҡалынайтыу яғын ҡарай, ә беҙҙең һаулыҡ уларға бар ни, юҡ ни...

Рәсәйҙә ҡасан бөтөн төр аҙыҡ-түлектәргә лә ГОСТ тамғаһы әйләнеп ҡайтыр икән һуң? Тамғаны һуғырға булалыр ҙа ул, тик бына сифатты тикшереү органдарына ул саҡ алһыҙ-ялһыҙ аяҡтан йығылғансы эшләргә, тикшерергә, сифат өсөн көрәшергә тура киләсәк, ә был кемгә кәрәк? Мутлыҡ, урлашыуҙар һәм башҡа енәйәттәр шул тиклем тәрән тамыр ебәргәнен дә беләбеҙ, тик ана шуға ҡаршы нисек көрәшеү юлдарын ғына белмәйбеҙ...

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Потенциаль инвесторҙарға Башҡортостандың Ишембай районында уйынсыҡтар производствоһын булдырырға тәҡдим итәләр. Яҡынса баһалауҙар буйынса, был тәҡдимде тормошҡа ашырыу бюджеты - 45 яңы эш урыны булдырыу мөмкинлеге менән 316,9 миллион һум. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Предприятиела пластик конструкторҙар, ҡомда уйнау, төрлө йәштәге балалар өсөн дидактик һәм башҡа төрлө уйынсыҡтар етештереү күҙаллана.

✓1 августа Башҡортостанда бензин йәнә ҡиммәтләнде. Мәҫәлән, "Башнефть" автозаправкалау станцияларында яғыулыҡҡа хаҡ, маркаһына ҡарап, 20 һәм 50 тингә артҡан. АИ-100 маркалы бензиндың бер литры - 61,15 һум, АИ-95 - 51,15 һум, АИ-92 47,95 һум тора. "Лукойл" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында ла автомобиль яғыулығына хаҡ күтәрелгән. Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығында быны әлеге яғыулыҡ төрөнә биржа хаҡтарының артыуы менән аңлаталар.

✓Башҡортостанда Владлен Татарский исемендәге пилотһыҙ осоу аппараттары операторҙарын тактик һәм махсус тактик әҙерләү үҙәгендә уҡыу мәсьәләләре буйынса чат-бот эшләй. Һанлы ярҙамсынан БПЛА операторы һөнәре, әҙерлек шарттары, ваҡыты, формаһы һәм хаҡы, күнекмәләр барышында тәьмин итеү, потенциаль кандидаттар өсөн йәш һәм һаулыҡ буйынса сикләүҙәр тураһында белергә мөмкин.

✓Башҡортостан спортсыһы Алһыу Минәзева Алтайҙа ишеү слаломы буйынса халыҡ-ара ярыштарҙа ике миҙал яуланы. Республиканың Спорт министрлығы хәбәр итеүенсә, милли йыйылма команда составында Алһыу Минәзева каякта - алтын, ҡатын-ҡыҙҙар каноэһында көмөш миҙал алды. Турнирҙа Рәсәй, Иран, Һиндостан, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Тажикстан һәм Беларусь командалары ҡатнаша.

✓"Башҡорт аты" халыҡ-ара фестивалена үзбәк һәм ҡарағалпаҡ опера йырсыһы Женисбек Пиязовтың килеүе көтөлә. Опера йырсыһының сығышын 12 августа фестивалдең концерт программаһында күрергә мөмкин. Мөслим Магомаев исемендәге халыҡ-ара йырсылар конкурсы еңеүсеһе, Үзбәкстандың халыҡ артисы, Ҡарағалпаҡстан Республикаһының атҡаҙанған артисы Женисбек Пиязов бик күп абруйлы халыҡ-ара конкурстарҙа һәм фестивалдәрҙә ҡатнашҡан.

✓ *2023 йылдың 1 сентябрендә махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың 589 балаһы беренсе класҡа бара. Дөйөм алғанда, быйыл республикала 53 меңдән ашыу бала тәүге тапҡыр парта артына ултыра.*

ҠЫҪҠАСА

УТЫҘ ӨС ЙЫЛ!

Рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүенә утыҙ өс йыл тулыуҙы билдәләүгә әҙерлек тураһында указ баҫылған. Документта 2023 йылда Республика көнөнә әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты составы раҫланған. Ойоштороу комитетына тейешле сараларҙы әҙерләргә һәм үткәреү планын раҫларға ҡушылған. Муниципаль район-ҡала округтары хакимиәттәренә 2023 йылдың октябрендә ҡалаларҙа, муниципаль райондарҙың һәм ауыл биләмәләренең административ үҙәктәрендә Республика көнөнә арналған тантаналы саралар үткәрергә тәҡдим ителә. Улар учреждениеларҙы, урамдарҙы, майҙандарҙы, йәмәғәт биналарын һәм торлаҡ кварталдарҙы Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт символикалары менән биҙәргә, шулай уҡ мәҙәни, спорт саралары, йәрминкәләр ойоштороргә тейеш. Эске эштәр министрлығы байрам ваҡытында йәмәғәт тәртибен һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итергә бурыслы. Башҡортостан Хөкүмәтенә указды ғәмәлгә ашырыуға бәйле сығымдарҙы финанслау сығанаҡтарын билдәләргә ҡушылған.

✓ **Башҡортостанда "Башҡортостан Республикаһында ауыл старосталары тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законының 3-сө статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон ҡабул ителде һәм көсөнә инде.** "Законда ауыл старосталары итеп тәғәйенләнә алған кешеләр даирәһе киңәйтелде, - тип хәбәр итте Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Хәҙер даими булмаған нигеҙҙә вәкәләттәрҙе башҡарған муниципаль депутаттар, шулай уҡ ошо биләмәлә өйө булған, әммә үҙҙәре унда даими йәшәмәгән граждандар ҙа староста була ала". Парламент спикеры фекеренсә, был яңылыҡ халыҡ мәнфәғәтендә старосталар институтын үҫтереүгә булышлыҡ итергә тейеш. "Ауыл халҡы өсөн көнүҙәк мәсьәләләрҙе хәл итергә әҙер граждандар староста итеп тәғәйенләнә, - тине Константин Толкачев. - Старосталар үҙ эше өсөн аҡса алмай, был - уларға өҫтәмә йөкләмә".

✓ **Марий Элда ҡурҡыныс фажиғә булған. "Марий Чодра" милли паркындағы Ялъчик күлендә ҡупҡан дауыл һөҙөмтәһендә туристарҙың палатка лагерына ағастар ҡолаған.** Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хәбәр итеүенсә, 27 кеше яралanған, етәүһе үлгән, улар араһында өс бала бар. Һәләк булғандар иҫәбендә - Башҡортостандың Стәрлебаш районында тыуып үҫкән 32 йәшлек Гөлнара С. һәм уның ике кескәй балаһы. Өлкәне - ике йәштә, икенсеһе ике айлыҡ ҡына. Ғаилә Ҡаҙанда йәшәгән, Гөлнара Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлап, Татарстан Фәндәр академияһының халыҡ ижады бүлеге ғилми хеҙмәткәре булып эшләгән. Гөлнараның ире әлеге ваҡытта ауыр хәлдә Волжск дауаханаһында ята. Стәрлебаш районы хакимиәте башлығы Рөстәм Рахманғолов хәбәр итеүенсә, һәләк булған әсәне һәм уның сабыйҙарын алып ҡайтып ерләү өсөн аҡса йыйыу иғлан ителгән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ХӘСТӘРЛЕКТӘН ӨҘӨЛМӘҺЕНДӘР...

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үткән аҙнаның һуңында эш сәфәре менән Донбасҡа барып ҡайтты. Ул унда Миңлеғәле Шайморатов исемендәге ирекле батальон яугирҙары менән осраште һәм уларҙы дәүләт наградалары - Батырлыҡ ордены, "Батырлыҡ өсөн" миҙалы, шулай уҡ генерал Шайморатов ордендары һәм миҙалдары менән бүләкләне.

"Улар биш ай яуҙан сыҡманы, өс ай Артемовскиҙың уң флангыһын һаҡланы. Беҙ егеттәребеҙгә дәүләт наградаларын тапшырҙыҡ. Бығаҫа булмағанса 200-ҙән ашыу яугирҙы бүләкләнек, 100-ҙән күберәге ҡыйыулығы һәм батырлығы өсөн генерал Шайморатов миҙалдарын алды. Беҙ батальоныбыҙ менән ғорурланабыҙ - ул беренсеһе булды, үҙенең исемен махсус хәрби операция героикаһына яҙҙы. Ир-егеттәребеҙ хәрби хеҙмәте менән ошо наградаларға лайыҡ булды. Уларға оло рәхмәт белдерәбеҙ һәм алдарында түбәнселек менән баш эйәбеҙ", - тине республика етәксеһе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә.

Радий Хәбиров шулай уҡ яугирҙарҙы борсоған мәсьәләләрҙе хәл итергә ҡушты. "Муниципалитет башлыҡтарына мөрәжәғәт итәм, унда һеҙҙең райондарҙан да егеттәр бар, уларҙың үтенестәре төрлө. Кемдер ата-әсәһенә машина менән ҡырсынташ килтереүҙе, кемдер ата-әсәһен дауаханаға һалыуҙы, дауалауҙы һорай. Бөгөн мин йөкләмәләр проекттарына ҡул ҡуям, иртәгә үк гәмәлгә ашыра башлағыҙ. Был аҙнала барыһын да үтәргә кәрәк", - тине республика етәксеһе.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың муниципалитет башлыҡтарына махсус хәрби операция яугирҙарының балаларын беренсе класҡа оҙатып барырға ҡушты. "Балаларҙың беренсе класы бер генә тапҡыр була. Бөтәһенең дә ата-әсәһе килә алмай. Ошо балалар менән бергә 1 сентябрҙә тантаналы линейкала ҡатнашһаҡ, дөрөҫ булыр", - тине Радий Хәбиров.

Башҡортостандың мәғариф министры һүҙҙәренсә, 2023 йылдың 1 сентябрендә махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың 589 балаһы беренсе класҡа бара. Дөйөм алғанда, быйыл республикала 53 меңдән ашыу бала тәүге тапҡыр парта артына ултыра.

УҢЫШҠА ИҪӘП ТОТОЛА

Баҡалы районында ураҡ эштәре буйынса көнбайыш райондарҙың семинары үтте.

"Быйыл төбәкте артығы менән тәьмин итергә мөмкинлек биргән уңышҡа иҫәп тотабыҙ, 3,4 миллион тоннанан да кәм булмаған иген һәм хуҙаҡлы иген культуралары, 600 мең тоннаға яҡын майлы культуралар, 1,6-1,7 миллион тонна самаһы шәкәр сөгөлдөрөн йыйып алырға уйлайбыҙ", - тип хәбәр итте Хөкүмәт вице-премьеры - ауыл хуҙалығы министры Илшат Фәзрахманов. Санкция баҫымына ҡарамаҫтан, ведомство экспортты үҫтереү юлдарын эҙләй, тип белдерҙе ул. "Арзаныраҡ хаҡҡа техника һатып алыу һәм продукцияны ҡиммәтерәккә һатыу өсөн варианттар эҙләйбеҙ. Хәҙер төп партнёр итеп Ҡытайҙы күрәбеҙ, Африка илдәренә йүнәлеште үҫтерергә ниәтләйбеҙ. Күреүебеҙсә, продукцияға хаҡтар арта башланы", - тине вице-премьер. Уның һүҙҙәренсә, Ауыл хуҙалығы министрлығына көн һайын яңы инвесторҙар килә. "Был йәнә бер тапҡыр аграр тармаҡтың перспективалы булыуын раҫлай, беҙҙең республика, илдә генә түгел, бөтә донъяла ла ошондай йүнәлеш күҙәтелә. Тимәк, ерҙең, айырыуса башҡорт еренең, баһаһы арта ғына", - тип билдәләне Илшат Фәзрахманов.

Семинарҙа ҡатнашыусылар, ғәҙәттәгесә, ауыл хуҙалығы техникаһы өлгөләре менән танышты, яңы технологияларҙы өйрәнде, иген, ҡуҙаҡлы, май бирә торған һәм техник культураларҙың төрлө сорттары һәм гибридтарының тәжрибә сәсеүлектәрен ҡараны.

ҠЫМЫҘСЫЛАР ЯРЫША

12 августа, Баймаҡ районына республиканың төрлө мөйөштәренән ҡымыҙ бешеү оҫталары йыйыла.

Башҡортостанда милли эсемлеккә, уны популярлаштырыуға арналған 17-се конкурс "Башҡорт аты" халыҡ-ара фестивале барышында уҙғарыла. Иң яҡшыларын Баймаҡ районының Граф күле буйындағы "Ҡымыҙфест" майҙансығында асыҡлайҙар. Конкурс бер нисә этапта ойошторола. Беренсе этап ҡатнашыусыларҙың теоретик белемдәрен тикшереүҙе күҙ уңында тота. Улар 15 минутта 20 тест һорауына яуап бирергә тейеш. Икенсе этапта жюри ағзалары шифалы эсемлекте тәмләп ҡарай, уның сифатын баһалай. Шулай уҡ конкурста ҡатнашыусылар менән түнәрәк өҫтәлдә ҡымыҙ етештереп һатыуҙың көнүҙәк мәсьәләләрен тикшереү күҙаллана. Конкурс йомғаҡтары буйынса чемпион-ҡымыҙ бешеүселәр һәм "Ризыҡты үҙенсәлекле биҙәү", "Иң йәш ижади ҡатнашыусы", "Иң өлкән һәм тәжрибәле ҡымыҙ бешеүсе", "Тамашасылар һөйөүе призы" номинациялары еңеүселәре билдәләнә. Ҡунаҡтарҙың Башҡортостанда етештерелгән ҡымыҙ төрҙәрен тәмләп ҡарау, башҡорт халҡының милли көнкүреше менән танышыу мөмкинлеге бар. Бынан тыш, илдең бөтә төбәктәренән шифалы эсемлекте һатыу майҙансығы ойошторола. Конкурс иртәнге 10-сы яртыла башлана.

ИЛһӨЙӘРЛЕК ҠАНУНЫ

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары "Башҡортостан Республикаһында илһөйәрлек тәрбиәһе биреү тураһында" закон ҡабул итте. Тиҙҙән республика етәксеһе документҡа ҡул ҡуйырға тейеш, тип хәбәр итте Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән.

- Бөгөн илебеҙҙә, республикабыҙҙа традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе, үҙенсәлекле мәҙәниәтте, тарихи хәтерҙе һаҡлау өсөн байтаҡ эштәр башҡарыла. Асылда быларҙың барыһы ла - "патриотизм" төшөнсәһенең бер өлөшө, - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Ватансылыҡ ҡиммәттәре һәм ҡараштары шәхестең ныҡлы әхлаҡи нигеҙен тәшкил итә, ә илһөйәрлек милли идея булараҡ йәмғиәттә берләштерергә һәләтле. Республикала илһөйәрлек йүнәлешендәге бик күп саралар уҙғарыла, ләкин эш системаға һалынмаған. Беҙ ҡабул иткән закон республикабыҙҙа патриотик тәрбиә биреү системаһының концептуаль базаһы, нигеҙе булырға, был эшкә йәлеп ителгән ведомстволарҙың һәм ойошмаларҙың үҙ-ара килешеп эшләүен тәьмин итергә тейеш. Законда илһөйәрлек тәрбиәһе биреүҙең төп төшөнсәләре, маҡсаттары һәм бурыстары билдәләнгән. Патриотик тәрбиә биреү системаһын республика, урындағы бюджеттар, шулай уҡ Рәсәй ҡануниәтенә ярашлы башҡа сығанаҡтар иҫәбенә финанслау ҡаралған.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Октябрь революцияһы урамын реконструкциялауға бәйле 2023 йылдың 14 августына тиклем автомобилселәр өсөн сикләү индерелә. 1 августан Ленин урамында - Пушкин урамынан Октябрь революцияһына тиклемге юлдың ике һыҙаты, шулай уҡ ремонт эштәре барған урамда - Цюрупанан Ленин урамына тиклемге участка ябылды. Баш ҡала хеҙмәттәре сикләүҙе аңлап ҡабул итеүҙе һәм маршрутты алдан билдәләүҙе һорай.

✓Өфөлә "Беҙ бергә. Спорт" сурдлимпиясыларҙың йәйге уйындарында Рәсәй йыйылмаһы составында сығыш яһаған тағы бер республикабыҙ спортсыһы алтын миҙалға лайыҡ булды. Еңел атлет Денис Хәкимовтың еңеүе тураһында Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. Чемпионға юғары награданы ла министр тапшырҙы. Быға тиклем Башҡортостан дзюдосылары ла миҙалдар яуланы. Ҡорбан Мортазалиев, Олеся Ястребова - алтын, Аржана Таханова көмөш миҙал алды.

✓Башҡортостан спортсылары парашют спорты буйынса 40 иң яҡшы парашютсы ҡатнашҡан Бөтә Рәсәй ярыштарында иң шәптәре булды. Республикабыҙ командаһы "билдәләнгән урынға аныҡ төшөү" дисциплинаһында яҡшы һөҙөмтә күрһәтеп, команда, шулай уҡ шәхси иҫәптә миҙалдар яуланы. "Башҡортостан-1" командаһы ағзалары Игорь Митюков, Илшат Карамов, Илнур Хәлиуллин алтын миҙалға лайыҡ булды. Ошо уҡ дисциплина буйынса шәхси иҫәптә Илнур Хәлиуллин икенсе урынды алды.

✓Башҡортостан Милли симфоник оркестрының генераль директоры, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Артур Нәзиуллин, уҙған миҙгелгә йомғаҡ яһап, Өфөнөң Совет майҙанында симфоник опен-эйрҙар ойоштороласағын хәбәр итте. "Көҙ романтикаһы" фестивале барышында асыҡ һауала ике концерт була. Милли симфоник оркестрҙың яңы, 32-се концерт миҙгеле 1 сентябрҙә асыла.

✓ Тиҙҙән республикабыҙҙың баш ҡалаһынан Занзибарға авиарейстар асыла, тип хәбәр ителә федераль һауа транспорты агентлығы сайтында. Билдәле булыуынса, осоштар аҙнаһына ике тапҡыр башҡарыла. 30 июндән Башҡортостанда йәшәүселәр өсөн шулай уҡ Өфөнән Дағстанға авиаосоштар аҙнаһына дүрт тапҡырға тиклем арттырыла. Махачҡалаға рейстар дүшәмбе, кесаҙна, йома һәм шәмбе көндәрендә башҡарыла.

“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.

✓ *Ҡала урамдарында төрлө сүп-сарҙарын ҡайҙа етте шунда ташлап китеүселәр ҙә юҡ түгел, ошо йәһәттән урамға сүп ташлаған бала-сағаларын тыймайынса, битараф ҡалыусы ата-әсәләр ҙә аптырата.*

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!

СҮПЛӘМӘҺӘК, ТАҘА БУЛЫР!

Ошо арала, бер көндә генә, Өфө майҙандарын һәм урамдарын, йорт ихаталарын таҙартыу өсөн 397 хеҙмәткәр һәм 201 берәмек коммуналь техника йәлеп ителде; кисә төнөн дә эш тынманы: 53 юл эшсеһе һәм 87 берәмек техника баш ҡалабыҙ урамдарын таҙартты. Муниципаль хеҙмәттәрҙең бер тәүлектәге эш һөҙөмтәләре:

- урамдарҙан һәм ихаталарҙан 8695 куб.м сүп-сар сығарылған;
- юлдарҙағы соҡор-саҡырҙы ямағанда 522 кв.м майҙанда 79 т асфальт һалынған;
- 483 кв.м юл билдәләре төшөрөлгән;
- 325 925 кв.м майҙанда үлән сабылған.

Күренеүенсә, баш ҡалабыҙҙа талап ителгән санитария нормаларын үтәү менән бергә эстетик яҡтан зауыҡлы мөхит булдырыу ҙа күҙаллана. Әлбиттә, был осраҡта ҡала етәкселәренә лә, коммуналь хеҙмәттәрҙе ғәмәлгә ашырыусыларға ла рәхмәтле булыу фарыз. Тик шуныһы, ҡала урамдарында, ихаталарҙа төрлө сүп-сарҙарын, магазиндан алған әйберҙәренең полиэтилен йә иһә ҡағыҙ тышлыҡтарын, ҡап-һапты, тәмәке төпсөктәрен ҡайҙа етте шунда ташлап китеүселәр ҙә юҡ түгел, ошо йәһәттән урамға сүп ташлаған бала-сағаларын тыймайынса, битараф ҡалыусы ата-әсәләр ҙә аптырата. Матур мөхитте үҙебеҙ һаҡлаһаҡ, кеше хеҙмәтенә хөрмәт менән ҡараһаҡ - уңырбыҙ.

Йәнә, әүәл сүп-сарҙы айырым төрҙәргә бүлеп йыйыу хаҡында күп һөйләнек тә оноттоҡ, буғай. Ошо мәсьәләне ҡала етәкселәре аҙ-аҙлап булһа ла хәл итә башлаһа, халыҡ та ихлас ҡушылыр ине ул, тип ышанырға ҡала.

ШАҠША КҮПЕРЕ...

Баш ҡалабыҙҙың Шакша биҫтәһе янында Өфө (Ҡариҙел) йылғаһы аша һалынған автомобиль күперенә капиталь ремонт башланды, шунлыҡтан күперҙең ҡалаға инә торған яғынан юлдың йөрөй торған өлөшөнөң яртыһынан транспорт хәрәкәте туҡтатылды.

Был күпер авария алды хәлендә, шуға күрә "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проекты нигеҙендә ул яҡын йылдарҙа яңыртыласаҡ. Төҙөүселәр барса тороҡтарҙың иҫкергән өрлөктәре урынына киҫелмәгән тоташ металл урҙалар монтажлаясаҡ, терәк өлөштәрен, деформация йөйҙәрен һәм күпер терәүҙәренең конструктив элементтарын алыштырасаҡ. Әйтергә кәрәк, ошо күпер, Башҡортостан баш ҡалаһының мөһим транспорт артерияһы булараҡ, автомобилдәргә Өфөнөң төньяҡ микрорайондарынан М-5 "Урал" федераль трассаһына сығыу мөмкинлеген бирә.

Эшселәр иртүк күпер ҡалҡандарын һүтеүгә һәм асфальт-бетон ҡатламын фрезерлауға тотондо. Бында биш самосвал, фреза аппараты ҡулланыла, йәмғеһе 14 юл хеҙмәткәре эшләй. Иҫкергән юл япмаһы аҡтарылып бөткәс, күпер тороҡтарын һүтеү башлана. Төҙөлөш-монтаж эштәре графигына ярашлы, ремонт эштәре киләһе йылдың майынан күперҙең һул яғында ла башланасаҡ. Муниципаль контракт буйынса күперҙе ремонтлау тулыһынса 2025 йылдың 28 февралендә тамамланасаҡ.

Капиталь ремонт барған осорҙа ауырлыҡтары 3,5 тоннанан артыҡ булған йөк машиналарына күпергә ике яҡтан да инеү тыйыла. Йөк машиналарына ҡалаға инеп-сығып йөрөү өсөн М-5 федераль трассаһын файҙаланыу тәҡдим ителә.

КӨНЬЯҠ ҠАПҠАҺЫ

Өфөлә Генерал Рыленко һәм Пугачев урамдары сатында транспорт сиселешен төҙөү дауам итә.

Ул "Көньяҡ ҡапҡаһы" территорияһында комплексты төҙөлөш алып барыу буйынса киң күләмле проект сиктәрендә башҡарыла һәм баш ҡалабыҙға нигеҙ һалыуҙың 450 йыллығы айҡанлы төҙөләсәк юбилей объекттары исемлегенә ингән. Күпер һалыусылар 1 августа биш терәкле һәм дүрт тороҡло юл үткәргес тороғоноң һуңғы, 80-се урҙаһын монтажланы. 102,52 погонлы метр оҙонлоғондағы объекттың хаҡы 2,6 млрд һум тора. Проектта тәүлегенә 48-50 мең автомобиль үткәреп ебәрә алыу мөмкинлеге ҡаралған. Эштәрҙе 2024 йылға тамамлау планлаштырылған.

МАТУР ПОДЪЕЗДАР

2023 йылда Өфөлә 54 күп фатирлы йорттоң 172 подъезын ремонтлау планлаштырылған. Эштәр тик бюджет сығанаҡтарынан финанслана: 90 процент - республика бюджетынан, 10 процент - муниципалитеттан. Был осраҡта капиталь ремонт өсөн милек хужаларынан йыйылған аҡса ҡулланылмай.

"БР төбәк операторы" фонды мәғлүмәттәренә ярашлы, бөгөн подряд ойошмалары 41 йорттоң 131 подъезында ремонт эштәре алып бара, ә 11 йорттоң 35 подъезында эштәр тамамланған да инде. Уларҙы ошо йорттарҙа йәшәүселәр ҡатнашлығында махсус комиссия ҡабул итә. Етешһеҙлектәр була икән, улар ахырынаса төҙәтелмәгән хәлдә эштәрҙе ҡабул итеү актына имза ҡуйылмай. Эштәр ҡабул ителеп, тейешле документтарға имза ҡуйылғас ҡына улар өсөн аҡса түләнә. Яһалған ремонтҡа 5 йылға тиклем гарантия ҡаралған (вандаллыҡ осраҡтары иҫәпкә алынмай).

Подъездарҙы ремонтлағанда подряд ойошмалары инеү төркөмөн яңырта, беренсе ҡатта керамик плитәләр түшәй, тамбурлы яңы ишек, яңы пластик тәҙрәләр, почта йәшниктәре, энергияны һаҡлаусы яҡтыртҡыстар ҡуя, шулай уҡ штукатур-маляр эштәрен башҡара. Стеналарҙы эшкәртеү һәм ниндәй төҫкә буяу, үҙҙәренең подъезы ниндәйерәк булырға тейеш - быларҙы ошонда йәшәүселәр хәл итә. Әлбиттә, ошондай матур һәм ипле подъездарға инеп-сығып йөрөүе лә күңеллерәк булыр. Икенсе ремонт осорона тиклем үҙебеҙ йәшәгән мөхиткә иғтибарлы һәм һаҡсыл ҡарашта булыу фарыз.

Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат-хеҙмәте.

ҠЫҘҠАСА

ЖУРНАЛИСТАР - БӘЙГЕГӘ!

Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияны тапшырыу буйынса комиссия документтар ҡабул итеү хаҡында белдерә. Положениеға ярашлы, премиялар 2022 йылдың сентябренән 2023 йылдың августына тиклем донъя күргән иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн журналистарға, шулай уҡ журналистар коллективына тапшырыла. Республика Журналистар союзынан хәбәр итеүҙәренсә, премияға репортаждар, очерктар, документаль повестар һәм публицистик мәҡәләләр; теле- һәм радиотапшырыуҙар; республика, Рәсәй йәки сит ил баҫмаларында йә иһә электрон киң мәғлүмәт сараларында баҫылып сыҡҡан фотоһүрәттәр; айырым китап булып нәшер ителгән материалдар тәҡдим итергә мөмкин. Эштәр 1 сентябргә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, Башҡортостандың Журналистар союзы, 111-се офис (Матбуғат йортоноң 1-се ҡаты). Телефон (347) 276-42-66. "Башинформ" хәбәр итеүенсә, журналистар өсөн премияның суммаһы 500 мең һумға тиклем арттырыла.

✓ **Дәүләт Думаһында власть органдарына "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша мөрәжәғәт итергә мөмкинлек биргән закон ҡабул ителде.** 2025 йылдың 1 ғинуарына тиклем бөтә ведомстволар ҙа ошо майҙансыҡҡа ҡушылырға тейеш. Дәүләт Думаһы сайтында хәбәр ителеүенсә, закон 2023 йылдың 1 сентябренән көсөнә инә. Был закон илдең һәр кешеһенә ҡағыла, тине Дәүләт Думаһының граждандар йәмғиәтен үҫтереү, ижтимағи һәм дини берләшмәләр мәсьәләләре буйынса комитеты етәксеһе Ольга Тимофеева. "Беҙ "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы, шәхси кабинет аша чиновникка йәки төбәк йә иһә федераль кимәлдәге етәксегә мөрәжәғәт итеү мөмкинлеген булдырабыҙ", - тип билдәләне комитет башлығы. Парламентарийҙар алдында власть органдары етәкселәренең закон боҙмауын һәм һәр ваҡыт халыҡ менән бәйләнештә булыуын, граждандарҙың һорауҙарына оператив яуап биреүен күҙәтеү бурысы тора, тип өҫтәне Ольга Тимофеева.

✓ **Башҡортостанда йәшәүселәр "Һанлы тигеҙһеҙлекте бөтөрөү 2.0" программаһы сиктәрендә 2024 йылда 4G (LTE) интернетын үткәреү өсөн ауылдарҙы һайлап алыу хоҡуғына эйә.** Тауыш биреү өсөн махсус сервис эшләй башланы: https://www.gosuslugi.ru/inet. 100-ҙән 500-гә тиклем кеше йәшәгән ауылдарға юғары тиҙлекле мобиль интернет килә. Онлайн-тауыш биреү 13 августҡаса бара. Почта аша ебәрелгән хат 10 сентябргә хәтлем ҡабул ителә. Тауыш биреүҙә илдең балиғ булған граждандары ҡатнаша ала. Шулай уҡ түбәндәге адресҡа Рәсәй почтаһы аша ғариза ебәреп, тауыш бирергә була: 123112, г. Москва, Пресненская набережная, дом 10, стр. 2. Үҙ исемеңдән йәки күмәк ғариза яҙырға мөмкин. Хатта тауыш биреүсенең исем-шәрифен, адресын, ҡайһы ауыл өсөн тауыш биргәнен күрһәтергә кәрәк.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Һыуыҡ тейһә

❖ 1 ҡалаҡ бөтнөк (мята перечная) япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут талғын утта йылытып һөҙөргә һәм 1 балғалаҡ бал ҡушып болғарға. Шунан 1 теш һарымһаҡты ваҡлап турап, кәстрүлдә иҙергә һәм шуға сирек лимон һунтын һығып ҡушырға. Баллы бөтнөк төнәтмәһен ошо кәстрүлгә өҫтәп ҡойоп, яҡшылап болғатырға. Дауаны йоҡлар алдынан йылы көйөнсә эсергә.

Пневмония

❖ Ҡайнап ултырған һыулы кәстрүлгә 3-4 тамсы пихта майы тамыҙып, башты ҡаплап шуның буыуын һуларға. Һуңынан майҙы күкрәккә ыуып, йылы юрған ябынып ятырға. Ингаляция өсөн Махольд ингаляторын да ҡулланырға ярай.

❖ 1 өлөш ҡарағай бөрөһө, 2 өлөш хуш еҫле миләүшә (фиалка душистая), 4 өлөш Исландия мүген бергә ҡушырға. Әҙерләмәнең 4 балғалағына 1 стакан һыуыҡ һыу ҡойорға. 2 сәғәт төнәтергә, 4 минут ҡайнатырға, һыуытып һөҙөргә. Үпкәләр еленгәндә дауалағанда төнәтмәне йылы көйөнсә көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

❖ 1 стакан һоло ярмаһы һәм ваҡлап туралған 1 баш һарымһаҡҡа 2 литр һөт ҡойорға. 1,5-2 сәғәт мейестә йәки духовкала быҡтырырға, һөҙөргә. Эҫе көйөнсә йоҡлар алдынан яйлап ҡына йотомлап 1 стакан эсергә. Был ҡаҡырыҡты сығара, хәлде яҡшырта.

Йәшәү көсө

❖ Өлкән йәштәгеләр дөйөм хәлһеҙлек тойғанда уларға көс биреү өсөн һуған һәм һарымһаҡты ҡырғыстан үткәрергә. Килеп сыҡҡан һарымһаҡ "бутҡаһы"ның 300 грамына 500 грамм һуғандыҡын ҡушырға. Шуға 1,8 литр алма һеркәһе өҫтәргә һәм ауыҙы ябыҡ һауытта ҡараңғы урында 1 тәүлек тоторға, ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп, болғатып торорға. 1 кг балды талғын утта ҡайнар хәлгә еткерергә, күбеген алып торорға. Уттан алып, бүлмә температураһына тиклем һыуытырға. Балға әҙер төнәтмәне ҡушырға һәм яҡшылап бутарға. Дауаны 1 аҙна ҡараңғы, йылы урында тоторға, болғатып торорға. Шунан иләк аша үткәрергә. Ҡараңғы, һалҡын урында ныҡ ябылған һауытта һаҡларға. Көн һайын бер юлы 4 балғалағын яйлап, туҡтай-туҡтай ашарға.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.

✓ *Һәр бер башҡорт ғаиләһенең кәмендә 50 баш йылҡыһы булған, ә хәллерәк кешеләр 300-400 баш йылҡы тотҡан. Ә инде байҙарҙың йылҡыларының иҫәбе-һаны булмаған. Уларҙың йылҡы өйөрҙәре меңдән ашыу булған.*

ЗИНӘН КИҢӘЙТЕП...

КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

Урҙан
(Чомга, большая поганка)

Иң таралған төр, йорт өйрәгенән һаҡ ҡына вағыраҡ.

Балығы, ҡамышы булған бөтөн һыу ятҡылыҡтарында ла осрай. Йәй уны ҡара-ерән "яға"һынан, ҡара "мөгөҙ"ҙәренән танып була. Муйыны асыҡ төҫтә, суҡышы - ҡыҙғылт. Йәш ҡоштарҙың сикәһендә ҡаралы-аҡлы һыҙаттар бар. Оло ҡоштарҙың күҙҙәре ҡыҙыл, йәштәренеке - алһыу. Ҡанатында аҡ төҫтә көҙгө кеүек йоморо тап бар. Осҡан сағында тәпәйҙәрен горизонталь рәүештә тура тотоп оса (башҡа төрҙәренең тәпәйҙәре бер аҙ аҫҡараҡ төшөп тора).

Тауышы көслө, яңғырауыҡлы, оя ҡороп, бала сығарған мәлдә "арррр" тип ҡыҫҡыра, хәүеф янағанда иһә киҫкен генә "ғеғ", "көрр-үек" тигәнерәк тауыш сығара.

Күлдәр боҙҙан асылғанға тиклем үк осоп ҡайта. Һыу ситенәрәк оя ҡора. 3-5 йомортҡа һала, улар аҡһыл төҫтә. 25-27 көндә бәпкәләре сыға, уларҙың башында сағыу һыҙаттар була. Бәпкәләр инә ҡоштоң арҡаһына ултырып йөрөй, шул килеш бергә һыуға ла сумып сығалар. Ваҡ балыҡ менән туҡлана, һыу ҡуңыҙҙары, ҡандалаһын, энәғараҡтарҙың ҡарышлауыҡтарын, моллюскыларҙы ашай.

Урҙан - Урал арты күлдәренең барыһында ла бар. Ҡарағайлы күлендә уларҙың төркөм булып оя ҡороуын күрергә тура килде. Өргөн, Оло Учалы, Ҡалҡан, Сыбаргүл, Үләнде, Атауҙы һ.б. Урал алды территорияһында Асылыкүлдә, Ҡандракүлдә, Шиңгәккүлдә, Ағиҙел йылғаһында һәм тағы ҡайһы бер һыу ятҡылыҡтарында икешәр, өсәр пар булһа ла осрай.

Урҙан кеүек һыу ҡоштарына бер ҡурҡыныс янай - улар балыҡ тотоу өсөн һалынған ауҙарға эләгеп, сырмала һәм һәләк була. Йәй ахырына күлдәрҙә, шул иҫәптән, дәүләт ҡурсаулыҡтары һәм тәбиғәт парктары сиктәрендә лә ауға эләкмәй ҡалған урҙан ҡалмай тиерлек. Мөкәмил Ғаязетдин улы Саҡмағош районында бер һыу ятҡылығында урҙандарҙың күплеген күреп, хайран ҡала. Бында ваҡ табан балығын ау менән тотмайҙар икән.

М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

ИР ҠАНАТЫ...

Башҡорт аты - башҡорт балы менән бер рәттән, халҡыбыҙҙың ғорурлығы булып тора. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бик боронғо замандарҙа Көньяҡ Уралда йәшәгән ҡырағай аттарҙы ҡулға эйәләштереп, йылҡы малы башҡорт халҡының көнкүренешендә төп урын биләгән йорт хайуанына әүерелгән.

...Башҡорт атына нигеҙ булып торған ҡырағай аттар 19-сы быуатҡа тиклем Уралда йәшәгән. Уларҙы халыҡ тарпан тип атаған. Ҡырағай аттар 18-се быуатта бөтә Евразия ҡитғаһында таралған була. Әммә артабан, ер эше үҫешеп, баҫыуҙар артып, кешеләр күбәйгәс, тарпандарға йәшәү өсөн киң яландар ҡалмай. Бынан тыш, кешеләр тарпандарға һунар итә. Шул рәүешле 19-сы быуатта ҡырағай аттар юҡҡа сыҡҡан. Уларҙың ҡулға эйәләштерелгән нәҫелдәренән төрлө йылҡы тоҡомдары барлыҡҡа килгән, шул иҫәптән башҡорттарҙың бик борон ата-бабалары эйәләштергән ат тоҡомо Башҡорт аты булып танылған. Сөнки был аттар тик башҡорттарҙа ғына үрсетелгән.

Әйткәндәй, ҡулға эйәләштерелгән иң боронғо аттың һөлдәһе тап Башҡортостанда табылған. Октябрьский ҡалаһы составында булған Мулла исемле башҡорт ауылы янында һәм Дәүләкән ҡалаһында табылған Таш быуат кешеләренең тораҡтарында донъялағы иң боронғо эйәләштерелгән аттарҙың һөйәктәренә тап була археологтар. Уларҙың йәше 8-9 мең йыл. Тимәк, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бик боронғо заманда, йәғни таш быуатта уҡ тарпандарҙы ҡулға эйәләштергән һәм шуларҙан килә лә инде данлы Башҡорт аты тоҡомо.

...Бәлки, ата-бабаларыбыҙ атты унан да элегерәк өйрәтеп алғандыр. Сөнки Бөрйән районындағы арҙаҡлы Шүлгәнташ мәмерйәһендә лә ат һүрәттәре бар *(2-се һүрәттәрҙе ҡарағыҙ)*. Был һүрәттәрҙең йәше 16-18 мең йыл, тип билдәләй ғалимдар.

Әйткәндәй, Шүлгәнташ мәмерйәһе башҡорт халҡының бөйөк эпосы "Урал батыр" менән туранан-тура бәйле булғанын барығыҙ ҙа беләлер, моғайын. Шүлгәнташ эргәһендә Йылҡысыҡҡан күле бар. Тап ошо күлдән йылҡылар сыҡҡан, тип бәйән ителә бит эпоста. Дейеүҙәр менән һуғышҡан Урал батырҙың иң тоғро дуҫы Аҡбуҙат була. "Аҡбуҙат" эпосында Урал батырҙың улы Һәүбән Шүлгән мәмерйәһенә ҡасып йәшеренгән дейеүҙәрҙе ҡыйрата, Аҡбуҙатты ҡотҡара һәм атаһының алмас ҡылысын алып ҡайта. Ошо Аҡбуҙаттан башҡорт аттарының нәҫелдәре таралған, тип бәйән итә ҡобайыр.

Борон башҡорт халҡы йылҡыны күпләп көткән булған. Һәр бер башҡорт ғаиләһенең кәмендә 50 баш йылҡыһы булған, ә хәллерәк кешеләр 300-400 баш йылҡы тотҡан. Ә инде байҙарҙың йылҡыларының иҫәбе-һаны булмаған. Уларҙың йылҡы өйөрҙәре меңдән ашыу булған. Шуға ла уларҙың теүәл һанын бер кем дә белмәгән. Яҡынса иҫәпләгәндәр. Башҡорт аты әрһеҙ, сыҙамлы, егәрле мал. Аҙыҡты йыл әйләнәһенә үҙе табып ашаған. Йәйен киң болондарҙа, ҡышын тибендә йөрөгән. Ҡышҡы бурандарҙа аттарҙы көтөүселәр билдәле бер ышыҡ урынға алып барып ҡуйыр булғандар. Ул урын "ҡурғы" тип аталған, йәғни әсе һыуыҡтан ҡурғап торған урын. Мәҫәлән, Йылайыр районында Ташҡурғы тигән урын бар.

...17-18 быуаттарҙа башҡорт аттары Рәсәйҙә танылыу яулай. Сыҙамлы булған өсөн уларҙы почта хеҙмәтендә киң ҡулланалар. Егеүле башҡорт аттары алһыҙ-ялһыҙ, ашамайынса, 8 сәғәт эсендә 120-140 саҡрым араны үтә алған. Ә бына башҡа аттарҙа бындай сыҙамлыҡ юҡ, уларҙың тиҙ арала хәлдәре бөтә. Оҙайлы юлда йөрөү өсөн башҡорттар үҙ аттарын махсус методика буйынса өйрәткән, сыныҡтырған. Арҙаҡлы ҡурайсы Сәйфулла Дилмөхәмәтов түңгәүер башҡорттарында ат өйрәтеү серҙәре һәм түңгәүер бәһлеүәне Көтөр батыр тураһында бына ниндәй риүәйәтте ата-бабаларынан ишеткән: "Көтөр батырҙың ике туғай тулы аты булған. Ул аттарының теүәл генә иҫәбе-һанын белмәгән. Тик көтөүселәренең иҫәбенсә, йылҡыһы мең баштан артыҡ булған. Көҙ көнө тубыҡҡа хәтле ҡар яуһа, илле-алтмышлап иреген көн дә ат өйрәткән. Ошо осорҙа улар аттарҙы өс мәртәбә таңашырған, йәғни тирләгән аттың башын үргә бәйләп, ашатмай, эсермәй тотҡандар. Бына шундай ғәмәлдән һуң ат бер ваҡытта ла янмай, арымай. Ул бик сыныҡҡан була. Был аттар һәр бер яуға сабырға әҙер була. Ошо өйрәтелгән аттарҙы икенселәренән айырыу өсөн әлеге беҙҙең тамға (Түңгәүер ырыуы тамғаһы) эшләнгән тимерҙе ҡыҙҙырып, аттың янбашына баҫҡандар".

...Өйрәтелгән яҡшы аттары менән башҡорттар яу сапҡандар. Башҡорт аттары ҡыйыу, еңел йөрөгән, хужаһына ярҙамсы булған. Тамғалы башҡорт аты 19-сы быуаттағы рус рәссамы А.О. Орловскийҙың картинаһында ла сағылыш тапҡан. 1812 йылғы Ватан һуғышында 10 меңдән ашыу башҡорт яугиры ҡатнашҡан. Һәр бер яугир хәрби походҡа ике ат менән сығырға тейеш булған. Береһендә һыбай йөрөһә, икенсеһендә кәрәк-яраҡ әйберҙәре тейәлгән булған. Оҙон юлда атын алмаш-тилмәш ял иттергән *(1-се һүрәттә ҡарағыҙ)*.

...19-сы быуаттың аҙағында Өфөгә тиклем тимер юл һалынғас, Башҡортостанға ҡымыҙ менән дауаланыуға килеүселәр һаны бермә-бер арта. Был эшкә тимер юл буйында урынлашҡан башҡорт ауылдары, Дим буйы башҡорттары (хәҙерге Дәүләкән, Әлшәй районы башҡорттары) әүҙем ҡушылып китә. 20-се быуат башында башҡорт ҡымыҙы Рәсәйҙә киң танылыу яулай. Башҡорттар хәҙер ҡымыҙ етештереп, һатыу кәсебендә ҙур уңыштарға өлгәшә *(3-сө һүрәттә ҡарағыҙ)*. Башҡорт аты биргән ҡымыҙҙы улар, шешәләргә тултырып, тимер юлындағы пассажирҙарға һаталар, ярайһы уҡ яҡшы килем алалар.

...Башҡорт тоҡомло аттар революцияға тиклем үк Парижда бөтә донъя ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнаша, һуңынан, 1923 йылда, Мәскәүҙә үткән СССР-ҙың 1-се ауыл хужалығы күргәҙмәһенә лә ҡуйыла. Башҡортостан күргәҙмәһенә аттарҙы Баймаҡ районы Темәс ауылынан Хөсәйен Әбүбәкиров исемле ир-уҙаман алып бара. Мәскәүҙә башҡорт тирмәһе ҡуйыла.

20-се йылдарҙа Башҡортостанда ҡымыҙ етештереү эше дәүләт кимәлендә башҡарыла. Бының өсөн Өфөлә "Башҡымыҙпром" исемле предприятие ойошторола. Хәҙер инде ҡымыҙ бәләкәй көбөләрҙә түгел, ҙур мискәләрҙә эшләнгән.

...Башҡорт аттары легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы составында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Ҡанлы яуҙа ла, күңелле ял сәғәттәрендә лә башҡорт аты башҡорт яугирының тоғро дуҫы була *(4-се һүрәттә ҡарағыҙ)*.

Бөгөнгө көндә башҡорт аттары ҡайтанан тергеҙелә, хәҙер инде уларҙы, боронғо кеүек, ҡыш көндәрендә тибенлектә лә күрергә була. Йыл һайын Баймаҡ районында "Башҡорт аты" фестивале гөрләп уҙа. Бөгөнгө көндә ҡайһы бер халыҡтар башҡорт атын үҙҙәренекеләй итеп күрһәтергә маташһа ла, башҡорт аты - башҡорт аты булып ҡаласаҡ, сөнки уның меңәр йылдар башҡорт халҡы менән бәйле бай тарихы бар.

Азат ЯРМУЛЛИН.

1


2

3

4

✓ *Боронғо башҡорттарҙың үҙҙәрен Ҡояш тоҡомонан тип иҫәпләй. Быны Ибн-Фаҙлан мәғлүмәттәре лә раҫлай: X быуатта башҡорттар үҙҙәре табынған 12 илаһ араһында күктәге илаһты, йәғни Ҡояшты баш илаһ, тип һанаған.*

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында

"Урал батыр" эпосы - башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары хаҡында ҡиммәтле сығанаҡ

Башҡорт фольклоры ("Урал батыр" эпосы)

5. Башҡорт фольклорында Авесталағы уңдырышлылыҡ алиһәһенә арналған гимнға "Аҡбуҙат" эпосы тап килә. Әгәр Авестала, Ардви Сураға ҡорбан килтереп, унан күп башлы йылан рәүешендәге дейеүҙәрҙе, сихырсыларҙы, яуыз ендәрҙе еңергә, йә иһә иҫәпһеҙ йылҡы көтөүҙәренә эйә булырға ярҙам итеүҙе үтенһәләр, "Аҡбуҙат" эпосында Шүлгәндең һыу аҫты батшалығы һүрәтләнә, унда барса ошо яуыз һәм изге көстәр, иҫәпһеҙ-һанһыҙ хайуандар Шүлгән ҡарамағында булып, уға хеҙмәт итә. Улар араһында ун ике башлы Ҡәһҡәһә (Авестала - Дахака) батша власының төп терәге була. *//Башҡорт халыҡ ижады. Өсөнсө том. Эпос. - Өфө, "Китап", 1998. 150-се бит.*

Эпос геройы Һәүбән - легендар Сура батырҙың улы - Аҡбуҙатты үҙенә буйһондорғас , дейеүҙәр ҡасып бөтә. *(Шунда уҡ. 151-се бит).*

Улар икәүләшеп Шүлгәнде еңә һәм тотҡонлоҡта яфа сиккән барса ер ҡыҙҙарын азат итә; улар ерҙәге батшаны - Мәсем ханды еңеүгә өлгәшә. Һуңынан Һәүбән яраланған ҙур ҡошто осратып, уның яраһын дауаларға ярҙам итә, шунан һуң был ҡош үҙенең ҡоштар һәм йәнлектәр донъяһын ҡурсалаусы Һомай икәнен белдерә. *(Шунда уҡ. 173-сө - 174-се биттәр).* Һәүбән Һомайҙың легендар башҡорт геройы Урал батырҙың ҡатыны булғанын белә. Һәүбән үҙе һыу аҫты батшалығы батшаһының ҡыҙы Нәркәскә өйләнә. Уның менән һыуҙан йылҡы өйөрҙәре, һыйыр, һарыҡ көтөүҙәре килеп сығып, ер йөҙөнө тарала. *(Шунда уҡ. 177-се бит).*

Эпоста Сура батыр заманында кешеләрҙең ерҙә иркен йәшәүе, йылға һәм күл һыуҙарын файҙаланыуы хаҡында бәйән ителә. Башҡа эпостарҙа Сура батыр образы осрамай. Был "Аҡбуҙат" эпосының иң боронғо вариантларында шәхсиләштерелгән Сура батыр образының Авесталағы һыуҙы һәм уңдырышлылыҡты ҡурсалаусы илаһ Ардви-Сураның башҡорт варианты булараҡ барлыҡҡа килеүе хаҡында фекер тыуҙыра. "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" эпостарында кешеләрҙе, ҡойоға йә иһә күлгә ташлап, батырып үлтереү күренештәрен сағылдырған сюжеттар бар. Был, күрәһең, һыуҙы ҡурсалаусыға кешеләрҙе ҡорбан итеү менән бәйле бик боронғо йолаларға барып тоташа. *(Шунда уҡ. 163-сө, 172-се биттәр).*

6. "Урал батыр" эпосы геройы Урал батыр Самрау батша һәм Ҡояш ҡыҙы Һомай ҡулынан ҡанатлы ат - Аҡбуҙатты һәм булат ҡылысты - көс-ҡеүәт символын ала. Аҡбуҙат ярҙамында Урал батыр барса дошмандарын еңә, һәм Уралда тыныслыҡ тантана итә. *(Урал батыр. Башҡорт халыҡ эпосы. - Өфө: Китап, 2013. 132-се бит).* Килтерелгән миҫал боронғо башҡорттарҙың үҙҙәрен Ҡояш тоҡомонан, тип иҫәпләүенә һәм уны хөрмәт итеүенә дәлил булып тора. Быны Ибн-Фаҙлан мәғлүмәттәре лә раҫлай: X быуатта башҡорттар үҙҙәре табынған 12 илаһ араһында күктәге илаһты, йәғни Ҡояшты баш илаһ, тип һанаған.

7. Хәҙерге башҡорттарҙа "Ахыр Заман" тураһында ҡараш киң таралған, ул донъя бөтөүен аңлата. Ысынбарлыҡта ошондай төшөнсәләр, күҙаллауҙар Ерҙәге тормоштоң һүнеү эпохаһы башланыуы менән түгел, ә Ахура Мазданың - донъяны барлыҡҡа килтереүсе төп көстөң - идеаль илаһи донъяһының нығыныуы хаҡындағы ҡараштар менән бәйле. Ахура Мазданың изге идеялары Анхра-Маньюның ҡара, яуыз көстәрен ахырынаса еңгәс, Ерҙә барыһы өсөн "имен тормош", "муллыҡ", "уңышлы тоҡом", "күп йылдар буйына һуҙылған ғүмер" тантана итәсәк" *(Авеста... 23-сө бит).* Ахура Мазда идеяларының ошо рәүешле үҫеш перспективаларын барлау, ирекһеҙҙән, уны төрки халыҡтары араһында, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла, киң таралған "Ахыр Заман" төшөнсәһе, йәғни Ерҙә даими тыныслыҡ һәм именлек урынлашыу ваҡыты хаҡындағы ҡараш менән сағыштырырға ерлек бирә. Бында "Ахыр Заман"ды боҙоп әйтелгән Ахура Мазда исеме, тип фараз итергә генә ҡала.

Авеста (Дүшәнбе. 1990)

5. Һыу һәм уңдырышлылыҡ алиһәһе Ардви хөрмәтенә арналған гимн Авестаның бик мөһим бүлеге булып тора, ул даими рәүештә Сура (көслө) һәм Анахита (пак) эпитеттары менән нарыҡлана. Уны дүрт дәү аҡ айғыр егелгән ике тәгәрмәсле арбала бер туҡтамай елдереп йөрөүсе образында күҙаллайҙар. Ардви-Сура ҡурсалаған һыу ерҙәге тормош, уның сәскә атыуы өсөн иң мөһим булған шарттарҙың береһе; шәфҡәтлеләндереү маҡсатында, уның хөрмәтенә төрлө илаһтар, шул иҫәптән "иҫ китмәле Йима... өс башлы Дахака-Йылан", ҡорбан салған: "йөҙ айғыр, һәм мең һыйыр, һәм иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡуй малы" *(26-сы - 52-се биттәр).* Ҡорбан салғанда күп илаһтар теләктәрен белдергән:

"Изге Ардви-Сура,
Власҡа эйә булһам ине
Мин кешеләр һәм дейеүҙәр,
Сихырсы ҡарсыҡтар, тылсымсылар,
Кавий тирандары
Һәм уҫал карапандар өҫтөнән.
Дейеүҙәрҙән ҡотҡарһам ине
Байлығымды һәм мөлкәтемде,
Малдарымды һәм баҫыу ашлылығын,
Ҡәнәғәт һәм хөрмәтле булыуымды..." *(31-се бит).*

Герой үтенә:

" Даландың бир шундайын,
Изге Ардви-Сура,
Өс башлы Йылан-Дахаканы еңер өсөн.
Өс ауыҙлы, алты күҙле,
Мәкерле, ҡыйыш йәнле,
Дейеүҙәр киҫәүе, яуыз,
Ҡеүәтле, көслө,
Ул Анхра-Маньюны эшкәртте
Ялғанда иң көслө булырға
Бар донъяның һәләкәтенә юрап". *(32-се бит).*

6. Ҡояш айырым табыныу объекты, "иң яҡшы Илаһ", тип ҡабул ителгәнлектән, уның хөрмәтенә Авестаға махсус гимн индерелгән. Ҡояш "етеҙ аттары булған Үлемһеҙ Яҡтылыҡ" рәүешендә күҙалланған.

"Ҡояш сыҡҡан саҡта
Мазданан бирелгән
Яҡтыра ер,
Яҡтыралар барса һыуҙар,
Ағып ятҡандары ла,
Сығанаҡтары һыуҙың,
Аҡмаған һыуҙар,
Һәм диңгеҙ һыуҙары.
Яҡтыра яралтмыштарының
Барсаһы изге Рухтың.
Сыҡмаһа Ҡояш,
Дейеүҙәр юҡ итә
Ерҙәге бар булғанды,
Һәм бында күктә йәшәүселәр
Тәндәр донъяһында
Ҡала алмайҙар" *//Шунда уҡ. 54-се - 55-се биттәр.*

7. Авестала Ахура Мазда хөрмәтенә арналған гимн бар:

"... Булдырыусы - мин, Ҡурсалаусы,
Һаҡлаусы һәм Барыһын да белеүсе.
Иң изге Рух минең исемем,
Һәм Дауалаусы минең исемем..." *(17-се бит).* Ахура Мазданың илаһи сифаттары, төп изгелек ҡылыусы булараҡ, 50-нән ашыу ошондайыраҡ һүҙҙәр менән нарыҡлана: "бөйөк", "еңеүсән", "ҡыйратыусан", "зиһенле", "хәҡиҡәт", "асыу тотмаҫ", "иң көслө", "барыһын да күреп тороусы" *(15-се - 24-се биттәр).* Уның барса үлемһеҙ эшмәкәрлеге Анхра-Манью образында тупланған яуыҙлыҡҡа ҡаршы көрәшкә йүнәлтелгән.

Нияз МӘЖИТОВ. Әлфиә СОЛТАНОВА. Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.
(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78

ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

Слободка һәм Слобода ауылдары өсөн алышта 60-сы гв. атлы полкы ҡатнашмай, ул резервта ҡалдырылған була. 10 ғинуарға ҡаршы төндә полк маршҡа сыға. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, полк командиры, гв. полковнигы Г.Е. Фондеранцев, Ельск-Буйновичи юлы сатына етеп килгәндә, абайламайынса минаға баҫып, ҡаты яралана. Уны госпиталгә ебәрәләр. Герасим Фондеранцев Украинаның Кировоград өлкәһендә тыуып үҫә, 19 йәшенән Ҡыҙыл Армия сафтарында хеҙмәт итә, арҙаҡлы комдив Виталий Примаковтың 8-се Красноказачий дивизияһында боевой сынығыу ала, һуғыш тәжрибәһен туплай. Граждандар һуғышынан аҙаҡ Сергей Каменев исемендәге хәрби мәктәптә уҡый, билдәле полководец Григорий Котовскийҙың 2-се атлы корпусында хеҙмәт итеүен дауам итә. 1929 йылда буласаҡ маршал К.К. Рокоссовскийҙың 9-сы Кубань атлы бригадаһында эскадрон командиры була. Ул Ҡытай-Көнсығыш тимер юлындағы (КВЖД) алыштарҙа ҡатнаша, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. 1934 йылда Чита ҡалаһында уҡсы дивизия командиры урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. 1937 йылдан башлап Владимир ҡалаһында пехота училищеһында уҡыта. 1941 йылдың сентябренән һуғышҡа инә, 45-се атлы дивизияһында полк командиры вазифаһында Вязьма янындағы ҡан ҡойғос алыштарҙа ҡатнаша. Һуғыш башындағы катастрофик хәлдәр, командованиеның хәрби күрәшлеге арҡаһында беҙҙең армияның Вязьма төркөмө ҡамауҙа ҡала. Ҡыҙыл Армияның 37 уҡсы дивизиянан, 9 танк бригадаһынан һәм 31 артиллерия полкынан хасил булған 4 армия төркөмө тар-мар ителә, 380 мең һалдат һәм офицер һәләк була һәм яралана, 600 мең совет яугиры әсиргә алына. Полковник Фондеранцев тере ҡалған яугирҙары менән ҡамауҙан иҫән-һау сығыу мөмкинлеген таба. 1942 йылдың декабрендә 16-сы гвардия атлы дивизияһының 294-се полкына командир итеп тәғәйенләнә. Ул комдив М.М. Шайморатов юғары баһалаған офицерҙарҙың береһе була, Дебальцево рейдында ҡатнашып, иҫән ҡалған яугирҙарҙы туплап, фронт һыҙығы аша алып сыға. Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн Ленин, өс Ҡыҙыл Байраҡ, III дәрәжә Суворов һәм Александр Невский ордендары, миҙалдар менән бүләкләнә.

1944 йылдың 10 ғинуарында 7-се гвардия атлы корпусы 61-се армияның оператив ҡарамағынан сығарыла һәм барса бойороҡтарҙы һәм боевой бурыстарҙы туранан-тура Белорус фронты командующийынан ала башлай. Шул уҡ көндө корпус алдына яңы бурыс ҡуйыла: сигенеүсе дошманды эҙәрлекләп барып, ике дивизия көстәре менән уның тыл частарын ҡамап алып, тар-мар итергә, Мозырь тимер юл станцияһын, тимер юл күперен һәм Припять йылғаһы аша уҙған шоссе юлындағы күперҙе алырға.

11 ғинуарға ҡаршы төндә 14-се һәм 16-сы гв. атлы дивизиялары, дошмандың контратакаларын кире ҡаға барып, Дрозды, Военный Городок, Козинки, Редьки йүнәлешендә хәрәкәт итә. 11 ғинуарҙа иртә менән алышҡа 15-се гв. атлы дивизияһы индерелә, ул, Козинки, Матренки ауылдары, Припять йылғаһы йүнәлешендә һөжүм итергә һәм көньяҡтан дошмандың Мозырға табан сигенеү юлын киҫергә тейеш була. 12 ғинуарҙа немец командованиеһы 14-се һәм 16-сы дивизияларҙың фронты алдында ҙур резерв көстәрен туплай, беҙҙең ғәскәрҙәрҙең Мозырға һөжүмен нисек тә булһа туҡтатырға ниәт итә.

Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.
(Дауамы бар).

✓ Башҡорт аты йәйләүгә сыҡҡан башҡорттоң барлыҡ ихтыяжын ҡәнәғәтләндергән. Ул сабыр, егәрле, үҙ-үҙен ҡарай, һөт һәм ит бирә, ҡышын-йәйен артыҡ иғтибар талап итмәй.

КЕМДӘР

улар минең

(Башы 1-се биттә).

Ираида Әбүбәкер ҡыҙы, һеҙҙең башҡорт атына бәйле фәнгә килеүегеҙ нисегерәк башланды? Нимә генә тимә, беҙ элек-электән, ат - ул ир-ат шөғөлө, тип аңлап өйрәнгәнбеҙ…

- Мин Борай районының Мулла ауылында тыуып үҫтем. Атайым Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, һуңынан колхозда эшләне. Әсәйем - уҡытыусы. Атайым аттарҙы ғына түгел, ғөмүмән, бесәйҙән башлап аттарға тиклем бар хайуандарҙы яратты. Кемдер һыйыр һатып алырға булһа, атайыма шундай һорау менән мөрәжәғәт итте: "Ошо һыйырҙы алһам, уның һөтө күп һәм сифатлы булырмы?" һ.б. Әсәйем һуңынан һөйләүенсә, мин бер йәштән алып һәр ваҡыт атайым янында йәғни аттың бауыры аҫтында уралғанмын. Бының өсөн әсәйем ныҡ борсолған, атайым уны һәр ваҡыт: "Ат аҡыллы мал, ул бер ваҡытта ла балаға зыян килтермәҫ", - тип йыуатҡан. Әсәйем мине шул сағымдан башлап "ат ене ҡағылған бала" тип белде.

Минә ҡалһа, бер тапҡыр ат менән эш иткән кеше уны яратмайынса булдыра алмайҙыр. Хайуандар араһында аттан да аҡыллыраҡ, аттан да тоғрораҡ, аттан да күркәмерәк йән эйәһен мин белмәйем. Шуға күрә урта мәктәпте бөткәндән һуң ауыл хужалығы институтының зооинженерия факультетында уҡып, зоотехник булып эшләүем аттарға ҡарата булған һөйөүемә туранан-тура бәйле булды. Был саҡта ҡалала йылҡысылыҡ буйынса лаборатория эшләне. Мин шунда эшкә барҙым һәм ҡалған ғүмеремде аттарға бағышланым. Тәүҙә кандидатлыҡ, аҙаҡ докторлыҡ диссертацияһы яҡланым.

Башҡорт тоҡомло атҡа ҡарата булған айырата һөйөүегеҙ нисек барлыҡҡа килде?

- Күптәр иң матур, иң шәп ат тип ғәрәп тоҡомло аттарҙы иҫәпләй. Төркмән, ахалтекин аттарын да камиллыҡ сифатына тиңләүселәр бар. Минә ҡалһа, иң яҡшыһы - башҡорт аты. Сөнки башҡа аттар тик бер йүнәлештә генә үҫешә. Ә башҡорт аты бәйгегә лә шәп, йөк аты ла, һөтө лә, ите лә бынамын тигән. Өҫтәүенә, изге күңелле, шуға күрә уны иппотерапия, йәғни сирле балаларҙы һауыҡтырыу өсөн файҙаланалар. Һыбай туризм өсөн дә башҡорт атынан уңайлыһы юҡ, сөнки ул тыңлаусан. Ҡыҫҡаһы, башҡорт атының етешһеҙ яҡтары юҡ.

Башҡорт аты формалашыуҙа тәбиғәт факторы ҙур роль уйнағанмы, әллә уны тоҡомсолоҡ, селекция юлы менән барлыҡҡа килтергәндәрме? Быларҙың ҡайһыһын мөһимерәк тип иҫәпләйһегеҙ?

- Башҡорт аты әле рәсми фән булмаған саҡта уҡ формалашҡан. Селекция тип аталмаһа ла, ата-бабаларыбыҙ тоҡомсолоҡ менән һәр ваҡыт шөғөлләнгән. Бының өсөн иң беренсе нәүбәттә өйөрҙә иң шәп бейәләрҙе һәм айғырҙарҙы ҡалдырып, уларҙың тоҡомдарын үрсеткәндәр. Башҡорт атынан талап ителгән төп шарт: ул ҡыш тибендә үҙенә-үҙе ризыҡ табып, үҙ йүнен үҙе күрергә, һәр бер бейә йылына бер тапҡыр ҡолонларға ла тейеш булған. Айғырҙарға инде өйөрөн һаҡлау һәм яҡлау бурысы йөкмәтелгән. Ә инде ошо шарттарға яуап бирмәгән аттарҙы иткә тотонғандар.

Башҡорт аты йәйләүгә сыҡҡан башҡорттоң барлыҡ ихтыяжын ҡәнәғәтләндергән. Ул сабыр, егәрле, үҙ-үҙен ҡарай, һөт һәм ит бирә, ҡышын-йәйен артыҡ иғтибар талап итмәй, ҡыҫҡаһы, башҡорт аты - универсаль продуктлылыҡ сифаттарына эйә. Әйтәйек, йөк аты - ул ауыр йөктәрҙе ташыу, ғәрәп һәм ахалтекин аттары бәйгелә сабыу өсөн генә шәп. Ә башҡорт атында барлыҡ сифаттар ҙа тупланған. Улар һәр төрлө шарттарҙа ла йәшәй алыусы идеаль төр.

Йыш ҡына башҡорт атын монгол тоҡомло аттар менән сағыштыралар. Уларҙың уртаҡ тамыры бармы?

- Улар тарихи яҡтан бер-береһенән бөтөнләй алыҫ тора. Тәбиғәт шарттарына ҡарап, төрлө төбәктәрҙә төрлө аттар формалашҡан. Ҡаҙаҡ, бүрәт, яҡут аттары ла шулай барлыҡҡа килгән. Яҡутияла, мәҫәлән, ҡаты һыуыҡтар өҫтөнлөк итә. Унда минус 60 градуслыҡ һыуыҡ ҡәҙимге хәл һанала. Шуға күрә яҡут аты беҙҙекенә ҡарағанда буйға тәпәшерәк, улар кәүҙәгә оҙон һәм самаһыҙ һимеҙҙәр, май тултырылған мискә кеүектәр. Башҡорт аты 40-45 градуслыҡ һалҡынға ҡулайлашҡан, ул 60 сантиметрлыҡ тәрәнлектәге көрттә лә үҙенә ризыҡ таба ала. Ҡаҙаҡ, бүрәт, яҡут, башҡорт тоҡомло аттар урындағы абориген тоҡомло аттар төркөмөнә ҡарай.

Башҡорт риүәйәттәрендә Уралда ҡырағай тарпандар йөрөүе хаҡында бәйән ителә. Башҡорт тоҡомло аттар уларҙан килеп сыҡҡанмы?

- Тарпандар башҡорт атының ғына түгел, ғөмүмән, барлыҡ аттарҙың боронғо тоҡомдары.

> ***Яҡшы өйөр айғыры бер ваҡытта ла икенсе айғырҙы өйөрөнә яҡынлатмай. Шуға күрә лә йылҡы өйөрҙәре бер-береһенә яҡынлай башлаһа, айғырҙар туҙына башлай. Был осраҡта ҡайһыһы көслө, шул еңеүсе була һәм өҫтөн сыҡҡан айғырҙың еңелгән айғырҙың бейәләрен үҙенең өйөрөнә алыуы тәбиғи. Шуға күрә лә үҙенең өйөрө хаҡында ҡайғыртыусы айғыр өйөрөн ситкә алып китә. Әгәр ҙә айғыр шәп булһа, уның өйөрөнә көтөүсе кәрәкмәй. Өфө йылҡысылыҡ заводында бер айғыр бейәләрҙе һауғандан һуң өйөрөн артабанғы һауынға тиклем үҙе көтә торғайны. Өс сәғәт үткәндән һуң һауынсы "Һауынға" тип ҡысҡырыуы була, айғыр бейәләрен тиҙ генә өйөрөп эйәртеп алып килә.***

Йылҡы өйөрө хужалары башҡорт тоҡомло айғырҙың үҙ нәҫеле өсөн сиктән тыш яуаплы булыуы хаҡында һөйләй. Баҡтиһәң, улар үҙ өйөрөндәге берәр бейә икенсе айғырҙан ҡолонлаһа, ҡолонон еҫкәп, үҙенеке түгеллеген билдәләй ҙә, өйөрҙән ҡыуып сығара йә талап үлтерә, тиҙәр. Был дөрөҫмө?

- Эйе, яҡшы өйөр айғыры бер ваҡытта ла икенсе айғырҙы өйөрөнә яҡынлатмай. Шуға күрә лә йылҡы өйөрҙәре бер-береһенә яҡынлай башлаһа, айғырҙар туҙына башлай. Был осраҡта ҡайһыһы көслө, шул еңеүсе була һәм өҫтөн сыҡҡан айғырҙың еңелгән айғырҙың бейәләрен үҙенең өйөрөнә алыуы тәбиғи. Шуға күрә лә үҙенең өйөрө хаҡында ҡайғыртыусы айғыр өйөрөн ситкә алып китә. Әгәр ҙә айғыр шәп булһа, уның өйөрөнә көтөүсе кәрәкмәй. Өфө йылҡысылыҡ заводында бер айғыр бейәләрҙе һауғандан һуң өйөрөн артабанғы һауынға тиклем үҙе көтә торғайны. Өс сәғәт үткәндән һуң һауынсы "Һауынға" тип ҡысҡырыуы була, айғыр бейәләрен тиҙ генә өйөрөп эйәртеп алып килә. Улай ғына ла түгел, килеп еткәс, бейәләрен сиратҡа теҙеп ҡуя. Әгәр ҙә теге йәки был бейә һауын аратаһына инергә теләмәһә, уны тешләп, үҙенең ихтыярына буйһондора.

Мин айғырҙарҙы һәр ваҡыт йәлләй торғайным. Бейәләр тыныс ҡына үлән утлай, туйына, ә айғыр борсолоп, өйөрөн уратып йөрөй, ғаиләһен бүренән йә сит айғырҙан ҡурсалай. Шуға күрә айғыр тыныс ҡына утлай ҙа алмай. Хәстәрлекле хужалар кистәрен бындай айғырҙы һоло менән һыйлай. Айғыр төндәрен дә өйөрөнөң хәүефһеҙлеге һағында уяу тора. Йылҡы өйөрөн ситтән күҙәткәндә хатта кешеләр араһында ла бындай дисциплинаның булмауына хайран ҡалаһың.

Башҡорт тоҡомло айғырҙарҙың үҙ өйөрөн бүреләрҙән һаҡлауы тураһында риүәйәттәр, айырым яҙыусыларҙың хикәйәләре бар. Өйөргә бүреләр һөжүм итә ҡалһа, айғыр ҡолондарын уртаға ҡалдырып, бейәләрен уларҙы уратып теҙә һәм йыртҡыстарҙың һөжүмен ҡаға…

- Әммә һәр осраҡта ла айғыр бүреләргә ҡаршы тора алмай. Бындай хәлдәрҙең уңышлы тамамланыуы бүреләрҙең һанына ла бәйле булыуы бар. Өс-дүрт бүренән айғыр өйөрөн һаҡлай ала. Әҙәбиәттә унлаған бүренең өйөргә ташланыуы бәйән ителгән тарих иҫтә ҡалған. Үҙенә йәбешкән бүреләрҙе айғыр өйөрҙән ситкә алып китә һәм улар менән бергә ҡаянан ташланып һәләк була. Әҙәби әҫәр булараҡ был ваҡиғала, бәлки, артыҡ биҙәүҙәр ҙә барҙыр, әммә үҙ өйөрө өсөн айғырҙың үҙ-үҙен ҡорбан итергә әҙер тороуы бәхәсһеҙ. Тоғролоҡ йәһәтенән кешеләргә аттарҙан күп нәмәгә өйрәнергә ине. Башҡорт аты минең өсөн кешеләрҙән яҡшыраҡ, яҡыныраҡ.

Башҡорт атының күп кенә күркәм сифаттары тәбиғәттән тинек. Әгәр ҙә уларҙы тибендән айырып, һыйырҙар һымаҡ һарай шарттарына күсерһәң, кәртәләргә ҡыуып индерһәң, улар үҙенең күп сифаттарын юғалтыр ине, тип уйламайһығыҙмы?

- Юҡ, ул ниндәй генә шарттарҙа ла үҙ асылына тоғро ҡалыр ине. Холҡо ла, продуктлылығы ла үҙгәрмәҫ ине, тип иҫәпләйем. Хатта башҡорт атын өс-дүрт йыл бикле тотоп, тибенгә сығарһаң, ул шундуҡ үҙ йәшәү рәүешенә күсәсәк. Башҡорт тоҡомло бейәләр март айында ҡолонлай башлай. Дөрөҫөн әйткәндә, улар ҡар өҫтөндә тыуа. Ун-ун биш минуттан һуң аяҡтарына баҫа ҡолондар. Иң башта инәһененең имсәктәрен табып ала. Артабан бер-ике сәғәттән һуң ул инәһенә эйәреп, ҡар өҫтөнән бер саҡрым юл үтә. Иң ауыр шарттарҙа тыуһа ла ошондай һынауҙарға дусар ителә башҡорт аты. Уларға ҡарап тик һоҡланырға ғына ҡала!

Башҡорт аты бер йылда ғына барлыҡҡа килмәгән, ул быуаттар буйына формалашҡан. Әлбиттә, тәүге осорҙа тоҡом һынауын үтә алмаған аттар ҙа булған, улар һәләк булған. Фәҡәт иң көслөләре генә тере ҡалып, артабан тоҡом уларҙан тыуған. Ә башҡорт ошо тере ҡалғандары араһынан иң яҡшыларын һайлап алып, артабан тоҡом үрсеткәндә шуларына өҫтөнлөк биргән. Әгәр ҙә бейә бер йылда ҡыҫыр ҡалһа, артабан уны өйөрҙә ҡалдырмағандар, иткә тотонғандар. Бының өсөн тәүҙә уның ҡойроҡ сәсен ҡырҡып алғандар. Ситтән ҡәҙерле ҡунаҡ килһә, уның күҙе башта шул малға төшкән.

Һеҙ бына селекция хаҡында һорау бирҙегеҙ. "Селекция" һүҙе латин теленән "һайлау, айырып алыу" тигәнде аңлата. Йәғни тоҡомсолоҡ менән шөғөлләнгән кеше үҙенә кәрәклене һайлап, айырып ала. Һөҙөмтәлә айырып алынған иң яҡшы аттар үҙенә оҡшағандарҙы тыуҙыра. Һөҙөмтәлә һәр быуында тоҡом яҡшырғандан-яҡшыра бара. Башҡорт атының барлыҡҡа килеүе лә кеше тарафынан шулай ойошторолған, ә ҡалғаны - тәбиғәттән. Башҡорт атының формалашыуында мөхит, тәбиғәт ҙур роль уйнаған. Сөнки кеше атын тибенгә сығарған, ә тәбиғәттең үҙ стихияһы: бураны ла, ямғыры ла, ҡары ла, ҡоролоғо ла һ.б. Был осраҡта көсһеҙҙәр һәләк булған, көслөләре генә ишәйгән.

Бәйге өсөн генә яратылған аттарҙы шәкәр, кәнфит ашатып ғына үҫтерәләр…

- Уларҙы тыуғас та стерилле йүргәктәргә урайҙар, бәпләйҙәр. Кишерҙе лә йыуып ҡырғандан һуң батмусҡа һалып алдына ҡуялар. Һәр өс сәғәт һайын витаминдар, микроэлементтар, минераль матдәләр балансы һаҡланған ризыҡ бирәләр. Хәҙер уларҙы башҡорт аты менән сағыштырып ҡарайыҡ. Беҙҙең аттар тыуғандан алып үҙ-үҙен ҡарай, туйындыра, дауалай, тулыһынса, үҙ йүнен үҙе күрә. Ул теге йәки был сирҙән арындыра торған үләнде үҙе табып ашай. Бесәйҙәр ҙә, эттәр ҙә шулай итә.

Элек бөтә Рәсәйҙән, элегерәк Советтар Союзынан ғалимдар координацион кәңәшмәгә йыйыла торғайныҡ. Улар беҙҙең аттан "башкиренок, ни вида, ни..." тип көлә инеләр. Мин уларға ныҡ асыуландым, сөнки шуны беләм: донъялағы аттар араһында башҡорт атынан матурырағы, унан яҡшырағы юҡ.

Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында барған үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә ауыл хужалығы ныҡ ҡыйралыш кисерҙе. Башҡорт тоҡомло аттар ҙа йылҡысылыҡ заводтарынан шәхси ҡулдарға күсеп, тәртипһеҙ рәүештә үрсей. Башҡорт атының формалашыуында тәбиғәт факторы ҙур роль уйнай тинегеҙ. Бөгөн башҡорт атын һаҡлап ҡалыу өсөн уны ирекккә һыпырып ебәрергә кәрәкмәйме икән?

- Был дөрөҫ булмаған юл. Сөнки урындағы эш аттары улар тоҡом түгел, ә үҙаллы үрсегән популяция. Беҙ оҙайлы йылдар буйына башҡорт популяцияһындағы аттарҙан башҡорт тоҡомо барлыҡҡа килтерҙек. Популяциянан тоҡом сығарыр өсөн кешенең ярҙамы мотлаҡ кәрәк. Иң башта популяциянан линия яһарға кәрәк. Нимә ул линия? Линия - ул бер айғырҙан барлыҡҡа килгән нәҫел. Беҙҙең заводта "Ужғырыусы" ("Гремучий") тигән айғырҙың линияһы бар ине. Уның бүләре "Спектр" ҙа үҙ линияһын барлыҡҡа килтерҙе. Был айғырҙар хаҡында. Ә бейәләргә килгәндә, әйтәйек, бер бейәнән өс бейә тыуа, уларҙың да ҡыҙҙары тыуа. Иң башта торған бейә үҙенең ҡыҙҙарына сифатлы һөт биреү һәләтен тапшыра. Артабан эстафета ошо рәүешле дауам итә. Беҙҙең ата-бабалар меңәр йылдар һуҙымында тоҡомсолоҡ эшен алып барып, бөгөнгә килтереп еткергәндәр. Беҙ ошо

АТ ЯРАТА - яҡын кешеләрем...

ысул менән "Аҫау" ("Грозный"), "Ғорур" ("Гордый"), "Ғәйрәт" ("Гайрат"), барлығы егерме бишләгән линиялар барлыҡҡа килтерҙек. Бөтә донъянан юғары комиссия килеп, беҙҙәге тоҡомсолоҡ эшен тикшереп йөрөнөләр. Баймаҡ районының "Ирәндек" совхозында ҡырҡлаған беҙҙең тоҡом бейәләрен күреп, улар хайран ҡалды. Бейәләр бер-береһенән айырып булмаҫлыҡ ине. Был - тоҡомсолоҡ эшенең яҡшы ҡуйылыуы хаҡында һөйләй. Комиссия аҙ-

ҡалала тороп ҡалырға, унда үҙенең эшен табырға тырыша.

Атына атланған башҡорт яугиры хаҡында тарихта бихисап яҙмалар, хроника һаҡлана. Башҡорт атлылары Парижға ла, Берлинға ла барып еткән. Беҙ белгән башҡорт тоҡомло аттар менән яу аты нимәһе менән айырыла? Ул шул ук атмы?

- Шайморатов яугирҙары башҡорт аттарына атланып сығып киткән. Әммә һуғышта яуда башҡорт атынан кавалерия аты алыр өсөн тырышып ҡарағандар. Был эштәр Баймаҡ, Матрай (Йылайыр) райондарындағы йылҡысылыҡ заводтарында алып барылған. Бының өсөн башҡорт тоҡомло бейәләрҙе Дон, Буденный, Орлов, ахалтекин тоҡомло айғырҙар менән ҡушып ҡарағандар. Уларҙан бик матур, текә тояҡлы ҡолондар тыуған. Әммә улар ҡышын тибендәрҙә тулыһынса тиерлек һәләк булғандар. Улар аталарынан матур һын ғына түгел, йәшәү шартын да ҡабул итеп алған. Был эш менән шөғөлләнеүселәр һәр төр менән башҡорт бейәләрен тороҡтороп ҡарағандан һуң шундай ҡарарға килгән: бынан бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ.

Хәрбиҙәрҙе башҡорт атының бәләкәй буйы ғына ҡәнәғәтләндермәгән, башҡа йәһәттән уға еткән яу аты табылмаған.

Тоҡомсолоҡ юлы менән башҡорт атын буйға үҫтереү мөмкинме?

- Мөмкин. Был йүнәлештә эш алып барып, беҙ башҡорт атының буйын 8 сантиметрға арттыра алдыҡ. Бының өсөн буйға башҡаларҙан бейегерәк булған бейәләрҙе шундай уҡ айғырҙар менән тороҡторҙоҡ. Әммә әлеге лә баяғы туҡһанынсы йылдар барыһын да емерҙе. Совет осоронда тоҡомсолоҡ эшен дәүләт контролена алыусы Госплемоинспекция хеҙмәте эшләне. Уның ҡағиҙәләре буйынса теге йәки был тоҡом йәмғиәт, дәүләт байлығы һаналды һәм ул еребеҙ кеүек, закондар тарафынан һаҡланды. Ул саҡта тоҡомло малдарҙы ситкә сығарыу ғына

Үткән быуаттың аҙағы тоҡомсолоҡ эшенең алтын осоро булғандыр. Туҡһанынсы йылдарҙағы үҙгәрештәр был эште юҡҡа сығарҙы. Күп көс һалынған беҙҙең элиталы өйөрҙәр еңел генә юл менән шәхси хужалыҡтарға таратылды, һатылды. Был - башҡорт тоҡомло аттар өсөн фажиғәгә тиң булды. Минең ҡырҡ йыллыҡ хеҙмәтем дә ошо рәүешле юҡҡа сыҡты. Беҙ әле лә туҡталып ҡалманыҡ, башҡорт тоҡомло аттарҙы һаҡлау буйынса нимәлер эшләп ҡалырға ынтылабыҙ. Барыһын да өр-яңынан, нулдән башлап эшләргә тура киләсәк. Быға белгестәрҙең етмәүе ҡамасаулай.

- Был турала телевидение аша ла сығыш яһағаным булды. Сөнки башҡорт аты йәшәүемдең мәғәнәһенә әүерелгән. Тоҡомдо барлыҡҡа килтереү өсөн кәмендә 45-50 йыл ваҡыт талап ителә, биш-алты быуын формалашырға тейеш тәүҙә. Был хаҡта ваҡытлы матбуғатта яҙылырға тейеш. Ә бында һис юғы бер мәҡәлә лә, тәжрибәләр үткәрелеүе хаҡында яҙмалар ҙа булмаған көйө тоҡом барлыҡҡа килтергәндәр.

Баймаҡ районының бер һабантуйында Ырымбур, Силәбе өлкәһенән, республикабыҙҙың башҡа райондарынан килгән эре тороҡло бәйге аттары ярышты. Баймаҡтар уларға ҡаршы башҡорт тоҡомло аттарҙы ҡуйҙы. Ҡыҫҡа дистанцияларҙа, өс, биш саҡрымлыҡ сабыштарҙа беҙҙең аттар башҡаларҙан күпкә артта ҡалып килде. Иң ҡыҙығы ун һәм унан да алыҫыраҡ дистанцияларға сабышта күҙәтелде. Тәүге әйләнештәрҙә беҙҙең аттар башҡаларҙан күпкә артта ҡалып килә лә, дистанцияның икенсе өлөшөндә беҙҙең аттар саҡ ҡыҙып алып, алға сыға, оҙон тороҡлолар арый башлай. Һуңғы әйләнештә беҙҙең аттар алға сығып, финишҡа беренсе булып килә. Ошо хәлдә һеҙҙең комментарий?

- Башҡорт атының башҡаларҙан айырылған төп сифаты бына ошонда ла инде. Улар талымһыҙ, сабыр. Совет осоронда, бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышына тиклем отчеттар биргәндә аттарға мөнәсәбәт үтә лә юғары булды. Ни өсөн шулай? Сөнки ат ул ваҡытта һуғыш өсөн кәрәк булған. Ул саҡта йылҡы малы хәрби резерв иҫәпләнгән һәм әрмегә саҡырыу өсөн хәрби комиссариаттарҙа хатта аттарҙың паспорты тултырылған. Әгәр ҙә ул ат кемдеңдер ғәйебе менән үлеп ҡалһа, йәки һыртына эйәр, муйынына ҡамыт һуҡһа, бының өсөн ғәйепле кеше биш

аттары. Беҙ "Аҡбуҙат" ипподромы менән берлектә был йүнәлештәге эштәрҙе башланыҡ. Дүртенсе йүнәлеш: туризм өсөн аттар, бишенсеһе - иппотерапия аттары. ДЦП менән ауырыған баланы атҡа ултыртҡанда баланың бөтә тән мускулдары эшләй башлай. Барлыҡ тән ағзаларын хәрәкәткә килтерә торған башҡа спорт инвентары донъяла юҡ. Атҡа атланған бала уның һыртынан ҡолап ҡалмаҫ өсөн барлыҡ мускулдарын эшләтергә мәжбүр була. Бынан тыш аттар шул тиклем көслө биоялан мөхите барлыҡҡа килтерә, уның муйынына һырлығып тороу менән барлыҡ арыуын ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыға. Үҙенең фарманын үтәгән шундайын мөһабәт йән эйәһе менән аралашҡандан һуң баланың үҙ-үҙенә ышанысы арта. Әгәр ҙә баланы мәктәп йәшенән аттарға өйрәткәндә бының һөҙөмтәһе баһалап бөткөһөҙ булырына шик юҡ. Ауыл мәктәптәре янында аттар тотоу ҙа маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Балаларҙы тәрбиәләгәндә аттарға тиң йән эйәһе булмаҫ ине тип иҫәпләйем.

Ғәрип балалар менән ике сәғәт аралашҡан саҡта ат өс килоға яҡын тән ауырлығын юғалта. Ундай аттар башҡа аттарға ҡарағанда алты-ете йылға аҙыраҡ йәшәй.

Башҡорт аты ҡымыҙы, йылҡы ите менән дан тота. Был хаҡта нимә әйтерһегеҙ?

- Бейә һөтө химик составы менән күкрәк һөтөн алыштыра. Ә кеше өсөн әсә һөтөнән дә файҙалыраҡ ризыҡ бармы? Юҡ. Һыйыр һөтөндә казеин 80 процент, йәғни һыйыр һөтөнөң 20 проценты ғына организм тарафынан эшкәртелә. Ә бейә һөтөнөң 50 проценты һеркәле аҡһымдан тора, ә улар ҡан составына инә, йәғни бейә һөтө шундуҡ кешенең ҡанына файҙалы матдә булараҡ үтеп инә. Һөҙөмтәлә бейә һөтө йөҙ проценты менән организм тарафынан эшкәртелә. Ә бейә һөтөндәге казеин һыуҙа эрей. Бейә һөтөндәге юғары энергетик элемент һаналған лактоза һыйыр һөтөнә ҡарағанда ике тапҡырға күберәк. Лактозаның әсеүе һөҙөмтәһендә ҡымыҙ барлыҡҡа килә. Шуға күрә лә һыйыр һөтөнән ҡымыҙ эшләп булмай.

Йылҡы итендәге аҡһым һыйыр итенә ҡарағанда 3 процентҡа күберәк. Холестерин һыйыр итенә ҡарағанда 8 тапҡырға аҙыраҡ. Тағы ла аминокислоталарға бай һәм тиҙ генә организм тарафынан эшкәртелгән йылҡы ите диетик ризыҡ һанала.

Студенттарығыҙ менән аралашаһығыҙмы?

- Былтыр Баймаҡ районының Граф күле буйына барғанда килеүемде ишетеп ҡалған студенттарым менән осраштым. Улар менән һәр саҡ бәйләнештә торам. Ғөмүмән, кемдәр ат ярата - улар минең кешеләрем. Ат яратҡан кеше бер ваҡытта ла насар кеше була алмайҙыр.

Фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт, Ираида Әбүбәкер ҡыҙы!

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.

✓ *"Һәр берегеҙ һыбай килеш кавалерия алымдарын башҡарырға тейешһегеҙ. Бына ошолай", - тип йүгереп барып ат ялына ике ҡулы менән йәбеште лә төп-төҙ аяҡтарын ситкә ырғытып арғымаҡ өҫтөнә менеп тә ултырҙы.*

Сафтың ҡойроғонда торған Зәһретдин иң һуңғы минутҡа тиклем ниндәйҙер мөғжизәгә ышанды. Был уҫал старшина уның яғына күҙ ташлар ҙа: "Итәлмасов, ко мне!" - тип ҡысҡырыр төҫлө тойолдо. Ләкин уның фамилияһын телгә алыусы кеше булманы, старшина эскадрон писарына ниҙер әйтте лә ҡайҙалыр китеп барҙы. Уның урынына баҫҡан икенсе кеше бөтөнләй ауылса:

- Хәҙер һеҙҙең барығыҙҙың да исемлегегеҙҙе алам! - тип ҡулы менән ишара яһаны ла коридор башындағы тумбочка артына барып ултырҙы.

- Бына һеҙҙән башлайбыҙ, - тине ул саф башында торған оҙон кешегә күрһәтеп. - Ә ҡалғандарығыҙ уның артынан берәм-берәм миңә килеп яҙыла торорһоғоҙ. Зәһретдин һаман өмөт итә: эскадрон писары, уның ҡиәфәтенә ҡарар ҙа, ҡарышҡан шикелле, ошондай яуаплы мәлдә әллә ҡайҙа дөмөккән старшинаны саҡырып алыр: "Был иптәште ҡайҙа тәғәйенләйбеҙ? Нисә әйтһәң дә, гражданкала бик ҙур урында эшләгән бит", - тип әйтер тип көттө. Юҡ, булманы, писарь уны исемлеккә яҙып ҡуйғас, эргәһенән китешә алмай күкрәген киреп торған Зәһретдиндың өмөт менән янған күҙенә аҫтан өҫкә бер ҡараш атты ла:

- Иптәш... - Ул тиҙ генә исемлегенә күҙ йүгертеп алды. - Иптәш Итәлмасов! Кешеләргә ҡамасаулайһығыҙ, эшегеҙ бөттө, ситкәрәк китегеҙ! - тигәс кенә, өмөтөнөң һуңғы ҡылы өҙөлдө.

Ул, күрһөнөп, бер-ике аҙым атланы ла күҙе менән ауылдашын эҙләне. Ә Ғилмишәриф, бер ни ҙә булмаған төҫлө, үҙе кеүек үк бик ябай ғына кейенгән кешеләр менән көлөшә-көлөшә ниҙер һөйләшә ине. Урмандағы бер соҡор янында төҙөлгән барак кеүегерәк йортҡа ашарға алып барҙылар ҙа, дүрт кешегә берәр котелок тоҙло балыҡ ашы тараттылар. Ҡайһыһы салбар кеҫәһенән, ҡайһыһы итек ҡуңысынан ҡалаҡтарын сығарып шыйыҡ ашты кемуҙарҙан һемерергә тотондо. Зәһретдиндың ашҡа тығылмай тик үҙенә тейгән икмәк киҫәген генә көйшәүен күҙәтеп ултырған берәү:

- Земляк! Һин нишләп ашамайһың? Әллә бындай аш тамағыңа бармаймы? Әйҙә аша, аша, - тине. Уның башҡорт кешеһе икәнен белептер инде: - Бында һиңә бишбармаҡ килтермәҫтәр, онот! - тип өҫтәп ҡуйҙы.

- Минең ҡалаҡ юҡ бит әле, - тип мығырланы Зәһретдин.

Теге телдәр кеше тағы әләктереп алды.

- Армияла, земляк, ҡалаҡ менән ҡорал икеһе бәрәбәр йөрөй. Ҡоралһыҙ һуғышып булмай, ҡалаҡһыҙ йәшәп булмай. - Шунан, ниҙер иҫенә төшкәндәй, киндер ойоғо ҡуңысынан тағы бер ҡалаҡ сығарҙы. - Бына ҡалаҡ, тик алюмин. Уның менән эҫе аштың эсеп булмай, - тине.

Зәһретдин ҡапыл аңғармайыраҡ ҡулын һонғайны, теге ҡалағын йышылмаған өҫтәл аҫтына йәшерә һалды:

- Ҡара, һин кеше малына бик сос икәнһең! Бындай ҡалаҡты һуғыштан алда ярты бот бойҙайға алмаштыралар ине, ә хәҙер баҙары бик юғары.

Ҡалаҡһыҙ эш харап икәнен аңлап алған Зәһретдин был кешегә һағыҙаҡ һымаҡ йәбеште. Сауҙалаша торғас, теге кешенең ҡалағын сынйыры менән йөҙ илле һумға һатып алды ла галифе салбарына тыҡты.

Иртәнге аштан һуң уларҙы ҡала буйлатып мунсаға алып киттеләр. Сисенеп ҡәҙерле кейемдәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырап йөрөгән Зәһретдиндың төргәген тартып алып, яланғас кешеләрҙең тауышынан шаулап яңғырап торған мунса эсенә индереп ебәрҙеләр. Был бер ҡулы менән оят ерен баҫып, икенсе ҡулы менән старшина биргән шырпы ҡабындай кер һабыны тотоп, бөршәйеп торҙо ла тасҡа сират алған кешеләр артына барып баҫты. Улары ла әллә кемдәр - бөтәһе лә яланғас, таныpлыҡ түгел - алдан инеп сиратты боҙҙолар, тастарҙы таратып алып та бөттөләр. Арҡаһын Маһитабынан ғына еҫле һабын менән ышҡытып өйрәнгән Зәһретдин һыу мискәһе ҡырына килеп башы аша ике сүмес һыу ҡойҙо ла сығып китте. Һалдат кеймдәре таратып ултырған старшина менән әлеге писарь яныңа барырҙан алда иҙән уртаһында өйөлөп ятҡан кейем-һалым араһынан затлылығы менән айырылып торған үҙ гимнастеркаһын, галифеһын, хром итектәрен ҡултығы аҫтына ҡыҫтырып, старшина алдына барып баҫты. Ә теге төпкә батҡан көҙән күҙҙәре менән Зәһретдинға яндырып ҡараны ла:

- А ну марш! Кеймдәреңде кире урынына һал! - тип бойорҙо. Шунан һаман шаңғып торған Зәһретдиндың кеймдәрен һыпыра тартып алды ла өйөм өҫтөнә атты: - Все ваши вещи пойдут в фонд обороны!

Аптыранған Зәһретдин:

- Мин ни өйгә кире ҡайтарырға уйлағайным да, юғиһә... - тип мығырлап үҙенең тире һеңешеп бөткән гимнастерка, галифеһына ҡарап ҡуйҙы. Әҙерәк күңеле йомшара төшкән старшина:

- Иптәш ҡыҙылармеец, һин дөрөҫ аңларға тейешһең: һәр кешенең кеймен ауылына илтеп тапшырып йөрөргә хөкүмәттең артыҡ транспорты юҡ. Кеймдәрегеҙ оборона фондына тапшырыласаҡ. Көнбайыштан немец фашистары оккупациялаған яҡтарҙан ҡасҡан кешеләрҙең күбеһе кеймһеҙ ҡалған, шуларға таратып бирәбеҙ. Конечно, һинең был кеймдәреңде бер яуаплы поста эшләгән кеше эләктереп ала инде. Уныһы факт, ну нишләмәк кәрәк? Дөйөм күрһәтмә шундай. - Старшина урынынан тороп өйөм өҫтөнән Зәһретдиндың итеген ҡулына алып ялтыр ҡуңысына усы менән шапылдатып һукты: - Итек шәп шул. Мәңгелеккә эшләнгән, - ул Зәһретдиндың итеген үҙенә үлсәп ҡараны. - Формаға тап килмәй. Ҡуңыстары оҙон... - Старшина Зәһретдинды йәлләпме, уның йыуантыҡ, тоҡорой кәүҙәһенә ҡарай-ҡарай, гимнастерка, галифе һәм кирза итеген үҙе һайлап бирҙе.

Өҫтөнә хәрби кейем, башына йәшел пилотка кейгән Зәһретдин мунса быуына һарғайып бөткән көҙгө алдына килеп баҫты. Көҙгөнән уға элекке Суртан приискыһының алтын ҡабул итеп ултырыусыһы Зәһретдин түгел, ә үҙенә лә ят булған ҡыҙылармеец ҡарап тора ине. Башҡалар ҙа килде. Шау-шыу, көлкө башланды. Таныштары, ауылдаш, райондаштары, бер-береһен тәү тапҡыр күргән шикелле, ҡул бирep күрешә:

- Ну, малай, һине танырлыҡ та түгел!

- Ҡайһылай ҙа килешә икән! Өҫтөнә һылап ҡаплаған шикелле!

Кискә уларҙы взводтарға, отделениеларға бүлделәр. Зәһретдин үҙен Ғилмишәриф менән бер отделениеға ҡуйыуҙарын һораны. Эстән генә: "Нисауа, ауылдаш ауылдаш булыр әле. Ни хәл итәһең, үҙ тиңеңде бынауындай мәхшәр араһында ҡайҙан тапмаҡ кәрәк?" - тип уйланы. Һәр кемгә һалам тултырылған матрац, мендәр, икешәр простыня, одеял бирҙеләр. Старшина үҙенең каптенармусы, отделение командирҙары, помкомвзводтар менән бергә килеп һөндерәнең береһенә матрац түшәп, өҫтөнә простыня йәйҙе, икенсе простыняны түшәккә ҡыялап тартты. Баш осона, текә кәбән шикелле, аҡ мендәрҙе ослайтып ултыртып ҡуйҙы ла янында торған кесе командирҙарға:

- Йә, нисек? - тип өндәште.

- Отлично!

- Бына ошолайтып дауам итегеҙ. Түшәгегеҙҙе мин эшләгән кеүек йәйегеҙ! - тип команда бирҙе.

Күп тә үтмәне, орсоҡ һымаҡ әйләнеп йөрөгән старшинаның икенсе фарманы ишетелде.

- Бөтәгеҙгә лә үҙ әйберҙәрегеҙҙе алып ике шеренгаға теҙелергә!

Һәр кем, ауылдан алып килгән ҡәҙерле муҡсай - "мишауай мешоктарын", сумаҙандарын алдарына ҡуйып, сафҡа теҙелде. Старшина сафты алдан да, арттан да урап сыҡты ла, ҡап уртаға баҫып, бармағы менән таш иҙәнгә төрттө:

- Үҙегеҙ менән алып килгән шмоткаларығыҙҙы бына ошонда өйә башлағыҙ!

Шулай ҙа бит, тик уның әмерен үтәргә ашҡынып торған кеше табылманы. Улар өсөн алдарында ятҡан ошо фанер сумаҙан, мөйөштәренә еп бәйләнгән төрлө төҫтәге киндер тоҡсайҙар, аяҡтары араһына ҡуйылған төрлө төргәктәр, үҙ ауылдары, үҙ яҡындары менән бәйләп торған иң һуңғы еп һымаҡ ине. Старшина:

- Уң флангынан башлайбыҙ! А ну! - тип екергәс, саф башында торған сабаталы ҡыҙылармеец ҡайын туҙынан эшләнгән моҙғаһын аяғы менән алға шылдырҙы ла тотҡаһынан тотоп илтеп һалды.

- А ну, следующий! Кешеләр, күргәҙмәгә ҡуйған шикелле, әйберҙәрен бер-береһенә йәнәш теҙә башланы.

- Баҙарға килтерҙегеҙме ни? Өйөп һалығыҙ! - тип ҡысҡырҙы теге.

Зәһретдин ауыр сумаҙанын старшина алдына ҡуйҙы.

- Все, все, товарищ красноармеец! Марш на место! - тип команда бирҙе.

Зәһретдин Ғилмишәриф эргәһенә килеп баҫты. "Эх! Кәбәк мейе! Нимәгә кәрәк булғандыр инде килен һандығындай сумаҙанға ярты йыл ашарлыҡ аҙыҡ-әүҡәт тултырып алып килеү. Бигерәк тә анауы спирты менән боҙолмай торған ҡаҡлаған колбаса йәл!.." Зәһретдин кешенекенән айырылып ултырған сумаҙанына ҡарап тағы көрһөнөп ҡуйҙы. Ғилмишәриф үҙенең буш тоғон ауылдашының сумаҙаны өҫтөнә ырғытты. Бөтә йыйылған ошо әйберҙәрҙе старшина менән писарь-каптенармус бер урынға ташып өйҙәләр ҙә кеше күҙен ҡыҙҙырып ятмаһын өсөн өҫтөн брезент менән ҡапланылар. Кискә өйөм эргәһенә мылтыҡлы бер часовой ҙа ҡуйҙылар.

IV

Иртәнге тамаҡтан һуң практик занятиелар башланды. Уларҙы, иген ырҙыны һымаҡ ялтырап ятҡан манежға алып килделәр, һалдаттарҙы отделениеларына бүлеп, шундағы тып-тын торған сәйер аттарға ҡаратып ҡуйҙылар. Бер хәрби ҡулындағы сыбығын һауала болғай-болғай мәсьәләнең асылын аңлатты:

- Хәҙер вольтижировка башлана, һәр берегеҙ, мин күрһәткәнсә, һыбай килеш кавалерия алымдарын башҡарырға тейешһегеҙ. Бына ошолай, - тип йүгереп барып ат ялына ике ҡулы менән йәбеште лә төп-төҙ аяҡтарын ситкә ырғытып арғымаҡ өҫтөнә менеп тә ултырҙы. Шунан сос ҡына һикереп төштө. Артҡараҡ сыҡты, йүгереп килеп ҡойроҡ яғынан һикереп менеп ултырҙы. Эйәр ҡашағаһына ике ҡулы менән таянып, аяҡтарын һауала ҡайсыланы ла йөҙө менән арт яҡҡа ҡарап ултырҙы. Был күнекмәне арттан алға эшләп тә күрһәтте. Шунан йүгереп килеп аттың ялына тотондо ла көүҙәһен турайтып теге яғына ташланы. Бәй, үҙе күҙ асып йомғансы аттың был яғында булды. Вольтижер тигәндәре, күнекмәләрҙе күрһәтеп бөткәс, хайран ҡалып ҡарап торған егеттәргә:

- Ә хәҙер инде үҙегеҙгә тәғәйен аттар янына барығыҙ, яҡындан танышығыҙ, - тине.

Бөтәһенән элек атҡа барып йәбешкән Ғилмишәриф, ҡулын тейгеҙеү менән артҡа сигеп ҡысҡырып ебәрҙе:

- Бәй!.. Был ни ағас ат бит!

Бөтәһе лә яҡын килеп ағастан эшләп ҡуйылған аттарҙы үҙ ҡулдары менән һәрмәп ҡарай башланы.

- Ысынлап та, ағас икән был нәмә!

- Ҡайһылай килештереп тороп эшләгәндәр. Хәс ат!

- Һуң һин уларҙың төҫтәрен ҡара: берәүһен тура, ә икенсеһен ҡара йылтыр итеп эшләгәндәр, - тиеште ҡыҙылармеецтар.

Шулай ҙа бит, әммә инструктор өйрәткән күнекмәләрҙе эшләй алырҙай дүрт-биш кенә кеше табылды. Шулар араһында Ғилмишәриф тә бар ине. Ғилмишәриф һуғыштан алда ойоштороlған "Ворошиловсы һыбайлылар" түңәрәгендә әлеге күнекмәләрҙе ағас атта түгел, колхоздың менгегә өйрәтелгән "Әүхәҙи" тигән өйөр айғыры өҫтөндә башҡарғайны. Өйрәтеү бөткәс, взвод командиры лейтенант Руссов Яуымбаев Ғилмишәрифте саф алдына саҡырҙы. - Бөгөнгө занятиела күнекмәләрҙе оҫта, аныҡ итеп башҡарғаны өсөн ҡыҙылармеец Яуымбаев Ғилмишәрифкә командование исеменән рәхмәт белдерәм, - тине. Ни тип яуап бирергә белмәй аптырап ҡалған Ғилмишәриф:

- Товарищ лейтенант! Живой лошадь надо, - тигән булды.

Лейтенант уның арҡаһынан һөйҙә лә:

- Иптәш Яуымбаев, сабыр ит, аттың тереһен дә бирербеҙ! Әйткәндәй, һин гражданкала кем булып эшләнең? - тип һорап ҡуйҙы.

- Колхоз йылҡыһын көттөм. Мин гүләүәй йылҡының табунщигы.

Лейтенант теҙелеп торған взводҡа ҡарап алды ла:

- Бына барығыҙға ла иптәш Яуымбаевтан өйрәнергә кәңәш итәм! - тине.

Киске политинформация ваҡытында ла Яуымбаевтың фамилияһын маҡтап телгә алды-

лар. Ә иртәгәһенә эскадронда сыға торған "Атлы молния" тигән стена гәзитендә уны маҡтап яҙған бер нисә юл хәбәр ҙә күренеп ҡалды. Был күнекмәләр артабан да ҡабатланды. Вольтижер Ғилмишәрифкә күнекмәләрҙе башҡарырға команда бирҙе. Шуны ғына көтөп торған егет арыҫлан етеҙлеге менән кисә күрһәткән алымдарҙы ҡабатлап ергә төшкәс:

- Молодец! Ат өҫтөндә тыуған кеүек эшләйһең! Хәҙер ҡарап ҡына тор! - тине.

Күнекмәләрҙе үтәй алыусылар яйлап арта барҙы. Барыһы ла Ғилмишәриф һымаҡ матур башҡара алмаһалар ҙа, ат өҫтөнә тырмашып булһа ла атлана башланылар. Бер аҙнанан күнекмәләрҙе эшләй алмаусылар һаны өҫтән бергә генә ҡалды. Башта Заһретдиндың булдыҡһыҙлығы күҙгә артыҡ салынмаһа ла, артабан ундайҙарҙың һәр береһен таный, көлә башланылар. Тегеләрҙе занятиелар тамамланғас та манежда алып ҡалып арманһыҙ булып аяҡтан йығылғансы өйрәтә бирҙеләр. Тора-бара ремонт эскадронында булдыҡһыҙҙарҙан биш кеше генә тороп ҡалды. Билдәле, бишәүҙең береһе Заһретдин ине. Лейтенант Руссов, Ғилмишәрифтең Заһретдин менән бер ауылдан икәнен белеп, яҡташына ярҙам итеүҙе йөкмәтте. Ләкин Заһретдин үҙенең алға китеше менән бер кемде лә ҡыуандыра алманы.

- Тик торған ағас атҡа ла менә алмағас, тиҙҙән ысын аттар менән күнекмәләр башлаһаҡ, һин нишләрһең? Һин Яуымбаев менән бер ауылдан түгелме һуң? - тип Руссов Заһретдин ағас атҡа менә алмай шыуып төшкән һайын әрләне. Ахырҙа аптырағас: - Һин, иптәш Итәлмасов, милләтең буйынса ғүмерең ат өҫтөндә үткәргән башҡорт тоҡомонан түгелме һуң? - тип уның сәменә тейергә уйланы. - Ауылдашың Яуымбаевты ғына түгел, ат өҫтөндә оҫта йөрөгән бөтә башҡорт халҡын мәсхәрәләйһең дә баһа? - тип уның теңкәһенә тейҙе.

Булдыҡһыҙлығына ҡарамаҫтан, Заһретдин бирешеп барманы, бик үҙәгенә үтә башлағас, бер көн лейтенант Руссовҡа:

- Һеҙ мине бөтә башҡорт менән мыҫҡыл итмәгеҙ. Минең бөтә башҡортта ҡыҫылышым юҡ. Фамилиям да Башкиров түгел, ә Итәлмасов! - тип ебәрҙе.

Үҙенә күрә түгел шыртын өрпәйткән Заһретдинға взвод командиры оҙаҡ ҡына теклəп торҙо ла:

- Ахыры, һин, иптәш Итәлмасов, минең әйткәндәрҙән бер ни ҙә аңламаның. Конечно, бөтә башҡорттоң һиндә эше юҡ, ул халыҡ һинең кеүек тиреҫ тултырылған тоҡто күптән үҙ исемлегенән һыҙып ташлар ине, - тине.

Үҙ намыҫына тел тейҙертеп өйрәнмәгән Заһретдин өндәшмәй генә ҡалыу түгел, лейтенантҡа ҡаршы һөжүмгә күсте:

- Белəһеңме, иптәш лейтенант, мин бындай мыҫҡыл итеүҙе күтәрə алмайым! Мин гражданкала бына бындағы шикелле, - ул ялтырап ятҡан ҡаҡ ергə үксəлəре менəн тапанып алды, - ағас атҡа менеп бушҡа ваҡыт үткәрмәнем, хөкүмәткə алтын ҡабул иттем, - тип һалдырҙы...

(Дауамы. Башы 29-сы һанда).

РӘССАМҒА ӨС ҺОРАУ

ҮҘЕНСӘ, ҮҘЕНСӘЛЕКЛЕ ИЖАД ИТӘ

Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәйзрахман Абдрахман улы Исмәғилев - СССР-ҙың халыҡ рәссамы Әхмәт Лотфуллиндың шәкерте, барлыҡ эштәре лә тематика тәрәнлеге, халыҡсанлығы менән айырылып тора. Талант эйәһе киндерҙә башҡорт тарихын мәңгеләштерә, донъя кимәлендәге күргәҙмәләрҙә ҡатнаша, һынлы сәнғәт аша милләтенең, тыуған еренең мәртәбәһен күтәрə. "Ауыл хыялыйы", "Өйөрөлмәк", "Толпар", "Алпамыша", "Ҡыҙылташ", "1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорттар", "Салауат тураһында иртәк" (авторҙашы И. И. Ғаянов), "Ҡанатлы ат", "Ҡолап барыусы Толпар", "Сен-Жермен майҙанында таң", "Александр I баташаның башҡорттарға мөрәжәғәте" һәм башҡа эштәре һынлы сәнғәттә үҙ итеүселəргə яҡшы таныш. Беҙ бөгөн Фәйзрахман ИСМӘҒИЛЕВҡа өс һорау бирҙек.





➔ **"Замандаштарыбыҙ араһында башҡорт рәссамдары", тигән саҡта һеҙҙең исем-шәриф беренселəрҙән булып тел осона килə. Бар ғүмерегеҙ һынлы сәнғәткə арналған. Шулай булғас, һеҙҙән, рәссам булыр өсөн ниндәй сифаттар кәрәк, тип һорай алам.**

- Иң беренсе, һәйбәт кеше булырға кәрәк. Икенсенән, тыуған илеңде яратырға кәрәк. Үҙеңдең эшеңде кемгә бағышлайһың - тыуған иленə, туған халҡыңа түгелме ни? Мотлаҡ алға ҡуйған маҡсатың булырға тейеш. Ижад юлымды башлаған саҡта мин ошо уйҙар менән ҡоралландым. Халҡың өсөн генə түгел, ə халҡың тураһында яҙаһың бит! Кеше эшһеҙлектән, аптыраған-иккəндəн, тикторғандан буяу-һыҙыу менəн шөғөлләнеп китмəй. Йəнə лə, үҙеңдең яҙыласаҡ, йəғни тыумаған эштəренде яратырға тейешһең. Яратып ижад итһəң, һинең эшең уңа. Беренсе мөхəббəтеңде картинаға төшөр əле - уны нисек яратмай эшləмəк кəрəк? Ижад та шулай.

Һəр картинаның үҙ тыуыу тарихы бар. Əхмəт ағай Лотфуллиндың миңə əйткəн һүҙҙəрен иҫлəйем. Бер тапҡыр ул минəн: "Был эште заказ менəн башланыңмы, əллə күңелеңə ятҡан өсөн яҙаһыңмы?" - тип һораны. "Юҡ, был күңелемə ятҡан эш", - тинем. "Улайһа, эшең уңа", - тине оҫта. Əхмəт ағайҙың ҡарашы менəн ризалашырға була, əлбиттə. Ләкин Леонардо да Винчи, Микеланджело, Рафаэль һ.б. рəссамдар заказ менəн яҙғандар, хеҙмəттəре өсөн ҙур аҡса алғандар. Леонардо да Винчиға Мона Лизаны яҙырға заказ биргəндəр, ләкин аҙаҡ заказ биреүсеһе картинаны оҡшатмаған, уны алмаған, баш тартҡан, тип тə əйтəләр. Рəссам иһə һүрəтте ташламаған, оҙаҡ ҡына үҙе менəн йөрөткəн, яйлап ҡына уны төҙəткəн дə төҙəткəн, үҙгəрткəн дə үҙгəрткəн һəм, ахыр килеп, Мона Лизаны идеаль бер образ дəрəжəһенə еткергəн. Беҙ күреп-белгəн портрет тəүге вариантына оҡшамағандыр, тием. Ысынбарлыҡта, Леонардо да Винчи үҙе күҙ алдына килтергəн камил ҡатын-ҡыҙ образын яһаған. Элекке Мона Лизанан исеме генə тороп ҡалған. Рəссамдарҙың əҫəрҙəре көҙгө кеүек, уның ниндəй кеше икəнен күрһəтеп тора. Əйе, ижад емеше - кеше күңеленең көҙгөһө.

➔ **Һəр ижадсы ниндəй ҙə булһа хыял менəн йəшəй. Һеҙ үҙегеҙҙең иң яҡшы əҫəрегеҙҙе яҙҙым, тип уйлайһығыҙмы? Əллə ундай табыш алда тиһегеҙме?**

- Əҫəр яҙыуҙы мин ауырлы ҡатын менəн сағыштырыр инем. Ауырға ҡалған ҡатын ниндəй бала тыуҙырырын белмəй. Ул төрлө уйҙар солғанышында йəшəй, камил бала табасағына өмөт итə. Шулай уҡ яңылыш аҙым яһап, балаһының тыуыуын теләмəгəн, сабыйҙан нисек тə ҡотолорға тырышҡан ҡатындар ҙа була. Һүрəттең яҙмышы ла шулай булыуы мөмкин.

➔ **Живопись тарихына күҙ һалһаҡ, төрлө ағымдар менəн танышабыҙ. Абстракционизм, футуризм, дадаизм һəм башҡалар, һəм башҡалар. Бөгөнгө башҡорт һынлы сəнғəтендə новаторлыҡ һəм традициолыҡҡа нисек ҡарайһығыҙ?**

- Яңы бер йүнəлеш табам да, новатор булам, тип йəшəргə кəрəкмəй. Һинең күңелендə тыуған əҫəр, иҫке булыпмы, яңы булыпмы, барыбер килеп сыға ул. Мин хатта "новатор булам" тип эшləгəн кещеləрҙе артыҡ ихтирам да итмəйем. Ундайҙарҙы замандың ваҡытлыса килеп тыуған шауҡымына бирелеү, кемгəлер ярарға тырышыу, ярамһаҡланыу һымаҡ ҡабул итəм.

Йəш саҡта үҙем дə "изм"дар менəн ауырып алдым. Шундай əҫəрҙəремде Əхмəт ағайға күрһəтһəм, ул миңə йылмайып ҡына ҡарап тора ла, барлыҡ "изм"дарымды браҡҡа сығарып бөтə торғайны. Хəҙер аңлайым, уларҙа яһалмалыҡ, үҙенде кəпəйтеп күрһəтергə маташыу ята ине. Ə һин ниндəйһең, һынлы сəнғəттə лə шундай булырға тейешһең. Əлбиттə, һəр заманда ла йəштəр шулай булып ҡаласаҡ: төрлө "изм"дарға əүрəп, үҙ юлын эҙləйəсəк. Шулай булһындар əйҙə, был тормош ҡануны. Ə ололар - аҡыл туплаған быуын. Мин үҙем дə хəҙер донъяға Əхмəт ағай һымаҡ ҡарайым, һоҡланып эшləйем, бүтəндəрҙəн айырылайым əле, тигəн уй менəн түгел, ə күңелемə ятҡанды ижад итəм.

Замана, əлбиттə, ҡатмарлы, рəссамдар хəҙер оло картиналар яҙмай. Яҙыуҙың мəғəнəһе, рəүеше бөттө. Əйтəйек, элек хөкүмəт ҙур полотноларға тотонорға, Салауат батыр, Ҡаһым тураһында яҙырға кəрəк, тип тəҡдим яһай ине. Үҙебеҙҙең тарихҡа ҡағылышлы бына шундай тематикалар булып торҙо. Хəҙер быларҙың береһе лə юҡ. Теге йəки был акция буйынса күргəҙмəләр үтеп тора, улар, башлыса, ваҡытлы һəм ваҡ темалар менəн бəйле. Минең башҡорттарҙың Парижға тиклем барып еткəн юлын һүрəтлəгəн картиналар шəлкемем бар. Əле аталған тематикаға яҙылған бындай киң даирəле картиналарыбыҙ юҡ беҙҙең. 1812 йылғы ваҡиғаларҙы һүрəтлəгəн əллə нисəмə конкурстарҙы үткəн, ҙур-ҙур күргəҙмəләрҙə ҡатнашҡан ошо картиналар тупланмаһын тарих өсөн, халыҡ өсөн һаҡларға кəрəк, тип, БР Мəҙəниəт министрлығына мөрəжəғəт иткəнем булды. "Ярай, ыңғай хəл итербеҙ, хуплайбыҙ", тинеләр ҙə, эш һүҙҙəн ары китмəне. Рəссамдарға мөнəсəбəт үҙгəрергə тейеш, тип уйлайым. Хəҙер Өфө сəнғəт институтының художество-графика бүлегендə егеттəр укымай тиерлек. Унда башлыса ҡыҙҙар ғына белем ала. Ниндəй талантлы егеттəребеҙ ситкə китə, йə иһə һөнəрҙəрен алмаштырырға мəжбүр. Ижади үҫеш өсөн ярҙам кəрəк.

Баш ҡалабыҙ төҙөкләнə, матурлана, унда, бер яҡтан, һынлы сəнғəт эштəренə урын бирелеүе шатландыра, икенсе яҡтан, архитектура йəһəтенəн бөтөнləй əһəмиəтһеҙ һындар (боланмы, атмы, велосипедмы, һ.б.) урын алыуы эсте бошора. Элек скульптураларҙы ҡуйған саҡта һайлау комиссияһы эшləй ине. Бына шул талапсанлыҡ етешмəй бөгөн. Комиссия эшен мотлаҡ йəнləндерергə кəрəк, ул саҡта художество йəһəтенəн бер ниндəй ҡиммəте булмаған аңлайышһыҙ эштəр баш ҡала урамдарын йəмһеҙləп тормаҫ ине.

Фəрзəнə АҠБУЛАТОВА
яҙып алды

✓ *1-се май көнө немецтар парламентерҙар ебәрә. Капитуляция шарттары хаҡында дошман башлыҡтары менән артабанғы һөйләшеүҙәрҙе тоташтырыусы звено булып, тап Ғүмәровтың команда пункты тора.*

ИНТЕРНЕТТАН

ҮҪЕМЛЕК ҺӨТӨ ФАЙҘАҺЫҘ

■ Берәй йыр ишетеп, шул башығыҙҙа көнө буйы "көйләп" тик торғаны бармы? Инглиз телендә быны "earworms" - тураннан-тура тәржемә иткәндә, "ҡолаҡ селәүсендәре" тип атайҙар. Ысынлап та, был селәүсендәр башҡа "инеп ултыра" ла, уларҙы унан бер нисек тә ҡыуып сығарып булмай. Ғалимдар иһә был күренеште "ирекһеҙ музыкаль образдар" тп йөрөтә, сөнки улар башыбыҙға саҡырыуһыҙ килеп инәләр. 2020 йылда үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан студенттарҙың барыһы ла ошо хәлдә булғаны бар икәне асыҡланған. Баш мейеһендә "аҙашып" ҡалған көй - универсаль феномен. Ғәҙәттә, беҙ булған ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрөп алһаҡ та, уларҙы ҡабат-ҡабат башта "әйләндереп" тормайбыҙ. Ә был осраҡта иһә, киреһенсә, ул ошо яғы менән айырыла ла - ҡабатлана ла ҡабатлана. Ғалимдар быны нисек аңлатырға белмәй, был мейе төҙөлөшө үҙенсәлеге менән бәйлелер, тигән фараз ғына бар. Тиҙ генә хәүефләнеп барыусылар, стресты ауыр кисереүселәр, ҡайһы бер психик тайпылыштар менән яфаланыусыларҙа был күренеш йышыраҡ осрай. Көнө буйы түгел, айҙар, йылдар буйынса бер үк көйҙө башында "өйрәлтәп" йөрөүселәр ҙә була икән. Шуға ла бындай саҡта табиптарға мөрәжәғәт итергә кәрәк, ти белгестәр.

■ Магазин кәштәләрендә нимә генә юҡ хәҙер. Һыйыр һөтө урынына һоло, соя, миндаль һөтө ҡулланыусылар күбәйҙе. Туҡланыу буйынса белгес, профессор Йен Гивенс билдәләүенсә, бигерәк тә үҫмер ҡыҙҙар ошондай һөткә өҫтөнлөк бирә. Бөгөнгө көндә үҫемлек һөтө етештереү - миллиондар килтерә торған бизнес ул. Әммә уларҙың составындағы аҡһым күләме тәбиғи һөткә етмәй. Етмәһә, ит тә ашамайһығыҙ икән, организмға аҡһым, бынан тыш тимер, кальций, йод кеүек башҡа мөһим микроэлементтар етешмәй башлаясаҡ. Модаға әүерелгән сәләмәт туҡланыу һөҙөмтәһендә, һуңғы 2 тиҫтә йыл эсендә йәш ҡатындарҙың һаулығы ныҡ ҡаҡшауы күҙәтелә. Уларҙың һаны Британияла, мәҫәлән, 30 процент тирәһе.

■ Исемдәргә хәтерегеҙ юҡмы? Ғалимдар был йәһәттән ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәргән. Төньяҡ-Көнбайыш университеты (АҠШ) белгестәре 18 йәштән 31 йәшкә тиклемге 24 кеше ярҙамында тәжрибә үткәреп ҡараған. Уларға йөҙҙәрҙе күрһәткәндәр һәм уларҙың исемдәрен әйткәндәр. Фон итеп махсус көй ҙә алынған. Аҙаҡтан улар йөҙөнә ҡарап, кешенең исемен әйтергә тейеш булған. Тексган һуң, барлыҡ ҡатнашыусылар ҙа йоҡларға ятҡан, ә ғалимдар электроэнцефалограф ярҙамында уларҙың баш мейеһендәге әүҙемлек кимәлен өйрәнгән. Ҡатнашыусылар ныҡ итеп йоҡоға талғас, башта һынауҙарҙа яңғыраған көйҙө ҡуйып, иҫтә ҡалдырырға тейешле исемдәрҙе ҡабатлап сыҡҡандар. Йоҡонан уянғас, тест тағы ҡабатланған. Кем ҡаты итеп йоҡлаған, уларҙың хәтере мәғлүмәтте яҡшыраҡ үҙләштергән. Шул үк ваҡытта, уянып, тынысһыҙ йоҡлаусыларҙа был ысул һөҙөмтә бирмәгән. Ғалимдар билдәләүенсә, насар йоҡлаусыларҙың иң тәүҙә хәтере насарая, был тикшеренеүҙәр ҙә шуны күрһәтә.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

ИСХАҠ ҒҮМӘРОВТЫ...

Гитлер ояһын туҙҙырған тип беләбеҙ

Данлы Совет Армияһының Германия фашистарын тар-мар итеүенә лә етмеш һигеҙ йыл булып китте. Илен һаҡлаусы меңәрләгән яҡташыбыҙҙың күрһәткән батырлығын бер ҡасан да оноторлоҡ түгел. Ватаныбыҙҙы азат итеүселәр араһында минең ауылдаштарым да күп кенә. Баймаҡ районы Мәмбәт ауылында тыуып үҫкән Бөйөк Ватан һуғышы яугиры гвардия полковнигы Ғүмәров Исхаҡ Иҙрис улы тураһында ишетмәгән кеше лә аҙҙыр. 1945 йылдың майында ул командалыҡ иткән 1050-се уҡсылар полкы "Гитлерҙың өйөн" баҫып алыуы хаҡында мин бала саҡтан уҡ хәбәрҙәр инем. Ана шул мөһим ваҡиғаның ҡап уртыһында булған был башҡорт полководецының ҡаһарманлыҡтары хаҡында мәғлүмәттәр матбуғат сараларында - район һәм өлкә гәзит-журналдарында әленән-әле сыҡҡылап тора (бер нисә йыл элек Баймаҡ районы гәзитендә Азамат Мөхәмәтшиндың эстәлекле бер мәҡәләһен дә уҡығайным).

Баштан уҡ шуны айырып әйтеп ҡуйыр инем: мәҡәләмде "Гитлерҙең ояһын туҙҙырған башҡорт егете" тип атауым күсмә түгел, ә туптура мәғәнәһендә! Тыуған яҡты өйрәнеүсе Рима Буранбаеваның Оборона Министрлығы Үҙәк архивынан тапҡан материалдарын һәм башҡа авторҙарҙың яҙған мәғлүмәттәрен интернет селтәренән уҡып, ошо ҡаһарман олатайыбыҙҙың тормошо, көрәше хаҡында тағы әллә күпме нәмә белдем. Ғүмәров Исхаҡ 1912 йылда Иҙрис һәм Хәмиҙә ғаиләһендә донъяға килә. Атаһы Иҙрис шахтер булып эшләй. Эштә шахта емерелеп, ул шунда һәләк була. Бала сағы граждандар һуғышы, егерменсе йылдар башындағы илдәге аслыҡ йылдарына тура килә. Йәшләй атаһыҙ ҡалған, аслыҡтан бер нисә туғанын да юғалтҡан Исхаҡ ауыр эшкә күнегә бара. Ун өс йәшендә шул уҡ шахта эшенә керешкән малай башта забойщик ярҙамсыһы, унан геологоразведка коллекторы, Баймаҡ баҡыр иретеү заводының техник сәркәтибе булып эшләй. Ун алты йәшендә комсомол ағзаһы була. 1933 йылда Ҡыҙыл армияға хеҙмәткә алына. Шул уҡ йылда Ҡаҙан ҡалаһындағы Берләштерелгән башҡорт-татар хәрби мәктәбенә уҡырға инә. Ул ваҡыттарҙа унда яҡташтарыбыҙ - Таһир Кусимов, Миңлегәле Шәйморатов кеүек буласаҡ ил батырҙары ла уҡыған була. Училищены тамамлағас, Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итә, Халхин-Голда япон самурайҙарына ҡаршы көрәшә. 1939 йылда Мәскәү ҡалаһындағы М.В.Фрунзе исемендәге хәрби Академияға уҡырға инә. 1941 йыл, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас та, август айында академияны ашығыс тамамлағандан һуң, егерме туғыҙ йәшлек Исхаҡты 540-сы уҡсылар полкының штаб начальнигы итеп тәғәйенләйҙәр. Брянск фронтында һуғышҡа инә. Баштараҡ емерә баҫып килгән фашист армадаһын илебеҙ баш ҡалаһы янында туҡтатҡас, 1941 йыл аҙағында үҙенең полкы менән Мәскәүҙе обороналауҙа ҡатнаша.

1942 йылда инде майор званиеһында булған Исхаҡ Ғүмәровтың полкын Сталинградҡа күсерәләр. Мамай ҡурғаны тирәһендә һуғышҡан билдәле генерал Александр Родимцевтың дивизияһы составында был ҡала өсөн дә полк аяуһыҙ көрәшә. Шул бәрелештә ауыр яраланып, контузия алған Ғүмәров Исхаҡ госпиталгә эләгә. Дауаланып сыҡҡандан һуң, 120-се гвардия полкының командиры итеп тәғәйенләнә һәм Сталинградты фашистарҙан тулыһынса азат итеүҙә ҡатнаша. 1943 йылдың майында, 31 йәшендә генә подполковник дәрәжәһенә еткән һәләтле командирҙы Көньяҡ-Көнбайыш фронтына ебәрәләр. Украинаның Харьков һәм башҡа бик күп ҡалаларын азат иткәндә лә полк һәр саҡ алғы һыҙыҡта була.

Советтар Союзы ерен немецтарҙан таҙартып бөтөү менән, әлбиттә, һуғыш тамамланмай. Бөтә Европаны фашизмдан азат итеү бурысы алда тороуын һәр һуғышсы яҡшы аңлай. Үҙ өңөнә сигенгән һайын, көндән-көн ныҡыраҡ ҡаршылыҡтар күрһәтеп, йыртҡыслана барған немец частарын бер-бер артлы тар-мар итә-итә полк Польша еренә сыға. Варшава һәм тағы әллә күпме ҡалаларҙы азат иткәндән һуң, Ғүмәров полкы Нетце йылғаһын аша сығып, ҡулайлы позицияға нығынып ала, һәм ошо мөһим ваҡиға генерал Иван Рослыйҙың 9-сы уҡсылар корпусына артабан Берлинға ҡарай юл асылыуға булышлыҡ итә. Шул уңышы өсөн полк II дәрәжә Суворов ордены менән бүләкләнә.

1945 йылдың 22 апрелендә Ғүмәров полкы Шпрее йылғаһын кисеп сыҡҡас, Командарм генерал Берзарин инде 1050-се һанлы уҡсылар полкы менән етәкселек иткән башҡорт егетенең хеҙмәтен юғары баһалай, уға "благодарность" иғлан итә. Данлыҡлы Берлин операцияһы башлана. Фашистарҙың ғәйәт көслө итеп нығытылған оборона ҡорамалары аша сығып, һәр бер урам, йорт өсөн көрәшеп, полк көндән-көн фашистарҙың өңөнә - Рейхстагка яҡынлаша бара. 26-сы апрель Ғүмәров полкы "Борке" тип исемләнгән СС штабын тар-мар итеп, фашист байрағын ҡулға төшөрә, ә 29-сы апрель көнө гестапо кварталын штурмлай. Артабан Герингтың авиация штабы урынлашҡан кварталға сыға һәм иртәгәһенә был министрлыҡ штабы ла яулап алына. Полктың ҡыйыу уландары - лейтенант Алимов һәм рядовой Иванов шул бинаның ҡыйығына ҡыҙыл флаг ҡаҙап та ҡуя.

1-се май көнө немецтар беҙҙең командованиеға парламентерҙар ебәрә. Капитуляция шарттары хаҡында дошман башлыҡтары менән артабанғы һөйләшеүҙәрҙе тоташтырыусы звено булып, тап Ғүмәровтың команда пункты тора, тип яҙа ошо хәлдәр хаҡында бәйән итеүсе Владимир Романов. 1050-се полк иң һуңғы атакаға - рейхсканцелярияны штурмларға әҙерләнә башлай. Шул мәлдәге "Красная звезда" гәзите ошолай тип яҙа: "...Берлин урамдарындағы алышта Советтар Союзындағы барлыҡ милләт вәкилдәре ҡатнаша. Генерал-майор Каспаряндың, полковник Кондратенко һәм подполковниктар Терехин, Ғүмәров, Радаевтарҙың һуғышсылары айырыуса зур батырлыҡ күрһәтә..." Ә "Советский боец" гәзите "...Ғумәровтың һуғышсылары Фосситрассе аша үтеп, империя канцелярияһына килеп етте..." тип хәбәр итә.

18 сәғәт 30 минутта Ғүмәровтың һуғышсылары һуңғы атакаға күтәрелә. Һәр бер рота һәм взвод менән йәнәшә разведка һәм СМЕРШ хеҙмәткәрҙәре лә бара. Фашист рейхының башлыҡтарын тере йә үле көйө алыу бурысы ҡуйылған был кешеләр араһында Стәрлебаш районынан булған разведчик - капитан Ғәйнуллин Насырйән дә була (һуғыштан һуң Өфө ҡалаһында Финанс министрлығында эшләй).

Танктар һәм башҡа орудиелар канцелярияның баҡсаһына үтеп инә алмағанлыҡтан, фашист ҡалдыҡтары менән башлыса уҡсылар полкы алыша. Иҫерек эсесовцылар контратакаға ташланғас, ҡул һуғышы башлана. Ҡоторонған СС һалдаттарын юҡ итеп, полк һуғышсылары Рейхсканцелярия диуарҙарына килеп терәлә, уның стеналарын емереп, ғәйәт зур бинаның эсенә лә инә башлайҙар. Ут сәсеп торған "дот"тың пулеметын шартлатып, полктың иң алда барған взводы (командиры - лейтенант Песков) ер аҫтында урынлашҡан Гитлерҙың бункерына бәреп инә. Фашист ояһын пыран-заран килтереп, 2-се май, сәғәт иртәнге 4-тә подполковник Ғүмәров Исхаҡ телефондан Гитлерҙың Рейхсканцелярияһы алыныуы хаҡында юғары командованиеға доклад яһай. Геббельстың мәйете табылыуы, ә Гитлерҙыҡы әлегә табылмауы хаҡында ла әйтә. Ошонда уҡ "Адольф Гитлер" исемен йөрөткән дивизияның штандарты (байрағы) ҡулға төшә (Еңеү парадында ҡатнашыусылар уны Ленин мавзолейы алдына иң тәүҙә ташлайҙар). Берлин операцияһы өсөн 1050-се полк Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә һәм ул "Бранденбургский полк" тип атала башлай.

Рейхсканцелярияның ҡыйығында бөркөт һынлы зур фашист гербы торған була (күп кенә документаль фильмдарҙа ла күрһәтәләр). Уның бәреп төшөрөлөүе хаҡында шул ваҡыттағы "Правда" гәзите: "...Подполковник Гумеров приказал сбросить фашистский герб со здания рейхсканцелярии..." - тип яҙа.

3-сө май, таңға ҡарай полк ҡарамағына Хәрби совет ағзалары менән Берлин ҡалаһының коменданты итеп тәғәйенләнгән командарм Берзарин, тағы бер нисә сәғәттән Советтар Союзы маршалы Жуков та килә. Ул башта баҡсаны байҡап, унан Гитлерҙың бункерын ҡарап сыға. Ғүмәровты һәм уның һуғышсыларын еңеү менән ҡотлай...

Ҡуркыу белмәҫ был офицерҙың тура һүҙле, һәр төрлө авторитеттарға ярамһаҡланып бармаусанлығы һымаҡ яҡшы сифаттары хаҡында Рима Буранбаева матур итеп яҙған. Һуғыш башында уҡ инде хәрби тәжрибәле булған был командирҙың һәр саҡ төптән уйлап эш итеүе тыныс холҡо, ауыр минуттарҙа юғалып ҡалмаусанлығы, ҡул аҫтындағы һалдаттарын ҡурсалап, уларҙы урынһыҙ "утҡа тығырға тырышмауы" хаҡындағы мәғлүмәттәр ҙә ҡыҙыҡ. Халҡыбыҙҙа йөрөгән "Тура әйткән - туғанына ярамаған" тигән әйтем һәр ерҙә лә урынлылыр. Ғүмәровтың ошо яғы ҡайһы бер иң юғары наградаларҙың уны "ситләтеп үтеүенә" лә сәбәпсе булғандыр, тигән фекерҙе ҡуя автор. Үҙенең автобиографияһында Исхаҡ Ғүмәров 1952 йылда ошолай тип яҙа: "... Берлин операцияһында ҡатнашҡаным өсөн 301-се дивизия һәм 9-сы уҡсылар полкы корпусының командирҙары мине Ленин орденына тәҡдим иткәйне... Унан бер аҙ алдараҡ, генерал-полковник Берзарин миңә полковник званиеһы бирергә представление яҙыуы хаҡында иғлан итте..." Һуғыш тамамланғас та, Исхаҡҡа уның Советтар Союзы Геройы исеменә тәҡдим ителеүе тураһында шул уҡ Берзарин һөйөнсөләй. Әммә бер нисә көндә, генерал аварияға осрап һәләк була һәм әлеге мөһим документтар ҙа юғала... Ә Ленин орденына ул бөтәһе өс тапҡыр тәғәйенләнгән була. Был хаҡтағы күп кенә документтар Үҙәк архивта наҡланып ҡалыуына ҡарамаҫтан, ниндәйҙер сәбәп менән наградалар лайыҡлы хужаһына барып етмәй. Етмешенсе йылдар инде отставкала булған был ҡаһарман үҙенең ҡағыҙҙарын юллап ҡарай, әммә ыңғай һөҙөмтә булмай. Уның ике "Ҡыҙыл йондоҙ", "Ҡыҙыл байраҡ", ике "Ватан Һуғышы" ордены, Сталинград, Мәскәүҙе обороналаған, Варшава ҡалаларын азат иткән, Берлинды алған өсөн, хатта Польша хөкүмәте бүләкләгән "Крест храбрых" тип аталған һәм башҡа миҙалдары ла бихисап. Әммә алдараҡ әйтелгән юғары наградалары ла теүәл булһа икән дә... Миңлеғәле Шаймуратовҡа Рәсәй Геройы исемен биргән һымаҡ, бәлки, был батырыбыҙ өсөн дә ғәҙеллекте аяҡҡа баҫтырырҙар тигән өмөт тә юҡ түгел...

Исхаҡ Ғүмәров Берлин һәм Баймаҡ ҡалаларының Почетлы гражданы, 1993 йылда һикһән икенсе йәшендә вафат була. Өфөлә ерләнгән. Баймаҡтың бер урамы, шулай уҡ, тыуған ауылыбыҙ Мәмбәт башланғыс мәктәбе лә уның исемен йөрөтә. Уның хаҡында "Башҡортостан" энциклопедияһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт бар.

Һүҙ аҙағында. Мәмбәт тигәндән, мин ул олатайҙы үҙ күҙҙәрем менән күргәнем дә булды. Бишенсе синыфта уҡығанымда, (әсәйем яғынан туғанлығы ла булған Исхаҡ олатай) тыуған яҡҡа ҡунаҡҡа ҡайтҡайны. Түштәре орден-миҙалдар менән тулы, "алтын ялатылған" погонлы хәрби кейеменә ҡарап, күҙҙәрем ҡыҙғаны иҫемдә. Әсәйем уға "Исхаҡ ағай", ә атайым "ҡайнаға" тип өндәшә ине. Ауыл клубында яугир менән осрашыу ойоштороҙолар. Клубта йыйылған халыҡҡа Берлин операцияһы хаҡында һөйләгәне, айырыуса, Геббельс һәм уның ҡатыны мәйеттәренең һарғайып бөткән фотоһүрәттәрен беҙгә күрһәткәне ныҡ хәтеремдә ҡалған. "...Гитлерҙың үҙе табылманы" - тине ул... Өлкән ағайым Ғайсаның һәм минең дә хәрби һөнәрҙе һайлауыбыҙҙың сәбәпсеһе ошо олатай булғандыр тип уйлайым.

Ҡәҙерле милләттәштәремә илебеҙгә именлек һорап, фашизмдың ҡабаттан бер ҡасан да баш күтәрмәүен насип итеүен үтенеп, Аллаһ Тәғәләгә һәр саҡ доға ҡылып торайыҡ һәм батырҙарыбыҙҙы онотмайыҡ, тимәксе инем.

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,
отставкалағы подполковник.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

СӨЙӘЛ ҮЛӘНЕНЕҢ ФАЙҘАҺЫ

Сөйәл үләне (чистотел) - күп йыллыҡ ағыулы үҫемлек. Май-август айҙарында һары сәскә ата, июль-октябрҙә орлоғо өлгөрә. Сөйәл үләне күләгәле урындарҙа, йылға, һаҙлыҡ ситтәрендә, дымлы турпаҡлы һәм һирәк ағаслы урмандарҙа, баҡсаларҙа, ҡойма буйҙарында үҫә.

Электән уны тире ауырыуҙарына дарыу итеп ҡулланғандар. Был үлән ағыулы, шуның өсөн ҡулланғанда сама белеү мөһим. Исеменән үк күренеүенсә (чистотел), ағыулы үлән булһа ла, самаһын белеп ҡулланһаң, эсәк, ҡан тамырҙарын таҙартып, эстә үҫкән "сөйәлдәрҙе" лә бөтөрә. Киста, полип, хатта яман шеш ауырыуҙарын да еңә ул. Был үләндән йыл һайын ике төрлө төнәтмә әҙерләргә була.

Сөйәл үләненән квас: 3 литр эремсек һыуына (сыворотка) бер ус йәш үләнде (кипкәне булһа 1 стакан) марляға урап төшөрөбеҙ, 1 стакан шәкәр һалып, йылы урынға ултыртабыҙ. Әгәр эремсек һыуы ҡайнатылған булһа, һөт әсетеүсе бактериялар үрсеһен өсөн 1 ҡалаҡ ҡаймаҡ болғайбыҙ,. Шишмә һыуын ҡулланырға ла була, уға ла бер ҡалаҡ ҡаймаҡ һалабыҙ. Ике аҙнанан хуш еҫле емеш еҫтәре генә сығып торған эсемлек әҙер була. Ағыуы ла ҡалмай, әсе тәме лә юҡҡа сыға. Тәүҙә көнөнә 3 тапҡыр берәр ҡалаҡлап ашарҙан ярты сәғәт алда эсәбеҙ, яйлап яртышар стаканға еткерәбеҙ. Кәмегән һайын үләнен алмаштырмай ғына һыу йә эремсек һыуы өҫтәп тороп, ике ай буйы эсергә була. Ошо эсемлекте эсеп, оҙаҡ йылдар ыҙалатҡан аллергиянан ҡотолоусылар бар. Был шифалы эсемлек ашҡаҙан, эсәк, нервы, тире, баш ауырыуҙары, гипертония, сей шештән ҡотолорға ярҙам итә, иммунитетты нығыта, организмды шлактарҙан, тоҙҙарҙан таҙарта.

Икенсе ысул: сөйәл үләнен ит турағыстан үткәреп, ике ҡат марля аша һутын һығабыҙ ҙа таҙа банкаға һалып, һыуытҡыста һаҡлайбыҙ. Күптәр ошо һутты спиртҡа ҡушып һаҡлай, мин ҡушмайым, яҙға тиклем һәйбәт һаҡлана. Ҡыш ангина, грипп ваҡытында йылымыс 0,3 стакан һыуға ярты балғалаҡ һалып, тамаҡты, танауҙы сайҡатабыҙ, был инде гайморитты бөтөрә.

Тағы бер рецепт: Көнөнә ике тапҡыр ярты стакан һыуға 5 тамсы сөйәл үләне һутын һалып эсәбеҙ, көн һайын берәр тамсыға арттыра барабыҙ, 40 тамсыға еткәс, кире кәметә башлайбыҙ. Бер курсты эсеп бөткәс, 40 көн ял итәбеҙ. Билдәле үләндәр менән дауалаусы Рим Әхмәдов сөйәл үләнен сәскә ата башлаған сағында, асыҡ урындарҙан түгел, ә күләгәлерәк урындарҙан, тулған айҙан һуң бер аҙ ваҡыт үткәс, кискеһен йә болотло көндә йыйырға кәңәш итә. Үләнде күп итеп йыйыу ҙа кәрәкмәй, 0,5 банка һут беҙҙең 6 кешелек ғаиләгә яҙға сыҡҡансы артығы менән етә. Уны бит стаканлап эсмәйбеҙ, тамсылап ҡына ҡулланабыҙ. Ә файҙаһы һөйләп-яҙып бөткөһөҙ ныҡ ҙур.

ШӘҮРӘ.
Көйөргәҙе районы.

УҢЫШ ҠАҘАН

ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Изгелек һәм яуызлыҡ

Парлы ҡарма-ҡаршылыҡтар менән тәжрибә үткәрергә лә тәҡдим итәм. Ерҙәге яуызлыҡ күләме тураһында уйланыуҙарығыҙ көнөнә күпме энергияғыҙҙы ала. Ни өсөн иңегеҙгә шундай ауыр йөктө йөкмәп йөрөйһөгөҙ? Телевизорҙан, радионан, баҫма матбуғат биттәренән ағылған насар, кире хәбәрҙәр һеҙҙе бәхетле итәме лә хеҙмәтегеҙҙең һөҙөмтәлелеген арттырамы?

Беҙҙең шартлы Йыһанда абсолют хәҡиҡәт миҫалын да табырға була. Мәҫәлән, Йыһандағы яҡтылыҡ тиҙлеге, уға ҡайһы яҡтан ғына ҡараһаң да бер ваҡытта ла үҙгәрмәй. Ә бәхет? Ул - абсолют. Уның башы ла, аҙағы ла юҡ. Ул даими, бер төрлө һәм камил. Бәхеттең ҡапма-ҡаршыһы булыуы мөмкинме? Әгәр булһа, бәхет бөтөнләй булмаҫ ине. Был осраҡта беҙ бәхет түгел, ә ҡәнәғәтлек тураһында һүҙ алып барасаҡбыҙ.

Беҙ һүҙ алып барасаҡ ҡапма-ҡаршылыҡтар бары тик ҡәнәғәтлек һәм һыҙланыу, ҡәнәғәтлек һәм уңышһыҙлыҡ буласаҡ. Бәхет, ысын бәхет уларҙан күпкә бейегерәк урынлашҡан. Шуға күрә, уңышҡа илтәсәк юлда хәрәкәт иткәндә, "тормоштан ҡәнәғәтлек алыу" тойғоһон мөмкин тиклем көсәйтеп, уңышһыҙлыҡты һәм һыҙланыуҙарҙы мөмкин тиклем кәметергә тырышырбыҙ. Был Ерҙә беҙҙең борсолоу һәм һыҙланыуҙан азат була алмауыбыҙ бәхәсһеҙ булып ҡала. Әгәр йорт һатып алырға теләһәгеҙ, уның тураһында хәстәрлек күрергә, үләндәрен сабып, сүпсарҙан таҙартып, сәскәләр ултыртып һәм уларға һыу һибеп торорға тура киләсәк. Бала табыуҙы планлаштырҙығыҙмы? Был осраҡта, төпкө аңығыҙҙа уның ҡасан да булһа вафат буласағын аңлау ҡорто кимереп торасаҡ. Ерҙәге ожмах шарттарында ҡәнәғәтлек менән һыҙланыу һәр саҡ йәнәш йөрөй.

Икенсе яҡтан, беҙҙең ҡәнәғәтлек сикһеҙ. Һеҙ уны гонаһ тип уйлауығыҙ ҙа мөмкин, сөнки ныҡ байрам иткәндән һуң һәр саҡ ғәйеп тойғоһо тыуа. Ә башҡаларҙан күберәк эшләп, уларҙан кәмерәк эш хаҡы алғанда, ғәҙелһеҙлек тоймайһығыҙмы? Һеҙҙе ҡайтанан программаларға кәрәк. Тормоштан ҡәнәғәтлек алыу - Ергә ебәрелеүегеҙҙең берҙән-бер маҡсаты. Бынан тыш, ул абсолют бәхеткә сәйәхәт башлауҙың һоҡланғыс ысулы. Әммә был икенсе тарих, ә әлегә беҙҙе сираттағы тәжрибә көтә: тормош тәмен татып ҡарау мәле етте.

Аңдың икенсе торошо: үҫешкән интуиция

Һеҙҙеңсә, иң уңышлы кешеләр менән нимә етәкселек итә: аҡылмы әллә интуициямы? Икенсе төрлө әйткәндә, улар ҡабул иткән ҡарарҙар нигеҙендә нимә ята: анализмы әллә инстинктмы?

Әлбиттә, айыҡ аҡыл менән эш итһәгеҙ, уңышлы кешеләр тәү сиратта үҙҙәренең инстинктына ышана, тип яуапларһығыҙ. Шәп! Улайһа, үҙегеҙҙең инстинкттарығыҙҙы күнектереү, көсәйтеү, үҫтереү өсөн аҙнаһына нисә сәғәт сарыф итәһегеҙ? Яуап бирәм: бер минут та. Шул уҡ ваҡытта рациональ фекерләүегеҙҙе үҫтереүгә тиҫтәләрсә сәғәт сарыф итәһегеҙ: төрлө программаларҙы яҡшыраҡ белеү өсөн компьютер курстарына йөрөйһөгөҙ, сит телдәрҙе өйрәнәһегеҙ, ваҡытты рациональ файҙаланыу буйынса семинарҙарға яҙылаһығыҙ, маркетинг революционерҙарының лекцияларын тыңлайһығыҙ һ.б. ошоға оҡшаш ғәмәлдәр башҡараһығыҙ. Әммә бының бер мәғәнәһе лә юҡ бит!

Пьер МОРАСИ.

7 АВГУСТА
ПОНЕДЕЛЬНИК
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Годунов". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.15 Т/с "Ловец снов". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00, 4.00 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]
4.47 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.
14.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]
14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
16.00 Атлас Баженова. [12+]
16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
16.45 Специальный репортаж. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Т/с "Сводные судьбы". [12+]
18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 "Бай". [12+]
21.00 Пофутболим? [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Д/ф "Донбасс. Серая зона". [16+]
0.00 Х/ф "Десять негритят". [12+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 Спектакль "Неотосланные письма". [12+]
3.00 Бәхетнамә. [12+]
4.15 Счастливый час. [12+]
5.00 История одного села. [12+]
5.15 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

8 АВГУСТА
ВТОРНИК
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Годунов". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.15 Т/с "Ловец снов". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.50 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 "Ете егет". [12+]
10.45, 23.45 "Курай даны". [12+]
11.00, 17.00 Автограф. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 22.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
16.45 Криминальный спектр. [16+]
17.30 Т/с "Сводные судьбы". [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Елкән. [6+]
21.00 Специальный репортаж. [16+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Башкирские каникулы. [12+]
0.00 Х/ф "Скандальное происшествие в Брикмилле". [12+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 Спектакль "Заблудшая". [12+]
3.00 Бәхетнамә. [12+]
4.45 "Автограф". [12+]
5.15 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

9 АВГУСТА
СРЕДА
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Годунов". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.15 Т/с "Ловец снов". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.50 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Әлләсе... [6+]
10.45, 23.45 "Курай даны". [12+]
11.00 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [12+]
12.15 Пофутболим? [12+]
12.30 Новости спорта (на рус. яз).
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
16.00 Тайм-аут. [12+]
16.45 История одного села. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Т/с "Сводные судьбы". [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Тормош. [12+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Автограф. [12+]
0.00 Х/ф "На берегу большой реки". [12+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 Спектакль "Незваный гость". [12+]
3.30 Бәхетнамә. [12+]
4.15 Счастливый час. [12+]
5.00 Пофутболим. [12+]
5.15 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

10 АВГУСТА
ЧЕТВЕРГ
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Годунов". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.15 Т/с "Ловец снов". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.50 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Башкирские каникулы. [12+]
10.45 История одного села. [12+]
11.00 "Атайсал. Знай наших!" [6+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Специальный репортаж. [16+]
16.45 Криминальный спектр. [16+]
17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
17.30 Т/с "Сводные судьбы". [12+]
19.00 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Москва). Кубок РБ.
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "На исходе лета". [12+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 "Земляки". [12+]
4.30 "Курай даны". [12+]
4.45 Вечерний телецентр. [12+]
5.45 "Это моя профессия". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

11 АВГУСТА
ПЯТНИЦА
РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.40, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
15.05 Д/ф "Вторая мировая война. Битва за Днепр". [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Удивительные люди. Лучшее". [12+]
23.55 Х/ф "Соседка". [12+]
2.00, 3.00, 4.00 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]
4.59 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00, 18.00 "Йома". [6+]
10.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж. [16+]
12.15, 16.45 История одного села. [12+]
12.45 Пофутболим? [12+]
13.00, 4.45 Автограф. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Үткән гүмер. [12+]
14.15 "Курай даны". [12+]
15.00 Патриот РФ. [12+]
15.15 Т/с "Бирешмә". [12+]
16.00 "Аль-Фатиха". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Дикая ягода. [12+]
19.00 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). Кубок РБ.
22.00, 5.45 Спортивная история. [12+]
23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Х/ф "Жена Сталина". [16+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 Спектакль "Кадриль". [12+]
4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.15 Тормош. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

12 АВГУСТА
СУББОТА
РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Миленький ты мой". [12+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Некрасивая". [12+]
0.40 Х/ф "Лабиринты судьбы". [12+]
4.10 Х/ф "Люблю, потому что люблю". [12+]
5.50 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ете егет". [12+]
8.30 Башкирские каникулы. [12+]
9.15 М/ф "Мультфильмы". [6+]
9.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
10.00 Елкән. [6+]
10.30 Байтус. [6+]
10.45 Семәр. [6+]
11.00 Лит-ра. [6+]
11.30 МузКәрәҙ. [0+]
12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
12.30 Новости (на баш. яз). [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 "Узоры моей души". [12+]
19.00 Вопрос+Ответ= Портрет. [6+]
19.45 Сәңгелдәк. [0+]
20.00 День строителя. [12+]
20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.00 Х/ф "Пираты Эгейского моря". [12+]
2.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
3.15 Спектакль "Любовница. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Мистический Башкортостан. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

13 АВГУСТА
ВОСКРЕСЕНЬЕ
РОССИЯ 1

6.10, 1.55 Х/ф "Васильки для Василисы". [0+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Миленький ты мой".[12+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
22.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Д/ф "Адмирал Колчак. Жизнь и смерть за Россию". [12+]
3.36 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [6+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Курай даны". [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Книга сказок". [6+]
10.30 М/с "Нурбостан". [6+]
10.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.00, 19.30 "Атайсал. Знай наших!" [6+]
11.30 Сулпылар. [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [6+]
14.00 Автограф. [12+]
14.30 День строителя. [12+]
15.00 "Дорога к храму". [6+]
15.30, 4.15 Историческая среда. [12+]
16.00 "Честно говоря". [12+]
17.00 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Автомобилист" (Екатеринбург). Кубок РБ.
20.30 Полезные новости. [12+]
20.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
21.15 Дознание. [16+]
21.30 Новости недели (на рус.яз.).
22.15, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Х/ф "Сын полка". [12+]
1.00 "Мона". [12+]
3.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
3.30 Әлләсе... [6+]
4.45 "Млечный путь". [12+]
6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]

ҺАЙЛАУҘАР

График предоставления бесплатной печатной площади для публикации агитационных материалов зарегистрированных избирательных объединений и кандидатов на выборах в Государственное Собрание-Курултай Республики Башкортостан седьмого созыва в газете "Киске Өфө"

Башкортостанское региональное отделение Всероссийской политической партии "ЕДИНАЯ РОССИЯ"		26 августа 2023 г.
БАШКОРТОСТАНСКОЕ РЕГИОНАЛЬНОЕ ОТДЕЛЕНИЕ ПОЛИТИЧЕСКОЙ ПАРТИИ ЛДПР - ЛИБЕРАЛЬНО-ДЕМОКРАТИЧЕСКОЙ ПАРТИИ РОССИИ		19 августа 2023 г.
Региональное отделение в Республике Башкортостан Политической партии "НОВЫЕ ЛЮДИ"		12 августа 2023 г.
Региональное отделение Социалистической политической партии "СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ - ПАТРИОТЫ - ЗА ПРАВДУ" в Республике Башкортостан		19 августа 2023 г.
БАШКИРСКОЕ РЕСПУБЛИКАНСКОЕ ОТДЕЛЕНИЕ политической партии "КОММУНИСТИЧЕСКАЯ ПАРТИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ"		2 сентября 2023 г.
Шаймуратовский избирательный округ № 1	Гилимьянов Дмитрий Маратович Шабуневич Андрей Владимирович Астахов Антон Олегович	19 августа 2023 г. 26 августа 2023 г. 26 августа 2023 г.
Инорсовский избирательный округ № 2	Горбунов Василий Васильевич Куликов Константин Викторович Дильмухаметов Динар Ильшатович Файрузов Вадим Владиславович Нурлыгаянов Флюр Фаткулгаянович	19 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г. 19 августа 2023 г. 19 августа 2023 г. 12 августа 2023 г.
Первомайский избирательный округ № 3	Куприянова Наталья Ивановна Егошин Вадим Игоревич Ананьева Вероника Валерьевна Кидрасов Юлай Фаукатович Саитгареев Рустам Раисович	2 сентября 2023 г. 2 сентября 2023 г. 19 августа 2023 г. 12 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г.
Черниковский избирательный округ № 4	Ахметшин Рустэм Закиевич Кондратьев Денис Сергеевич Зайнетдин Ильдар Уралович	26 августа 2023 г. 19 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г.
Белореченский избирательный округ № 5	Локотченко Алексей Юрьевич Сардаров Эдуард Шаликоевич Байрамгулов Радмир Рафисович Шафиков Ильдар Тагдилович	12 августа 2023 г. 19 августа 2023 г. 2 сентябрь 2023 г. 19 августа 2023 г.
Пушкинский избирательный округ № 6	Аллабирдин Евгений Эдуардович Захаров Вадим Петрович Басыров Айдар Ришатович Файзуллина Елена Юрьевна Захарова Айгуль Габдулловна	19 августа 2023 г. 19 августа 2023 г. 19 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г. 26 августа 2023 г.
Ленинский избирательный округ № 7	Дмитриева Кристина Владимировна Сабитов Ришат Хажгалиевич Филиппов Олег Игоревич	12 августа 2023 г. 12 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г.
Сипайловский избирательный округ № 8	Родина Елена Александровна Иванова Олеся Александровна Золотарева Анна Фанилевна Рамазанов Ильдар Маратович Адиятуллин Ильшат Ганиятуллович	12 августа 2023 г. 12 августа 2023 г. 12 августа 2023 г. 26 августа 2023 г. 19 августа 2023 г.
Солнечный избирательный округ № 9	Гиндуллин Фарит Хурматуллович Салихов Валерий Мухаматнурович Давлетшин Руслан Рамзитович Бирюков Леонид Олегович Хуснутдинов Ильдар Фанильевич	26 августа 2023 г. 26 августа 2023 г. 26 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г. 12 августа 2023 г.
Центральный избирательный округ № 10	Зайцев Александр Валерьевич Хусаинов Салават Сахиевич Шоров Рустам Асламбекович Мартов Игорь Олегович	26 августа 2023 г. 26 августа 2023 г. 12 августа 2023 г. 26 августа 2023 г.
Вазовский избирательный округ № 11	Шагапова Руфина Аликовна Искандаров Азат Ганиевич Рябов Алексей Игоревич Шаяхметова Елизавета Владимировна Сайфуллин Вадим Рашитович	26 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г. 19 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г. 2 сентября 2023 г.
Студенческий избирательный округ № 12	Харрасов Салават Фаттахович Битейко Илья Александрович Зарипов Шамиль Ришатович Гайнуллина Махмуза Калимовна	12 августа 2023 г. 19 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г. 12 августа 2023 г.
Вокзальный избирательный округ № 13	Гайнетдинова Фания Фаргатовна Аллагузин Ришат Хайретдинович Хакимов Тимур Артурович Вишняков Евгений Владимирович Скорняков Андрей Александрович	2 сентября 2023 г. 12 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г. 26 августа 2023 г. 12 августа 2023 г.
Новиковский избирательный округ № 14	Мочалкин Павел Александрович Голубь Иван Олегович Габдрашитов Радмир Илгизович Бузыкаев Камиль Радикович Самсонова Екатерина Викторовна	19 августа 2023 г. 26 августа 2023 г. 2 сентября 2023 г. 26 августа 2023 г. 12 августа 2023 г.

✓ Ысын дуҫ һәр нәмәлә беҙгә оҡшарға тырышмаясаҡ, һәр ҡылығыбыҙ өсөн маҡтарға ла атлығып тормаясаҡ, ул беҙҙәге иң яҡшыны ғына ҡабул итәсәк. (Плутарх).

БАШ ЭШЛӘТМӘК

6 АВГУСТ - ЯДРО ҠОРАЛЫН ТЫЙЫУ ӨСӨН БӨТӘ ДОНЪЯ КӨРӘШ КӨНӨ



Тортилланың хазинаһы
"Майһыҙ (...) ҡупмай"
Йүкә аяҡ кейеме
Үрелгән көртә
Хиросимаға бомба ташлаған пилот
Ҙур күләмле әҫәр
Нагасакиға бомба ташлаған пилот
4 йыллыҡ юғары белемле
Ул осорҙа Япония императоры
Сыбар буҙ төҫтәге эре турғай
Яҙғы сәскә
Мең ҡағыҙ торна яһаусы ҡыҙ
"(...) емеше менән, кеше эше менән"
Ирҙәр хушбуйы
Әлифба бирмәге
Сәйәси ойошма
Цитрус
Йәрәхәт
Яңы Англия кешеһе
Туҡыма
Яуым-төшөм
Урман батшаһы
Келәм һуҡҡыс
Ҡараптағы йылым
Буласаҡ үҙемлек
⌘
Мөхәббәт символы - ҡош
"Ауырыу (...) һеймәҫ"
Уның юлы балаға таҡыр
"Бала ташыусы" ҡош
Ҡрәҫтиән ҡулындағы ярты ай
Ул осорҙа АҠШ президенты
Дәүләт органы
Татар шағиры
"(...) йөрәк яндыра"
Өс тиҫтә
Мең бәләнән ҡоткарыр
Тәбиғи будильник
Ул иҫәп яраҡа
Украина парламенты
"Ат яҡшыһы (...)да"

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

29-сы һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Ҡорот. Аҡмулла. Алдар. Арбат. Һабаҡ. Иләү. Ра. Педиатр. Ҡырау. Мәрәкә. Талаҡ. Таҡ. Аулаҡ. Олон. Герб. Аҡһым. Агата. Окоп. Варшава. Андыҙ. Ғарипов. Аласыҡ.

Вертикаль буйынса: Партизан. Абдуллина. Аҡыҡ. Гав. Алҡа. Абаға. Тирмә. Ҡамҡа. Табыш. Африка. Дәүләтколов. Какао. Театр. Ваҡ. Һаҡ. Анапа. Ылау. Арба. Ҡыу. Ҡымыҙ.

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1445 һижри йыл.

Август (Мөхәррәм)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Ахшам намаҙы	Йәстү намаҙы
7 (20) дүшәмбе	4:07	5:37	13:30	18:20	21:04	22:34
8 (21) шишәмбе	4:09	5:39	13:30	18:19	21:02	22:32
9 (22) шаршамбы	4:11	5:41	13:30	18:17	21:00	22:30
10 (23) кесе йома	4:13	5:43	13:30	18:16	20:58	22:28
11 (24) йома	4:15	5:45	13:30	18:14	20:56	22:26
12 (25) шәмбе	4:16	5:46	13:30	18:12	20:54	22:24
13 (26) йәкшәмбе	4:18	5:48	13:30	18:10	20:51	22:21

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

КӘҘӘ ҺӨТӨН...

Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Анна Казак "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында уҙған матбуғат конференцияһында кәҙә һөтө аша талпан энцефалитын йоҡтороу ихтималлығы тураһында һөйләне.

"Әгәр кәҙәгә сирле талпан ҡаҙалһа, ул һөт менән ошо вирусты бүлеп сығара башлай. Шуға күрә пастеризацияланған продуктты ғына файҙаланырға кәрәк, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, парлы һөт файҙалы тип раҫлау - хата фекер", - тине ул.

КЕМ АЛЫҠ?

ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!

Быйылғы икенсе ярты йыллыҡҡа "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусылар араһынан "бәхетле билет" эләккәндәрҙең исемдәрен барлайбыҙ. Иң тәүҙә сәмле, ғәмле, фекерле милләттәштәр өсөн йән аҙығы, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат шатбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ икәнде белдерәйек. Һеҙ - иң аҡлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр. Шулай итеп:

● **Әбйәлил районы** Ҡужан ауылынан Ғәйфулла Хәйруллин, Аслай ауылынан Фәниә Мансурова, **Мәләүез районы** Смаҡ ауылынан Сания Смаҡова, Эткөсөк ауылынан Минзәлә Сангишева, **Баймаҡ районы** Ишмөхәмәт ауылынан Сәфәрғәле Ярмуллин, 1-се Этҡол ауылынан Булат Азаматов, Иҫке Сибай ауылынан Р.Сәлимов, Мерәҫ ауылынан Әхәт Хәсәнов, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Альберт Үзбәков, Межгорье ҡалаһынан Шәүрә Яҡупова, **Дыуан районы** Арый ауылынан Алик Муфлихунов, **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Сурин, **Ишембай районы** Байғужа ауылынан Хәсән Васильев, **Миәкә районы** Шатмантамаҡ ауылынан Хәмзә Ҡәйүмов, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Ш. Нәҙерғолова, **Балаҡатай районы** Яңыбай ауылынан Розалия Ғималова, **Учалы районы** Истамғол ауылынан А. Ғәйетколова, Бөйҙә ауылынан Зифа Әсфәндийәрова, **Ғафури районы** Ҡауарҙы ауылынан Роберт Бәширов, **Өфө ҡалаһынан** Гөлшат Миңнеғалина - **Вәлиәхмәт Бәҙретдиновтың "Башҡорт ырыуҙары";**

● **Көйөргәҙе районы** Ермолаево ауылынан Урал Ҡәйүпов, **Баймаҡ районы** Ишмырҙа ауылынан Вадик Солтанғолов, **Ишембай районы** Үрге Этҡол ауылынан С. Яҡупов - **Наил Ғәйетбайҙың "Йән";**

● **Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан Рафиға Әсмәндийәрова, Йәрмөхәмәт ауылынан Зөлфиә Мөъминова, **Ейәнсура районы** Бикбау ауылынан Ләлә Түләғәнова, **Дыуан районы** Иҫке Хәлил ауылынан Зилара Низамова, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан А. Ҡусҡарова, **Күгәрсен районы** Яҡшымбәт ауылынан А. Аллағыуатова - **Ризаитдин Фәхретдиновтың "Нәсихәттәр";**

● **Дыуан районы** Арый ауылынан Зәйнәп Вәлиева, **Баймаҡ районы** Иҫке Сибай ауылынан Миңнур Яратова, **Ишембай районы** Һайран ауылынан Риф Хәсәнов, **Күгәрсен районы** Үрге Мөрсәләй ауылынан Гүзәлиә Ҡотлогилдина, **Ауырғазы районы** Тәүәкәс ауылынан Роза Ғәббәсова - **Нуриман Мусин "Мөхәббәт сере"** китаптарына лайыҡ булды.

● **Ҡотлайбыҙ** һәм был акциябыҙ киләһе миҙгел өсөн дә үҙ көсөндә икәнен белеп ҡуйығыҙ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, тыуған көндәрегеҙ тураһында ла хәбәр итһәгеҙ, бик шат булырбыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙа адрестар тулы, аңлайышлы итеп тултырылһын ине, тигән теләк тә бар.

● **Иҫкәрмә.** Бүләкләнеүселәр китаптарҙы башлыса үҙҙәренең почтальондары аша алыр. Кемдәргә китаптар барып етмәгән, улар Өфөләге балалары, туғандары, таныштары аша **Революцион урамы, 167/1** адресы буйынса урынлашҡан редакциябыҙҙан алдыра ала.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

МӨХӘРРИРИӘТ.

✓ *Фильмдың үҙенсәлектәренең береһе - музыка ҡоралының һаҡланғанлығы технологияһын күрһәтеү. Был алымды беҙҙең көндәргә танылған ҡурайсы Ғата Сөләймәнов килтереп еткергән.*

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

ҠАТЫН-ҚЫҘ БӘХЕТЕ НИҘӘ?

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры 4 октябрҙә 104-се миҙгелен асырға йыйына. Тамашасыларға Заһиҙә Мусинаның повесы буйынса "Килен" премьераһы тәҡдим ителә.

Мелодрама жанрындағы яңы спектаклде сәхнәгә ҡуйыу буйынса режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фиргәт Ғарипов эшләй. Был инде Фиргәт Рәмил улының туған сәхнәһендәге етенсе эше. Бынан тыш, уның спектаклдәре Башҡортостандың һәм Татарстандың башҡа театрҙарында ла ҙур уңыш менән бара.

Премьера 4-5 октябргә билдәләнгән. Спектаклде әҙерләүҙә рәссам Алина Нуриманова, хореограф Сулпан Аскәрова, композитор Шәүрә Сәғитова ҡатнаша. Спектаклдә Башҡортостандың халыҡ артистары Сара Буранбаева, Эльвира Юнысова, Гүзәл Маликова, Гөлфиә Рафиҡова, Ирек Булатов, актерҙар Лилиә Ғәлина, Лилиә Сәғитова, Айым Сөләймәнова, Айһылыу Йомағолова, Морат Рафиҡов, Айҙар Шәмсетдинов, Айнур Ғәбитов ҡатнаша. Яңы спектаклдә мөхәббәт, ғаилә, ҡәйнә менән килен араһындағы мөнәсәбәттәр темалары ҡуҙғатыла, улар һәр ваҡыт көнүҙәк. Сюжет үҙәгендә - ҡатын-ҡыҙ бәхете хаҡында хыялланған йәш ҡыҙ. Ошо бәхеткә ирешер өсөн уға күп һынауҙар аша үтергә тура килә.

Июлдә повесть Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә айырым китап булып донъя күрҙе. Был иһә йәш яҙыусы һәм журналистың беренсе китабы. Китапта ошо уҡ исемдәге повесть һәм тағы ла бер нисә әҙәр бар. Заһиҙә Мусинаның шау-шыу тыуҙырған "Килен" повесы уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Әҙәр авторҙың әсәһенең тормошонда булған хәл-ваҡиғаларға таянып яҙылған.

"ШАҒИР КӨНДӘЛЕГЕ" УҢЫШЫ

Барнаулда үткән XXV Бөтә Рәсәй Шукшин кинофестивалендә "Шағир көндәлеге" нәфис фильмы "Иң яҡшы режиссер эше" номинацияһында еңеүсе булды.

Был яңылыҡ менән фильм режиссеры Булат Йосопов уртаҡлашты. "Жюриға һәм ойоштороусыларға "Әхлаҡ - хәҡиҡәт" тигән иҫ киткес кинофестиваль өсөн рәхмәт әйткем килә. Был әле тормошҡа ашырылмаған биш көнлөк хис-тойғолар, аралашыу һәм яңы дуҫтар ине. Шуны әйткем килә: был бөтә проект командаһының һәм, әлбиттә, республикабыҙҙың эшен баһалау һәм таныу, - тине Булат Йосопов. - Фестиваль программаһы, фильмдар иҫ киткес шәп булды. Бер һүҙ менән әйткәндә, бөйөк Рәсәй киноһы байрамы үтте! XXV Бөтә Рәсәй Шукшин кинофестиваленең Гран-приһына "Иванһыҙ мине ерләмәгеҙ" фильмы лайыҡ булды (режиссёры Любовь Борисова). Был фильм Өфөлә "Һинең юлың" кинофестивалендә күрһәтелгәйне".

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа арналған һәм халыҡ аҡсаһына төшөрөлгән "Шағир көндәлеге" фильмы бынан алда ла Рәсәй һәм халыҡ-ара фестивалдәрҙә күрһәтелгәйне.

БӘЙГЕЛӘ - КИНО ТӨШӨРӨҮСЕЛӘР!

1 августан кинематография өлкәһендәге проекттар өсөн махсус гранттар конкурсы башланды.

Ул кино төшөрөү менән шөғөлләнгән коммерцияға ҡарамаған ойошмаларға ярҙам күрһәтеү өсөн уҙғарыла. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. "Беҙҙең ҡыҙыҡлы, сағыу, талантлы кино тағы ла күберәк булһын ине. Төрлө жанрҙағы яңы фильмдар төшөрөлһөн, тамашасыларҙың уларҙы ҡарау мөмкинлеге булһын", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Заявкалар 1 сентябргә тиклем ҡабул ителә, декабрь айында йомғаҡ яһала. Гранттың күләме - 15 миллион һумға тиклем.

Радий Фәрит улының һүҙҙәренсә, илебеҙ киноһын мөмкин тиклем күберәк тамашасы ҡарай алһын өсөн тотош республикала кинозалдар асыла. Кино фонды конкурсҡа йомғаҡ яһаны, хәҙер Башҡортостанда - Архангелдә, Иҫәнғолда, Мишкәлә һәм Яңы Балаҡатайҙа тағы 4 яңы кинозал барлыҡҡа киләсәк. 2018 йылдан республикала йәмғеһе 32 кинозал асылған. "Был һәйбәт темп, артабан барабыҙ", - тип йомғаҡ яһаны Башҡортостан Башлығы.

ҠУРАЙ - МӘҘӘНИ МИРАҪЫБЫҘ

XIII Бөтә Рәсәй "От чистого истока" визуаль ижад фестивалендә Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Ҡурай" документаль фильмы беренсе урынға лайыҡ булды. Режиссеры - Радик Килмәмәтов.

Еңеүселәрҙең эштәре 30 июлдә күрһәтелде. Был проектты булдырыуҙың төп идеяһы ҡурайҙың башҡорттарҙың матди булмаған мәҙәни мираҫы булыуын күрһәтеү ине. Бында республиканың танылған башҡарыусыларының милли уйын ҡоралына яңыса ҡарашы сағылдырылған.

- Фильмдың үҙенсәлектәренең береһе - музыка ҡоралының һаҡланғанлығы технологияһын күрһәтеү. Был алымды беҙҙең көндәргә танылған ҡурайсы Ғата Сөләймәнов килтереп еткергән. Ошо технология хаҡында уның уҡыусыһы Марат Тулыбаев һөйләне, - тип билдәләнеләр халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтендә.

Фестиваль еңеүселәрен 28-31 июлдә Иркутск өлкәһенең Ольхон районында бүләкләнеләр. Йомғаҡлау этабында фестивалдең жюри ағзалары һәм кино сәнғәте өлкәһендәге эксперттар ҡатнашлығында оҫталыҡ дәрестәре, ижади кинолабораториялар ойошторолдо.

"БАШҠОРТ КАНИКУЛДАРЫ"Н КӨТӘБЕҘМЕ?

Башҡортостанда "Башҡорт каникулдары" тревел-шоуының икенсе миҙгелен төшөрөү башланды. Икенсе гранттар конкурсында еңеү яулаған проект Башҡортостан Башлығы гранттары фонды ярҙамында тормошҡа ашырыла.

Проект республика халҡында һәм ҡунаҡтарында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Тапшырыуҙа республиканың популяр турҙары, ял итеү урындары хаҡында һөйләйҙәр. "Башҡорт каникулдары"ның тәүге миҙгелендә Ғафури, Мәләүез, Бөрө, Нуриман, Стәрлетамаҡ, Краснокама, Өфө, Белорет райондары менән таныштырҙылар. Сығарылыштар бер нисә тапҡыр "БСТ", "Вся Уфа", "Башҡортостан 24", "ОТР" телеканалдарында күрһәтелде. Һигеҙ серияны ла проекттың "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге рәсми төркөмөндә һәм terrabashkiria сайттарында ҡарарға мөмкин. "Башҡорт каникулдары" тревел-шоуының икенсе миҙгелендә тағы нимә ғәжәпләндерер һәм уның алып барыусылары Дмитрий Каретко, Альбина Ҡасимханова ниндәй мажараларға юлығыр - ошо турала быйыл көҙ Башҡортостан юлдаш телеканалында белербеҙ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

АЛЛА ШАЙТАНЫНАН... бәндә шайтаны яман

Дошмандан бер һаҡлан, яман дуҫтан мең һаҡлан.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Сынйырҙарын ысҡындырыу өсөн кешегә бар мөмкинлектәр һәм саралар бирелгән.

(Оноре Мирабо).

Икеләнеү - ул дошман: тәүәккәл аҙымдан ҡурҡырға мәжбүр итеп, ул беҙҙе яулап була торған нәмәләрҙән мәхрүм итә.

(Вильям Шекспир).

Үҙенең ахмаҡ икәнен белгән ахмаҡ - ысын дәрәжәһендә аҡыл эйәһе, ә инде үҙен иң аҡыллыһы тип уйлаған кеше - иң ахмағы.

(Будда).

Хәҡиҡәткә ғашиҡ кешегә шағир булырға ла, бөйөк булырға ла тырышырға кәрәкмәй. Ул ысын мәғәнәһендә шағир һәм бөйөк.

(Жюль Ренар).

Һәр хәҡиҡәтте лә ҡысҡырып әйтеп булмай: берәүһен үҙең өсөн әйтмә, икенсеһен икенсе берәү хаҡына өндәшмә.

(Бальтасар Грасиан).

Ысын дуҫ һәр нәмәлә беҙгә оҡшарға тырышмаясаҡ, һәр ҡылығыбыҙ өсөн маҡтарға ла атлығып тормаясаҡ, ул беҙҙәге иң яҡшыны ғына ҡабул итәсәк.

(Плутарх).

Күҙҙәр берҙе һөйләп, тел икенсене һөйләгәндә, тәжрибәле кеше уларҙың тәүгеһенә ышана.

(Ралф Эмерсон).

Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ел бик матур бер Сәскәне тап итә һәм уға ғашиҡ була. Ул Сәскәне ипләп кенә иркәләй, наҙлай, Сәскә лә уның хистәренә ҡаршы хуш еҫтәрен тағы ла нығыраҡ таратып ебәреп яуап бирә. Ләкин был Елгә аҙ тойола, "Әгәр ҙә мин Сәскәгә бөтөн көсөмдө һәм ҡеүәтемде бирһәм, ул да миңә көслөрәк тойғолар менән яуап бирер", тип уйлай ул һәм Сәскәгә шул тиклем көслө итеп һөйөү ҡулышын өрә башлай. Сәскә ундай көстө күтәрә алмай һәм һабағынан һынып төшә. Ел уны күтәрергә һәм терелтергә маташа, ләкин булдыра алмай. Сәскә күҙ алдында һулый. Шул саҡта ел: "Мин һиңә бар һөйөүемде бирҙем, ә һин һынып төштөң. Тимәк, һиндә миңә ҡарата ундай һөйөү көсө булмаған", - тип ярһып ҡысҡыра. Ләкин Сәскә бер ни тип тә яуап бирмәй. Ул үлгән була.

Яратҡандар шуны аңларға тейеш: Мөхәббәт ярһыу көсө менән үлсәнмәй, уға наҙлы, һаҡ мөнәсәбәт кәрәк. Бер тапҡыр һындырғансы, ун тапҡыр тыйылырға кәрәк".

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
4 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 1047